ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 сентябрь (һарысай) 2017

№36 (766)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Барыһы ла үҙебеҙҙән тора



6

Ауырығың килмәйме?

Башҡорт милли ризыҡтары менән туҡлан!



7-9

Бала саҡ уйындары



12

Бөрйән балы тағы данланды




13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Сентябрҙән 2018 йылдың беренсе яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу миҙгеле яңы хаҡтар менән башлана. Шулай итеп, 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 554 һум 82 тингә, 50673 индекслыһына (ойошмалар) - 584 һум 82 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II группа инвалидтары 499 һум 08 тингә яҙыла ала. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!***

*БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ*

# ИКЕҺЕ ИКЕ ТӨШӨНСӘ



**Ун биш йыл элек БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты булараҡ, Башҡортостан Республикаһы мәктәптәрендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүҙе индерергә тәҡдим итеүселәрҙең береһе булдым. Шуға ла бөгөн башҡорт теле тирәләй барған шау-шыуҙар мине лә борсой.**

Берҙән, бөгөн туған тел һәм дәүләт теле төшөнсәләренең төрлө булыуын онотабыҙ. Телдәр мәсьәләһендә иң мөһим ике хоҡуҡи акт бар - Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы. Шулай уҡ "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында" Федераль закон һәм "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закон бар. Һүҙҙе Башҡортостан Республикаһы Конституцияһынан башлайыҡ һәм тәүҙә "дәүләт теле" терминына аныҡлыҡ индереп үтәйек. Дәүләт теле - ул дәүләттә өҫтөнлөклө булған тел. БР Конституцияһынан цитата килтерәм: "Башҡортостан Республикаһының дәүләтселеге Башҡортостан Республикаһы, Рәсәй Федерацияһының хакимиәт даирәһе сиктәренән һәм Рәсәй Федерацияһы менән Башҡортостан Республикаһының берлектәге хакимиәт даирәһенә ҡараған Рәсәй Федерацияһы вәкәләттәренән тыш, дәүләт властының бөтә тулылығына эйә булыуында, үҙ территорияһы, халҡы, дәүләт власы органдары системаһы, үҙ Конституцияһы һәм закондары, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәре һәм дәүләт символдары булыуында сағылыш таба", - тиелә унда. Башҡорт теле, үҙ дәүләтселеген булдырған халыҡ теле булараҡ, дәүләт теле статусына эйә тип танылған һәм ошо дәүләт территорияһында бөтәһе тарафынан да өйрәнелергә тейеш. БР-ҙың "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законда ике дәүләт телен дә бер тигеҙ эшләтеү бурысы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

Ил Президенты Владимир Путин туған телдәр тураһында һөйләгән саҡта дәүләт телдәрен дә күҙ уңында тотҡандыр, тип уйламайым. Сөнки Рәсәйҙә бөтәһе 21 субъект, шуларҙың ун һигеҙенең үҙ дәүләт теле бар. Әле үрҙә әйтелгән законда дәүләт власы органдарының башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә булышлыҡ итергә тейешлеге тураһында ла әйтелә, быға тиклем республикала был йөкләмә үтәлә килде. Ә беҙ бөгөн дәүләт үҫешендә яңы баҫҡысҡа күтәрелергә торған кеүек эш итәбеҙ. Улай түгел, барыһы ла үҙ урынында ҡала: Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы ла, Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы ла эшләй. Беҙ ошо документтарға ярашлы, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеү өсөн мөмкинлектәр тыуҙырыу тураһындағы йөкләмәне иҫкә төшөрөп, ошо бурысты үтәүҙе үҙ өҫтөбөҙгә алырға тейешбеҙ. Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 5-се статьяһы башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға гарантия бирә, был Конституцияның төп бурысы. Бында Рәсәй Федерацияһының тигеҙ хоҡуҡлы субъекттары һаналып китә, улар төрлө һәм һәр береһе үҙенсәлекле. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының Конституцияһы бар, ҡайһы бер субъекттар уставтарға ярашлы йәшәй. Әгәр кемдер дәүләт теле һәм туған тел төшөнсәләрен бутай икән, бары тик уларға аңлатырға ғына кәрәк. Дәүләт белем биреү стандарттарын төҙөгән кешеләргә мөрәжәғәт итеп, Рәсәй Федерацияһының егерме бер субъектында үҙ дәүләтселеген һәм үҙ дәүләт телдәрен билдәләргә хоҡуҡлы халыҡ йәшәй, тигән уйҙы еткерһәк, был мәсьәләгә асыҡлыҡ инер, тип уйлайым.

**Светлана ПАРФЕНОВА,
хоҡуҡ фәндәре кандидаты,
БДУ доценты.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ни өсөн мәктәптәрҙә ир-егеттәр мөғәллимлек итмәй башланы?



***Әлфир ҒАЙСИН, Өфө Художестволы-гуманитар колледжы директоры:*** Бының бер нисә сәбәбе барҙыр, тип уйлайым. Беренсенән, дөйөм белем биреү системаһында үҙгәрештәр бик күп. Йыш ҡына федераль йә төбәк кимәлендә уҡытыуға ҡағылышлы яңы тәртиптәр уйлап табылып ҡына тора. Ул реформаларҙың уйланып етелгәне бар, һынау үтергә тейешлеләре бар. Ғаилә башлығы булған ир-егеттәр бына шундай бер туҡтауһыҙ үҙгәрештәрҙән, яңылыҡтарҙан да ҡурҡа ул. Сөнки ул үҙенең киләсәген генә түгел, ҡатынының, балаларының киләсәген дә ҡайғыртырға бурыслы. Киләһе йылда мәғариф системаһында ниндәй үҙгәреш индерелер, эш сәғәттәре ҡыҫҡартылырмы, йә бөтөнләй был дәресте уҡытыу программаһынан алып ташларҙармы, тип көтөп ултырыуға ҡарағанда, ир кеше башҡа берәй һөнәр үҙләштереп, аҡса эшләй, ышанысло йәшәй. Әйткәндәй, ир-егеттәрҙең мәктәпкә эшкә килмәүенең тағы бер сәбәбе - ул эш хаҡы. Ғәҙәттә, ир-егеттәр математика, физика, химия, биология кеүек фәндәрҙе үҙләштерә. Был өлкәләрҙә юғары белеме булған, компетентлы йәш хеҙмәткәргә башҡа өлкәләрҙә лә эш урыны тәҡдим итеүселәр, күпкә юғары хаҡ түләүселәр табыла.

Әлбиттә, белем усаҡтарына көслө зат вәкилдәре эшкә килеүен бик теләйбеҙ, улар кәрәк. Сөнки балалар ҙа ир-егет педагогтың дәресен яҡшыраҡ үҙләштерә, тиҙерәк уртаҡ тел таба, тәртип һәм абруй тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында эшләгән саҡта 198 хеҙмәткәрҙең етәүһе генә ирҙәр булһа, хәҙер эшләгән урынымда - Өфө Художестволы-гуманитар колледжында 46 педагог араһында дүрт кенә ир кеше бар. Башҡа белем усаҡтарында ла шундай уҡ хәл күҙәтеләләр, тип уйлайым. Был мәсьәләне бер аҙ ыңғайға көйләп ебәреү өсөн федераль кимәлдә уйланылған, маҡсатлы мәғариф сәйәсәте алып барылырға тейеш. Шул осраҡта ғына беҙ мәктәпкә ир-егеттәрҙе кире ҡайтара һәм уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәрә алабыҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

**✓ Бөгөн йәмғиәттә милли кейемдәргә һәм биҙәнеү әйберҙәренә ҙур ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килеүен глобалләшеү һөҙөмтәһендә буталып киткән тормошто бер аҙ яйға һалыу ысулы, тип тә ҡарарға була.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# БӘҪЕН ЕБӘРМӘЙЕК...

## ҡомартҡы үҙенсәлектәренең

***Азат ҒАРИПОВ, Башҡорт дәүләт университетының Учалы вәкиллеге уҡытыусыһы:*** Башҡорт халҡының милли кейеме, милли йола, ғөрөф-ғәҙәттәрен тергеҙеү буйынса әүҙем генә эш алып барабыҙ уҡыу йортобоҙҙа. Үҙем башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәнеү әйберҙәрен ентекле өйрәнәм һәм ошо өлкәлә байтаҡтан эҙләнәм. Һуңғы йылдарҙа милләттәштәр араһында милли кейемгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу көсәйеүен беләбеҙ, быны бик ыңғай күренеш итеп ҡабул итәбеҙ. Оло быуын кешеләре генә түгел, йәштәр ҙә хәҙер матур итеп башҡорт милли биҙәүестәре тағып, милли кейемдәр тектереп кейә.

Әммә шул да күҙәтелә: ҡайһы берәүҙәр, стилләштерәм, тип, боронғо биҙәүестәр өлгөләренә хилафлыҡ килтерә. Бер уйлап ҡараһаң, йәштәрҙең шул уҡ селтәрҙе (яға, һаҡал) заманға яраҡлаштырып эшләп тағып йөрөүе насар ҙа түгел кеүек. Ләкин дөрөҫ эшләнмәгән өлгө берәүҙән икенсеһенә күсә барып, артабан киләсәк быуындарға беҙҙең боронғо, традицион биҙәнеү әйберҙәр өлгөһө барып етмәҫкә лә мөмкин бит. Былай ҙа быуындан-быуынға тапшырыла килеп тороп ҡалған ҡомартҡылар бик һирәк кешеләрҙә генә һаҡлана. Бына шуға, милли кейем теккәндә йәки ҡатын-ҡыҙҙарҙың биҙәнеү әйберҙәрен эшләгәндә уларҙы һәр кем үҙ төбәгенә хас булған, борондан килгән өлгөгә ҡарап башҡарһын ине, тигән кәңәшем бар. Бөгөн донъя халыҡтары глобалләшеү шауҡымына бирелә бара. Беҙҙең кейемдәргә генә түгел, ә холоҡ-фиғелебеҙгә, телебеҙгә лә Көнбайыш еленең йоғонтоһо ҡағылған. Шундай заманда киләсәк быуынға мираҫ итеп тапшыра торған милли кейемебеҙҙе, биҙәүестәрҙе үҙ ҡулыбыҙ менән боҙмаһаҡ ине.

Башҡорт халҡының кейем өлгөләрен өйрәнһәң, унда бер генә биҙәк тә, тота килеп, оҫтабикә шулай теләгән өсөн генә эшләнмәгән. Һәр тәңкә, мәрйен, таш, ҡусҡар, төҫлө таҫманың үҙ тәғәйенләнеше бар һәм ни өсөн тап шул урынға тегеп ҡуйылыуының сәбәбен табырға мөмкин. Ул ғына ла түгел, ҡатын-ҡыҙҙың ниндәй төбәктә йәшәүенә, ҡайһы ырыуға, араға ҡарауына, уның йәмғиәттәге статусына, йәшенә һәм башҡа сифаттарға ҡарап та биҙәнеү әйберҙәрендә айырмалыҡтар табырға була. Әлегә иһә, беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар эшләп таҡҡан күп селтәрҙәрҙә шундай нескәлектәр иҫәпкә алынмаған. Ҡайһы берәүҙәр хатта селтәрҙе, боронғоға хас булмаҒанса, ялтырауыҡлы, ала-сола, сағыу итеп эшләп ҡуя. Беҙҙең милли кейемдәге деталдәр, биҙәүестәр матурлыҡ өсөн генә уйлап сығарылмаған, улар яман күҙҙән, ауырыуҙарҙан һаҡланырға ла ярҙам иткән. Бик уйлап, ҡулайлаштырып эшләнгән, ни булһа ла. Тегелешен, тышҡы ҡиәфәтен үҙгәртеп, беҙ кейем йә биҙәнеү әйберенең тәғәйенләнешен дә үҙгәртәбеҙ.

Бөгөн йәмғиәттә милли кейемдәргә һәм биҙәнеү әйберҙәренә ҙур ҡыҙыҡһыныу барлыҡҡа килеүен глобалләшеү һөҙөмтәһендә буталып киткән тормошто бер аҙ яйға һалыу ысулы, тип тә ҡарарға була. Шуға, милли кейем теккәндә лә тарихты, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы, йәшәгән төбәктең үҙенсәлектәрен өйрәнеп эшләү үҙ көйөбөҙҙө көйләп йәшәүебеҙҙе дауам итеүгә тиң. Үткәнде белмәй тороп, киләсәкте күҙаллап булмай, тигәндәр. Милләттәштәр ошоно иҫендә тотһон, заман артынан ҡыуып, тарихты, традицияларҙы, башҡорт кешеһен башҡорт итеп тотҡан үҙенсәлектәрҙе юғалтмаһын ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Ни өсөн мәктәптәрҙә ир-егеттәр мөғәллимлек итмәй башланы?



**(Башы 1-се биттә).**

***Римма ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Республика политехник лицей-интернаты директоры:*** Быны сәбәптәре күптән билдәле һәм уны барыһы лә белә. Ир-егеттәр мөғәллимлек итһен өсөн мәғариф системаһына иғтибар кәрәк, йәғни уҡытыусы хеҙмәте тейешенсә баһаланырға тейеш. Уҡытыусының ир-егет булыуы ғына түгел, уның ысынлап та балалар өсөн өлгөлө, юғары квалификациялы, лайыҡлы шәхес булыуы ла мөһим. Бындай яҡшы сифаттарға эйә уҙамандар, ғәҙәттә, үҙ баһаһын яҡшы белә - тырышлығын баһаламаған ерҙә тир түгергә риза түгел. Бигерәк тә йәш белгестәр оло быуын кешеләренең энтузиазмын аңламай, ҡабул да итмәй. Уҡытыусы һөнәренең абруйы ла юғалып бара хәҙер, ата-әсәләренән күреп, балалар ҙа тәрбиәсе, уҡытыусы һүҙенә ҡолаҡ һалырға ашыҡмай. Ә йәмғиәттә бөтәһе лә бер-береһенә бәйле, бала тәрбиәһендә ғаилә йә мәктәптең ролен бер-береһенән өҫтөн ҡуйып булмай.

Мәктәптә лә бала, өйҙәге кеүек, кешеләр менән мөнәсәбәт ҡорорға, тәрбиәгә өйрәнә, белем алыу менән генә сикләнмәй. Шуға күрә, яңғыҙ ҡатын ир баланы яңғыҙы тәрбиәгә өйрәтеп үҫтерә алмаған кеүек, мәктәптә лә ир-егет уҡытыусы булмауы баланың тәртибенә, холҡона ҙур йоғонто яһай. Ғаилә көсө - атай һәм әсәйҙең икеһе лә булыуына, көслө мәктәп сере лә - ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ мөғәллимдәр барлығында. Әлбиттә, киләсәктә дәүләт тарафынан мәғариф системаһына ҙур иғтибар бүленеп, хеҙмәт хаҡтары күтәрелеп, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ уҡытыусылар һаны тигеҙләнә төшһә, бик яҡшы булыр ине.

***Ғәли ХИСМӘТУЛЛИН, тарих уҡытыусыһы:*** Мәктәптәрҙә ҡатын-ҡыҙҙың өҫтөнлөк алыуы совет дәүерендә барлыҡҡа килде, сөнки ир-ат менән хоҡуҡи тигеҙлек алған белемле ҡатын-ҡыҙ өсөн уҡытыу-тәрбиә өлкәһенән дә ҡулайыраҡ урын табыуы ауыр. Ә ир-ат, ғәҙәттәгесә, ер һәм сәнәғәт, сәйәсәт, йәмғиәтте, илде үҙгәртеп ҡороу менән мәшғүл булды. Был ситуация мәктәп файҙаһына түгел. Тик ҡатын-ҡыҙҙар ҡарамағында булған ир-егет ирлек сифаттарын юғалта башлай, сөнки был осраҡта тәрбиә "ҡатын-ҡыҙҙар проекты"на ярашлы башҡарыла. Ҡатын-ҡыҙ ир баланы ла өй, ғаилә ағзаһы рәүешендә күрә һәм тәрбиәләй, уның ҡараштары ла сикләнгәнерәк. Бында кем үҙаллы, үҙһүҙле, ныҡышмалы, инициативалы - баҫырырға әҙер генә торалар. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ ир-атты буйһоноусан итеп тәрбиәләргә теләй. Буйһонорға күнеккән ир-аттан һәйбәт ҡол ғына сығыуы мөмкин. Ир-егеткә лидерлыҡ өҫтөнлөгө тәбиғәттән бирелмәһә, был хәл Ҡөрьәндә лә теркәлмәҫ ине. Ир-егетте йәмғиәт кимәленә тик ир-егет кенә күтәрә ала. Мәктәптә эшләгән ир уҡытыусының абруйы ҙур, уны малайҙар ҙа, ҡыҙҙар ҙа берҙәй үҙ итә, уға оҡшарға, әйткән һүҙенән сыҡмаҫҡа тырыша. Ир уҡытыусыларҙың ил, донъя кимәлендәге проблемалар менән ҡыҙыҡһыныуы, ваҡ-төйәк мәсьәләләргә иғтибар итеп бармауы, һүҙ йөрөтмәүе, уҡыусыларҙы тиң күрергә тырышыуы уларҙың мәктәптәге абруйын күтәрә, уларға ихтирам уята. Ир-аттар күберәк булған педагогик коллективта үҙ-ара мөнәсәбәттәр ҙә тыныcыраҡ була.

***Зәки ӘЛИБАЕВ, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ доценты:*** Педагогтарға ғаиләһен ҡарарлыҡ аҡса түләһәләр, мәктәптән ир-егеттәрҙе ҡыуып та сығара алмаҫ инек хатта. Сөнки көслө зат өсөн һөнәр һайлағанда, эш урыны эҙләгәндә хеҙмәт хаҡы - төп фактор. Өфө нефть техник университетына егеттәр киләсәктә аҡса эшләр өсөн бара, нефтсе эшендә бер романтика ла юҡ.

Белем усағына йәш белгестәр килмәүендә уҡытыусы эшенең ауырлығына һылтанабыҙ. Кәм тигәндә, утыҙ-ҡырҡ мең эш хаҡы түләнһә, көс етмәҫлек эште лә йырып сығырлыҡ ынтылыш табыр ине ир-егет. Бөгөн беҙ ҡатын-ҡыҙҙар иңенә шундай ҙур яуаплылыҡ һалғанбыҙ, ул ғаиләлә лә, мәктәптә лә киләсәк быуынды үҙе тәрбиәләй. Был хәлдең кире һөҙөмтәләрен күҙәтеп йәшәйбеҙ - малайҙар үҫеп еткәс, әрме хеҙмәтен үтәүҙән ҡаса, эшләмәй, ата-әсәһе йә ҡатыны елкәһендә ята, ғаиләһе һәм балалары өсөн яуаплылыҡ алмағандары ла бар. Сөнки балаға ҡатын-ҡыҙ тәрбиәһе генә етмәй, уға ғаиләлә лә, мәктәптә лә ир-егеттең ҡаты ҡулы кәрәк. Беҙ уҡыған заманда физика, математика, хеҙмәт һәм физкультура предметтарын ир уҡытыусылар алып бара торғайны. Уларҙың дәресендә тыңламай, иғтибарһыҙ ултырып, шаярып йә дәрес барышын боҙоп ҡара. Белем дә алғанбыҙ, тәрбиә-тәртип тә булған. Был мәсьәләне хәл итеү әмәлен нәҡ һәр ғаилә башлығын ҡыҙыҡтырған тәҡдим - юғары эш хаҡы һәм лайыҡлы тормош көтөү мөмкинлеге биреүҙә генә күрәм.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт наградаларын тапшырҙы. Төрлө өлкәләрҙә эшләгән 52 хеҙмәткәрҙең һөнәри ҡаҙаныштары, шулай уҡ йәмәғәт эшмәкәрҙәре һәм дин әһелдәре ордендар, почет грамоталары, исемдәр менән баһаланды.

✓Шишмә районына эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Шөңгәккүл ауылында Шишмә май экстракцияһы заводының ("Сигма" холдингына инә) сеймал базаһында булды. Билдәләнеүенсә, көн һайын завод 1000 тонна орлоҡ эшкәртеп, көнбағыш майы һәм башҡа продукттар сығара. База биләмәһендә заманса элеватор төҙөлгән. Уға инвестициялар 800 миллион һум тиерлек тәшкил иткән. Элеватор комплексында өс ашлыҡ киптергес һәм ун силос соҡоро бар.

✓Владимир Путин, Сямэнь ҡалаһында БРИКС саммиты эшенә йомғаҡ яһап, БРИКС Яңы үҫеш банкының төп бурыстарын әйтеп үтте. Билдәләнеүенсә, БРИКС банкы линияһы буйынса ҙур инвестиция проекттары әҙерләнгән, шуларҙың өсәүһе - Рәсәйҙеке. Улар - суд системаһын камиллаштырыу, Волга бассейны ҡалаларының һыу-хужалыҡ объекттарын яңыртыу һәм Өфөлә юл төҙөү (ҡала аша М7 һәм М5 трассаларын берләштергән Көнсығыш сығыу юлы).

✓Башҡортостандағы "Шүлгәнташ" ҡурсаулығына республикала һаҡланып ҡалған үҙенсәлекле кәсеп - солоҡсолоҡ хаҡында фильм төшөрөү өсөн ARTE француз-немец телеканалының ижади төркөмө килде. Канал бал тураһында төрлө илдәрҙә, шул иҫәптән Рәсәйҙә төшөрөлгән 16 фильм сығарырға йыйына. ARTE каналы тамашасылары башҡорт балы хаҡында 26 минутлыҡ документаль фильмды 2018 йылдың башында ҡарай ала.

✓Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығы бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарын тәьмин итеү өсөн һатыуға 53 лот билдәләнә. 17,9 мең кубометрлыҡ ағас әҙерләүҙең дөйөм күләме Әлшәй, Архангел, Бәләбәй, Балаҡатай, Бөрө, Иглин, Ҡариҙел, Күгәрсен, Туймазы һәм Өфө урмансылыҡтары биләмәһендә. Аукциондарҙа ҡатнашыу өсөн ғаризалар 11 сентябрҙән 29-на тиклем ҡабул ителә.

✓ *Әгәр мин Татарстанда йәшәһәм, был мәсьәләне ҡәрҙәштәремә ихтирам йөҙөнән, улар тауышына ҡушылып күтәрер инем. Әгәр, мәҫәлән, Чечен Республикаһында йәшәргә тура килһә, ҙур ҡәнәғәтлек менән уларҙың телен өйрәнер инем.*



БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ

# МАҠСАТ...

## толерантлыҡ һәм ихтирам тәрбиәләү



**Баш ҡаланың 79-сы мәктәбендә башланғыс синыфтарға белем биреүсе тәжрибәле уҡытыусы Гүзәл КӘРИМОВА менән әңгәмәләшбеҙ:**

**➔ Һеҙ дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу яҡлы. Бының сәбәптәрен телде уҡытырға теләмәгәндәр ҙә ҡабул итерлек кимәлдә нисек аңлатырһығыҙ?**

- Минеңсә, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыуҙың бик күп ыңғай яҡтары бар. Беренсенән, башҡорт телен дәүләт кимәлендә өйрәнеү башҡорттарҙа үҙ-үҙендә ышаныс тыуҙырҙы, улар бер кемдән дә ҡурҡмай, оялмай, үҙ телендә һөйләшә башланы. Дөрөҫөн әйткәндә, уға тиклем ике башҡорт урамда, транспортта үҙ-ара туған телдә аралашырға тартына ине бит. Икенсенән, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу индерелгәнгә тиклем атай-әсәй туған телде уҡытыуға битарафыраҡ булды, сөнки, сер түгел, былдай төркөмдәрҙеге балаларға бер аҙ ҡырыныраҡ, кәмһетеберәк ҡаранылар. Ә инде телде дәүләт кимәлендә уҡытыуҙы индергәндән һуң балаларын туған тел уҡытылған төркөмдәргә биреүселәр артты. Элек үҙен өҫтөн тотоусылар ҙа яйлап әсә телен өйрәнеүгә йөҙ борҙо, мәҙәниәте, йолалары, гәрәф-ғәҙәттәре менән ҡыҙыҡһына башланы, сөнки дәүләт теле булараҡ уҡытылған башҡорт теле дәрестәрендә уҡытыусылар башҡорт телен генә өйрәнмәй, "Минең шәжәрәм", "Минең ғаиләм байрамдары", "Халҡымдың милли кейемдәре" һ.б. проекттар буйынса эшләй. Был байрамдарҙа синыфтағы төрлө милләт балалары берләшеп, класташтарын үҙ милләте менән таныштыра. Йәғни башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү төрлө милләт балаларын берләштерә. Ә был иһә дәүләтебеҙҙең өҫтөнлөклө маҡсаттарының береһе булап тора. Өсөнсөнән, берәү ҙә аҙнаһына бер сәғәт өйрәнеп, балаларҙың башҡортса һөйләшә башлауына өмөт итмәй, бының өсөн милләтара аралашыу теле - Пушкин теле, беҙ ихтирам иткән рус халҡының бөйөк теле бар. Икенсе дәүләт телен өйрәнеүҙең маҡсаты, минеңсә, толерантлыҡ һәм ихтирам тәрбиәләүҙә. Ә ихтирам бер яҡлы ғына булмай.

**➔ Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға кемдәр ҡаршы, тип уйлайһығыҙ?**

- Иманым камил, атаәсәләрҙең күпселеге башҡорт теленә, уны дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә ҡаршы түгел. Бары тик уларҙы ишетергә, бергә йыйылып, нимәне үҙгәртергә кәрәклеген асыҡларға, килеп тыуған хәл сәбәптәрен табырға һәм уларҙы бөтөрөргә тырышырға, дәғүә белдергән ата-әсәләргә рәхмәт әйтергә кәрәк. Тимәк, улар телде әле ҡулланылған ысул менән өйрәтеүгә битараф түгел. Әгәр шуға хоҡуғым булһа, башҡорт теленә һәм уны дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә ҡаршы килгән кешеләрҙән халҡым исеменән ғәфү үтенәм, сөнки күптәрҙә был хис башҡорт теле уҡытыусыларының квалификация кимәле һәм компетентлығының тап килмәүе, был мәсьәлә буйынса мәктәп хакимиәтенең компетентлы булмауы сәбәпле дөрөҫ төҙөлмәгән программа һөҙөмтәһе, тип уйлайым. Бындай хәл килеп сығыуға тағы бер сәбәп: шовинистик ҡарашлы, башҡорт теленә ҡарата нәфрәт уятыу, башҡорттар һәм татарҙар, шулай уҡ башҡорттар менән рустарҙың араһын боҙоп, дошманлыҡ тыуҙырыу идеяһын алға һөргән айырым төркөмдән аҡыллы ойошторолған "хеҙмәте" үҙ емештәрен бирә бөгөн.

**➔ *Әгәр һеҙгә: "Ошо тартҡылашты, үҙ һүҙегеҙҙе әйтеп, һеҙ туктата алаһығыҙ!" - тиһәләр, республикала йәшәгән барса халыҡтарға нимә тип мөрәжәғәт итер инегеҙ?***

- Башҡортостанда йәшәүсе күп милләтле халыҡтар, бәлки, дошманлыҡ балтаһын артҡа ташлап, мөнәсәбәттәрҙе нығытып, барлыҡ телдәргә һәм милләттәргә толерантлы, ихтирамлы булып, бергәләшеп алға барырбыҙ? Бырыбыҙ ҙа, әйҙәгеҙ, Рәсәй Федерацияһының дәүләт теле булған - милләт-ара һәм киләсәктә халыҡ-ара буласаҡ рус телен, шулай уҡ күп милләтле Башҡортостандың төрлө милләттәренең мәҙәниәтен, йолаларын, гөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнеүгә һәм яҡлауға ярҙам иткән башҡорт телен өйрәнәйек. Сөнки туған теленә ихтирам булғанда ғына башҡа телдәргә лә ихтирам уяна. Беҙҙең күп милләтле илебеҙ өсөн иң төп маҡсат ошо.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

# УҠЫУСЫЛАРЫМА ӨНДӘШӘМ



**Социаль селтәрҙәрҙә башҡорт телен уҡытыу менән бәйле әсенеүле фекерҙәремде яҙғандан һуң миңә ҡайһы бер рус телле уҡыусыларым тарафынан тәнҡит уҡтары яуҙы. Шуныһы үкенесле: улар араһында ижадымды уҡыусылар, үҙҙәрен күреп белмәһәм дә, мин ихтирам иткән кешеләр ҙә булды. Бер ваҡытта ла кешеләрҙе милләтенә ҡарап айырманым, һеҙ кем: русмы, татармы, бүрәтме, йәһүдме - минең өсөн барыбер. Тәү сиратта, һеҙ минең өсөн - үҙ ҡиммәттәре һәм тарихы булған кешеләр. Бынан тыш, мин ислам динендәмен, ә диндә барыһы ла тиң, берәү ҙә расаға йәки милләткә бүленмәй.**

Үҙ фекеремдә башҡорттарҙы хуплау ниәтенән яҙҙым, сөнки туған телде онотorға, уны онотторооға юл ҡуйырға ярамай. Эйе, туған телде өйрәнеү ҙә, милли йолалар өлгөһөндә тәрбиәләнеү ҙә үҙендән, ғаиләндән башланырға тейеш, әммә туған телде ҡулланыу даирәһе ғаиләнмөхитенән ары китмәй икән, ул яйлап онотоласаҡ. Үҙемдән дә алып әйтәм быны. Шуға күрә, туған башҡорт телен өйрәнеү, һаҡлау, үҫтереү мәсьәләләрен республика кимәлендә хәл итеү кәрәк. Башҡорт теле өсөн генә түгел был ҡағиҙә. Әгәр мин Татарстанда йәшәһәм, был мәсьәләне дин буйынса ҡәрҙәштәремә ихтирам йөҙөнән, улар тауышына ҡушылып күтәрер инем. Әгәр, мәҫәлән, Чечен Республикаһында йәшәргә тура килһә, ҙур ҡәнәғәтлек менән уларҙың телен өйрәнер инем. Мәктәп программаһы сиктәрендә тағы ла бер телде өйрәнеү мөмкинлеге бирелә һәм был беҙҙең даирәбеҙҙе киңәйтә генә. Һеҙгә яңы телдәр өйрәнеү, камиллашыу ҡыҙыҡ түгелме ни? Ул телдә һөйләшеүсе кешең булмаһа ла, әгәр бер-беребеҙгә ихтирамлы булып, ярҙам итһәк, һөйләшер кеше табасаҡбыҙ - бер-беребеҙ менән аралашасаҡбыҙ. Мәҙәниәтебеҙҙән һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙән алыҫ торған һымаҡ күренгән кешеләр менән уртаҡ тел табыуы шәп тә инде! Беҙҙе тел берләштермәйме ни?..

Эйе, телде өйрәнеү һәр кемдең үҙ ихтыярында. Был осраҡта ла, әгәр кеше теләмәй икән, ғариза яҙһын да, туған телен уҡыуҙан баш тартһын. Һайлау һәр саҡ булырға тейеш. Әммә мин шулай уҡ ниндәй телдә һөйләшеүенә ҡарап, кешене кәмһетеүҙәргә лә ҡаршымын. Һеҙ бының нимәгә алып килерен аңламайһығыҙмы? Бөгөн туған башҡорт теле дәрестәренең иҫәбен ҡыҫҡарттылар икән - быны беҙ өндәшмәскә өйрәнһен өсөн эшләнеләр. Иртәгә туған телдә һөйләшеүҙе бөтөнләй тыйырға мөмкиндәр. Тимәк, был хәлгә ҡарата һәр кем, милләтенә ҡарамай, үҙ фекерен белдерергә тейеш. Мин дә үҙ һүҙемдә әйттем: туған телде онотorға, уны онотторооға юл ҡуйырға ярамай!

Эйе, мин ике ҡалала - Өфөлә һәм Мәскәүҙә йәшәйем. Эйе, мин шиғырҙарымды тик рус телендә генә яҙам. Ә һеҙ туған телегеҙ булмаған телдә шиғыр яҙып ҡарағыҙ әле. Ауырмы? Ә миңә бына рус телендә һөйләшеү, рус әҙәбиәте өлкәһендә эшләү, һеҙгә Башҡортостанда йәшәп, башҡорт телендә һөйләшеү ауыр булған һымаҡ ауыр түгел. Шул уҡ ваҡытта миңе ҡайһы бер Европа илдәрендә рус телен тыйыуҙары борсолдора. Әгәр унда йәшәгән булһам, рус телен яҡлап, мәсьәләне шулай уҡ ҡабырғаһы менән ҡуйыр инем. Ә һеҙ ни өсөндәр туған телдәрҙе уҡытыуҙы тыйыу ихтималлығына ҡыуанып ҡарайһығыҙ...

Минең шиғырҙарымды төрлө милләт вәкилдәре уҡый, уларҙың һәр береһен яратам һәм баһалайым. Мине аңлаған, ихлас уҡыусыларымдың күберәк булыуына өмөтләнәм. Барығыҙға ла, әйҙәгеҙ, булайыҡ, бер-беребеҙгә ябырылып, ҡуҙҙан төшөрөргә тырышмайыҡ, бер-беребеҙгә ҡарата түҙемле, берҙәм булайыҡ, бер-беребеҙгә терәк булырға өйрәнәйек, тип өндәшәм.

**Барлыҡ телдәргә, халыҡтарға һәм диндәргә ихтирам менән, Эвита ГАЙНЕТ, рус телендә яҙыусы шағирә.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда Әлшәй, Көйөргәҙе һәм Шишмә райондары хужалыҡтары шәкәр сөгөлдөрөн йыйып алыуға тотондо. Был культура 24 районда үҫтерелә. Ошо аҙна башында республика буйынса тамыраҙыҡтың уртаса ауырлығы 400 грамдан ашыу ине. Быйыл 1 миллион тоннанан ашыу уңышты йыйып алыу һәм эшкәртеү планлаштырыла. Шәкәр заводтары сөгөлдөрҙө 10 сентябрҙән эшкәртә башларға йыйына.

✓Башҡортостан Хөкүмәте "Өфө" халыҡ-ара аэропорты" акционерҙар йәмғиәтенең эске һауа юлдарының аэровокзал комплексын төҙөкләндереүгә бюджет инвестициялары бүлеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Инвестициялар объекттың пассажирҙар үткәреү һәләтен сәғәтенә 600-ҙән 1200-гә тиклем арттырырға тейеш. Төҙөкләндереүҙе 2019 йылда тамамларға ниәтләйҙәр.

✓Башҡортостандың ҡала һәм ауыл муниципалитеттарына "Иң яҡшы муниципаль тәжрибә" Бөтә Рәсәй конкурсының төбәк этабында "Кала төҙөлөшө сәйәсәте, халыҡтың уңайлы йәшәйеш мөхитен тәьмин итеү һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡты үҫтереү" номинацияһында еңеүҙәре өсөн премиялар ҡаралған. Күмертау, Әбйәлил районы, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Туймазы, Саҡмағош һәм Аҡъяр еңеүсе булды. Премияның дөйөм суммаһы - 10 миллион һум.

✓1 сентябрҙә Башҡортостанда 2013-2017 йылдарҙа ғәмәлдә булған халыҡты авариялы һәм иҫке фондтан күсереү буйынса адреслы программа тамамланды. Мәғлүмәттәр буйынса, программаны тормошҡа ашыра башлағанда республикала дөйөм майҙаны 387 мең квадрат метрлыҡ бер мең дән ашыу авариялы йорт иҫәпләнгән. Биш йыл буйына майҙаны 443 мең квадрат метрлыҡ 389 күп фатирлы йорт төҙөлгән, өйҙәргә 28 меңдән ашыу кеше күсерелгән.

✓Октябрь районы - "Заманса ҡала мөхите" проекты буйынса эш башланған райондарҙың береһе. Бында 27 ихата төҙөкләндереләсәк, шуларҙың 8-е - Һупайлыла. Әлеге ваҡытта Набережная, 15/1 адресы буйынса урынлашҡан йорт ихатаһында һуңғы эштәр башҡарыла. Әле 2018 - 2020 йылдарға "Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡала округының заманса ҡала мөхитен формалаштырыу" муниципаль программаһына инеүгә һайлап алыу өсөн ғаризалар ҡабул ителә.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠАСА



# ХАҠТАР КӨЙЛӘНӘ ТӨШКӘНМЕ?

✓ **"Башҡортостан Республикаһы тауышы" порталында 31 декабргә тиклем барған интернет тауыш биреүҙә Өфө халҡы ҡала хакимиәте, шулай уҡ халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеүсе дәүләт һәм муниципаль ойошмалар эшмәкәрлеген баһалай ала.** Һорау алыу Рәсәй Президенты һәм Башҡортостан Башлығының транспорт тәьминәте, автомобиль юлдары торошо һәм торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр күрһәтеү өлкәһендә урындағы үҙидаралыҡ органдары эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеген күтәреү маҡсатында тормошҡа ашырыла.

✓ **Башҡортостанда аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың аҡрын артыуы күҙәтелә.** Башҡортостанстат мәғлүмәтә буйынса, август аҙағына тикшерелгән социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлек 1,5 процентҡа ғына ҡиммәтләнгән, өҫтәүенә исемлектең яртыһы тиерлек 1-13 процентҡа арзанайған. Ҡара сәйгә, дөгөгә, ҡаймаҡҡа хаҡтар 1,5 процентҡа артҡан. Сусҡа ите бөтөнләй ҡиммәтләнмәгән. Һыйыр ите 0,7 процентҡа, көнбағыш майы, сырҙар - 0,6, аҡ май 0,1 процентҡа ҡыйбатланған. Бер тиҫтә йомортҡа хаҡы 0,5 процентҡа, стерилләнгән һөт - 0,3, пастеризацияланған һөт - 0,1 процентҡа артҡан. Дөйөм алғанда, йыл башынан Башҡортостанда инфляция 1 процент тәшкил иткән.

✓ **Шүлгәнташ мәмерйәһе тирәһендә асфальттан юл һалыу һәм ышанысылы мобиль элемтә мәсьәләһе - ул яҡын ваҡыт эсендәге атҡарылаҫаҡ эштәр.** Был турала Бөрйән районы хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов һөйләне. "Республика Башлығының ҡушыуы буйынса кордон тирәһендә ретранслятор ҡуйылды, унда "Билайн"дан интернет эшләй. Етеҙ генә, WhatsApp аша шылтыратырға ла мөмкин. Заманса элемтә булһын өсөн унда бағана ҡуйыу мәсьәләһе буйынса элемтә операторҙары менән һөйләшеүҙәр алып барабыҙ. Был ошо һәм киләһе йылда эшләнә торған эштәр", - тине ул. Август аҙағында Шүлгәнташ мәмерйәһенә тиклем юл экспертизаһы проектының әҙер булыуын белдерҙе.

✓ **Приморье крайы башҡорттары башҡорт телен һәм мәҙәниәтен өйрәнеү буйынса курстар ойоштороуға грант алды.** Ошо хаҡта Приморье ойошмаһы етәксеһе Таһир Ишбаев хәбәр итә. Владивосток башҡорттары, "Рәсәй шишмәләре" конкурсында ҡатнашып, грант отто. Бүленгән аҡсаға башҡорттарҙың тарихи һәм ғәҙәти мәҙәниәте генә өйрәнелеп ҡалмай, башҡорт теле дәрестәре лә уҙғарыласаҡ. Киләсәктә - башҡорт халыҡ музыка ҡоралдары - ҡурайҙа һәм ҡумыҙҙа уйнау дәрестәрен ойоштороу күҙаллана. Приморье башҡорттары ҡоролтайы быйыл үҙенең 25 йыллығын билдәләне, төбәк һабантуйы уҙғарҙы. Милли сәхнә костюмдарына заказ бирелде. Яҡын ваҡыт эсендә Владивостокта йәкшәмбе башҡорт мәктәбе асыу күҙаллана.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ МӘКТӘПТӘ



**Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Колгуевский биҫтәһендә асыласаҡ 160-сы лицейҙың әҙерлеге менән танышты.**

Яңы мәктәп - берҙәм белем биреү-спорт комплексын тәшкил итә. Ул 550 урынға иҫәпләнгән, спорт секцияһы биналары, төп спорт залы, гимнастика залы, сисенеү, душ бүлмәләре, уҡыу кабинеттары, оҫтаханалары, лабораториялары бар. Шулай уҡ башланғыс синыфтар өсөн корпус төҙөлгән. Балаларҙы ҡайнар аш менән тәьмин итеү өсөн аҙыҡ-түлек блогы, ашхана бар. Төрлө саралар үткәреү өсөн 300 урынлыҡ тантаналар залы ҡаралған. Мәктәп бинаһында заманса ҡорамалдар, белем биреү системалары, электрон китапхана, медиатека, компьютер кластары булған интерактив комплекс урынлашҡан. Яһалма ҡатлам менән ҡапланған футбол яланын, шулай уҡ спорттың башҡа төрҙәре менән шөғөлләнеү өсөн айырым спорт майҙансыҡтарын эшләү тамамланыу алдында. Бигерәк тә сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың корпустар араһында иркен хәрәкәт итеү мөмкинлеге иҫәпкә алынған һәм уҡыусыларҙың хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә ҙур иғтибар бирелә.

Ҡала хакимиәте башлығы мәктәп менән танышып сыҡҡандан һуң башҡарылған эштәргә юғары баһа бирҙе һәм объекттың территорияһын, шул иҫәптән спорт майҙансыҡтарын да индереп, төҙөкләндереү, уны тәртиптә тотоу, энергия һаҡлау мәсьәләләре буйынса ентекле эш алып барырға ҡушты.

# ҺЫУҘАН ҠАЛА ЛА УЛ...

**Быйыл тәбиғәт һынапмы-һынай: ҡышҡыһын бурап-бурап ҡарҙар яуып аҙаплағайны, 4 сентябрҙә яуған ҡойма ямғыр тағы ла аптырауға һалды. Был көндө, яҡынса баһалауҙар буйынса, сәғәт ярым эсендә ике айлыҡ нормала яуым-төшөм күҙәтелгән.**



Ул ваҡытта ғәрәсәт өйөрмәһендә ҡалыусылар, моғайын да, йөрәктәрен ус төбөндә тотҡандыр, сөнки һуңынан кеҫә телефондарына төшөрөлгән видеояҙмаларҙы ҡараһаң, ысынлап та, сәстәр үрә торорлоҡ: еңел автомобилдәрҙең түбәләре генә күренеп ултырһынмы; юлды аша сыҡҡан ваҡытта коляска этеп барыусы ҡатындың ҡулынан коляскаһы ысҡынып ағып китһенме; билдән буръяҡ һыу кисеп, ағымға ҡаршы атлаусылар булһынмы - һанай китһәң... Хатта һыу биналар эсенә инеп тә көсөн һәм ҡеүәтен күрһәтергә өлгөрә. Ут һүнеү һөҙөмтәһендә троллейбустар хәрәкәте туҡтала, светофорҙар эшләмәүе "тығындар" тыуҙырып, километрҙарға һуҙылған транспорт каруанын барлыҡҡа килтерә. Ғәрәсәттең төп "һөжүме" Киров, Совет, Октябрь, Ленин райондарына тура килә. Баш ҡаланың Дим һәм төньяҡ райондары ҡойма ямғыр зәмтәләренән бик зыян күрмәй.

Тәбиғәт ғәрәсәте ваҡытында ҡала хеҙмәттәре бригадалар составын көсәйтеп, ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияларының рәшәткәләрен тығылыуҙан таҙартыу менән шөғөлләнә, сөнки һыу төрлө сүп-сарҙы ла йыуып килтерә. Әммә тулҡын ҡеүәтен канализация селтәре ҡабул итеп өлгөрә алмай. Шулай ҙа коммуналь хеҙмәттәрҙең оператив һәм яйға һалынған эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә Өфөнөң төп магистралдәренән һыу - бер, башҡа урамдарҙан сәғәт ярым эсендә китеп бөтә, ҡайһы бер урындарҙа һыуҙы һурҙырырға тура килә. Был көндә ҡала урамдарында 300 берәмек махсус техника һәм 1500 коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәре эшләй. Өфөнөң Ҡотҡарыу хеҙмәте 112 мәғлүмәт-диспетчер үҙәгенә 200 шылтыратыу ҡабул ителә. Мөрәжәғәт итеүселәр ағас ҡолауы, ҡоймалар емерелеүе, территорияларҙы һыу баҫыуы хаҡында белдерә.

Ҡала хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы оператив кәңәшмә тап ошо аномаль күренеш эҙемтәләрен бөтөрөүгә бағышланды һәм яуаплы ойошмалар алдына аныҡ бурыстар ҡуйылды. Шулай уҡ ғәрәсәт килтергән зыян күләме асыҡланырға ҡушылды.

# КАРТАЛА КҮРЕНӘ



**Башҡортостанда биш йыл эсендә асылған һәм быйыл асыласаҡ мәктәптәрҙең, балалар баҡсаларының һәм дауаханаларҙың заманса карталары барлыҡҡа килде.**

Картала ағымдағы йылдың 1 августына ҡарата ҙур төҙөлөш объекттары билдәләнгән. 2012-2017 йылдарҙа 11 218 урынлыҡ 31 мәктәп файҙаланыуға тапшырылған. 2012 йылда Өфөлә, Әлшәй, Баймаҡ, Бүздәк, Мишкә, Яңауыл райондарында яңы мәктәптәр һалынған. 2013 йылда Белорет районының Үҙәнбаш ауылында, Бүздәктә (реконструкция), Йылайырҙа, Салауат районының Яхъя ауылында, Иҫке Балтаста, Өфө районының Дорогин ауылында яңы уҡыу биналары барлыҡҡа килгән.

2014 йылда өс һәм 2015 йылда ике мәктәп исемлекте тулыландырған. Былтыр Иҫке Собханғол, Ҡалтасы, Яңы Муллаҡай, Федоровка ауылдарында, шулай уҡ Дәүләкәндә һәм Стәрлетамаҡта уҡыусылар яңы кластарҙа белем ала башлаған. 2017 йылдың аҙағына тиклем Өфөлә: Дим-8 һәм Колгуев биҫтәләрендә ике яңы мәктәпте, Бөрйән районында мәктәп яны интернатына төкәтмәне сафҡа индереү күҙаллана. Нуғай ауылында яңы мәктәптең башланғыс кластар блогы файҙаланыуға тапшырыла. Картала заманса мәктәпкәсә балалар учреждениеларын да табырға мөмкин. 2012-2017 йылдарҙа планлаштырылған 15 729 урынлыҡ 102 балалар баҡсаһы сафҡа индерелгән. Йыл һуңынаса Бүздәк ауылында, Ғафури районының Красноусол ауылында, Дәүләкәндә, Үргә Тәтешлелә, Учалы ауылында, Яңауылда алты балалар баҡсаһын төҙөүҙе тамамларға ниәтләйҙәр. Салауат районының Яхъя ауылында балалар баҡсаһын проектлау һәм һалыу ҡаралған. Республиканың медицина учреждениелары буйынса ла ошондай карта төҙөлгән.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Урындағы халыҡтың ялыуы буйынса "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостандағы идаралығы Өфө - Затон автомобиль юлындағы "Евразия" баҙарына тикшереү үткәрҙе һәм 25 августа баш ҡаланың Ленин районы суды ҡарары менән йәшелсә баҙарының эшмәкәрлеге 60 тәүлеккә туҡтатылды.

✓2-8 сентябрҙә Екатеринбургта һәм Свердловск өлкәһе ҡалаларында икенсе тапҡыр Рәсәй киноһының Урал асыҡ фестивале уҙғарылды. Кинофестиваль программаһында "Бабич" һәм "Өфөнән һөйөү менән" тигән ике яңы башҡорт фильмы тәҡдим ителгән.

✓Мәскәүҙә "Артмиграция" йәш режиссура фестивале барышында Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Хыялға ҡаршы" спектакле (режиссеры Илсур Ҡаҙаҡбаев) күрһәтелде. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, йәштән ашыу театр араһынан етеүһе генә иң яҡшылары тип танылды һәм Мәскәү театрында сығыш яһау хоҡуғын алды. Ошо спектаклде сәхнәгә ҡуйған ижади төркөмдөң барыһы ла тиерлек (режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев, актерҙар Артур Кәбиров, Фәнис Рәхмәтов, Урал Әминев, Ринат Баймырҙин) Щепкин исемендәге Театр институтын тамамлаған.

✓Уҙған ял көндәрендә Өфөнөң өс майҙанында көҙгө ауыл хужалығы йәрминкәләре ойошторолдо. Унда 29 муниципаль район ауыл хужалығы тауарҙарын етештереүселәр ҡатнашты. Йәрминкәләрҙә дөйөм суммаһы 5264,5 мең һумлыҡ 8,4 тонна бал, 2,2 тонна картуф һәм 1,8 тонна йәшелсә һатылған. Бер килограмм балды уртаса 300-1100 һумға, картуфты - 13-14, һуғанды - 13-45, кишерҙе - 15-47, сөгөлдөрҙө - 15-42, кәбеҫтәне 15-42 һумға һатып алырға мөмкин ине.

✓Өфөлә "Матбуғат донъяһы" нәшриәтендә табын ырыуы вәкилдәренең IV съезы документтары һәм материалдары тупланған "Беҙ - табындар" китабы донъя күрҙе. Йыйынтыҡтың авторы һәм төҙөүсеһе - билдәле журналист һәм йәмәғәт эшмәкәре Нияз Сәлимов.

✓Башҡортостанда ағымдағы йылдың августы өсөн эшләгән пенсионерҙарҙың страховка пенсиялары күләмен яңынан иҫәпләүҙе иҫәпкә алып, пенсия түләүҙәренә 15 миллиард 810 миллион һум йүнәлтелгән. Республикала 1 миллион 169 мең кешегә пенсия түләнә, 328 мене федераль льготаға эйә, 140 меңе федераль социаль өҫтәмә түләү ала.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ТӘМӘКЕ КӨЙРӘТМӘ, ИНСПЕКТОР!

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Федерацияһы Эске эштәр министрлығының Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү буйынса баш идаралығы, ЮХХДИ инспекторҙарына юл хәрәкәтендә ҡатнашыусылар менән һөйләшкәндә тәмәке тартыуҙы һәм дорфа һөйләшеүҙе тыйыуҙы үҙҙәренең административ регламентына индерергә кәрәк, тигән тәҡдим менән сығыш яһаны. Әгәр был тәҡдим ҡабул ителһә, инспекторҙар водителдәргә "һеҙ" тип өндәшергә, әңгәмә ваҡытында үҙҙәрен тыныс, түҙемле тоторға, юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙоусыға үҙ талабын асыҡ, аныҡ, бүтән төрлө мәғәнәлә аңлашылмаҫлыҡ итеп белдерергә тейеш буласаҡ.**



Регламентҡа ярашлы, ЮХХДИ инспекторҙары бынан ары водителдәргә ҡаты бәрелергә, серәшеп бәйләнергә, "яһалма" иҫкәртеүҙәр эшләргә, нигеҙһеҙ ғәйеп ташларға хоҡуҡлы булмаясаҡ. Әгәр ҙә водитель ришүәт тәҡдим итеп, йә башҡа юл менән инспекторҙы закон боҙоуға "ҡоҙалай" башлаһа, инспектор был хәл тураһында махсус формала белдереү ҡағыҙы тултырырға тейеш булып сыға.

Ошо яңылыҡты ишеткәс, беҙ таксистарға мөрәжәғәт иттек. Улар, ЮХХДИ инспекторҙары менән иң йыш аралашҡан кешеләр булараҡ, был тәңгәлдә урынлы тәҡдимдәрен һәм фекерҙәрен еткерер, тип ышандыҡ. Өс әңгәмәсебеҙҙең яуабында ла бер уртаҡлыҡ төҫмөрләнде. Ул да булһа, инспекторҙарҙың водителдәрҙе туҡтатып, уларҙың ирекле хәрәкәт итеү хоҡуғын сикләүгә килтергән сәбәпте автомобиль килеп туҡтағас ҡына эҙләй башлау күренеше. Йәғни, тәүҙә водителде туҡтатаһың, ә етешһеҙлеге табыла ул, тигән тәртиптә эш итеү генә барлыҡ респонденттарҙа ла ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙыра икән. Әлеге административ регламентҡа ярашлы, бынан ары хоҡуҡ һаҡсылары юл хәрәкәтендә ҡатнашыусыларға яһалма иҫкәртеүҙәр эшләй алмаясаҡ. Әгәр регламент үҙ көсөнә инһә, автоһәүәҫкәрҙәрҙең теңкәһенә тейгән күренеш бөтөнләй юҡҡа сыҡмаһа ла, әҙерәкме, күберәкме кәмер, тигән өмөт белдерҙе әңгәмәселәр.

Таксистар шулай уҡ ҡайһы бер инспекторҙарҙың юлда тәмәке көйрәтеүе, дорфа һөйләшеүе лә ғәҙәти күренеш булыуын белдерҙе. Уларҙы "шабашсылар", хатта генералдар һымаҡ торалар, тигән сағыштырыу ҙа килтерелде. "Үҙҙәрен һөмһөҙ тотоусы инспекторҙарға беҙ, такси хеҙмәткәрҙәре, өйрәнеп бөткәнбеҙ инде ул. Ә руль артына кисәбөгөн генә ултырған йәштәрҙең хоҡуҡ һаҡсылары алдында "ҡойолоп төшөүен" йыш күрергә тура килә", - тине 8 йыл стажлы Рәил исемле автоһәүәҫкәр. Ул үҙенең фамилияһын атамауыбыҙҙы һораны. Уның теләге аңлашыла ла. Уға әле юлда күп йөрөргә. Ғаиләһен туйындырыр берҙән бер эше - такси. Ә бына Финат Ҡужәхмәтов ағай әйтеүенсә, һуңғы йылдарҙа хоҡуҡ һаҡсыларының әҙерлеге яҡшыра төшкән. "Инспекторҙар сафы белемле йәш егеттәр менән тулылана барыуы күренеп тора, - тип башланы һүҙен Ейәнсуранан Финат Ҡужәхмәтов.- Был хәл, үҙ сиратында, водителдәр менән инспекторҙарҙың аралашыу кимәлен дә икенсе кимәлгә күтәрҙе. Белемле кеше - белемле инде. Ундайҙар менән һөйләшеү бөтөнләй башҡа төрлө. Тик әле һаман бер сәбәпһеҙгә туҡтатыу күренеше генә бар. Ә тәмәке тартыуға килгәндә, әлбиттә, был алама күренеште тыйыу үҙенең ыңғай емештәрен бирер, тип уйлайым. Тәү сиратта, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен үтәмәүселәрҙе күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа ярҙам итәсәк был талап. Инспекторҙар үҙ бурыстарын үтәүгә етдиерәк тотонор, тип ышанам. Ни тиһәң дә, әгәр үҙең әхлаҡлы, мәҙәниәтле булмаһаң, башҡаларҙан юл йөрөү мәҙәниәтен, ҡағиҙәһен үтәүҙе талап итеү ҙә урынһыҙ. Нисек кенә булмаһын, ЮХХДИ инспекторҙары кәрәк беҙгә. Улар булмаһа, "баштүбән" йөрөрҙәр ине".

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Яңы административ регламентҡа ярашлы, әгәр ул РФ-ның Юстиция министрлығында хуплау тапһа, автомобилдәрҙе стационар постарҙа ғына тикшереү талабы ла юҡҡа сыға. Яңы регламентҡа ярашлы, инспекторҙар юлдарҙың иң авариялы урындарына ебәреләсәк, машиналарҙы ла тикшерә аласаҡ, тимәк.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

## ҺАЛҠЫН ҺУҒЫШМЫ?



АҠШ Рәсәйҙең Сан-Францисколағы генераль консуллығын, Вашингтон һәм Нью-Йорктағы дипломатик объекттарын япты, Санкт-Петербург, Владивосток һәм Екатеринбург ҡалаларында урынлашҡан Америка консуллыҡтарында туристарға виза биреүҙе туҡтатты. Ә ФБР-ҙың Вашингтондағы беҙҙең ил сауҙа вәкиллегендә тентеүҙәр үткәреүен сәйәсмәндәр халыҡ-ара конвенцияны тупаҫ боҙоу, тип билдәләне. Ни өсөн Америка былдай аҙымдарға бара? Бәлки, Рәсәйгә төрлө яҡтан баҫым яһап, уны сығырынан сығарырға итәлер? Ярһығын "кеше" менән идара итеү ҙә еңелерәк, "асыуын" баҫыуға һылтанып, уның уҡ биләмәһендә йәнең теләгән ысул ҡулланыу мөмкинлеге лә барлыҡҡа килә.

Ә бына PressTV баҫмаһы фекеренсә, ФБР-ҙың был эшмәкәрлегенең маҡсаты Рәсәй түгел, ә АҠШ президенты Дональд Трамп. ФБР менән президент араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡ Дональд Трамптың ил башлығы булып һайланыу мәленән үк килә. Шуға күрә лә хәҙер АҠШ президентының, үҙе вәғәҙә иткәнсә, Рәсәй менән мөнәсәбәттәрҙе яйларға тырышыуына нисек тә булһа ҡамасаулау өсөн ошондай мәғәнәһеҙ спектаклдәр ойоштора, йәнәһе. Дональд Трамптың власҡа килеүе ниндәй сыуалыштар тыуҙырыуын хәтерләгәндә, был фекер ысынбарлыҡҡа тап килгән кеүек. Ләкин былдай етди аҙымдар тураһында ил башлығының бер нәмә лә белмәүенә һәм, иң мөһиме, улар уның ризалығынан тыш эшләнеүенә бер нисек тә ышанып булмай. Ғөмүмән, АҠШ лидерының Рәсәйгә ҡарата алып барған сәйәсәтен аныҡ ҡына аңлап булмай. Нисек кенә булмаһын, бөтә был ваҡиғалар ике ил араһында яңынан һалҡын һуғыш дәүере башланыуға табан эшләнгән аҙым булып күҙ алдына баҫа.

## МЬЯНМАЛАҒЫ ХӘЛ



Донъяла ваҡытлы матбуғат сараларында баҫылмаған, телевидение һәм радио аша киң яҡтыртылмаған хәлдәр ҙә бихисап. Ошондай ваҡиғаларҙың береһе - Мьянма биләмәһендә барған хөкүмәт ғәскәрҙәре менән рохинджа халҡы араһындағы ҡаты бәрелештәр. Ислам динен тотоусы һәм илдең Ракхайн (Аракан) штатында йәшәүсе рохинджа этник төркөмө бөгөнгө көндә 800 меңдән алып 1,1 миллионға тиклем кешене тәшкил итә. Уларҙың күпселеге Мьянмаға (элекке Бирма) илдә Британияның колониаль хакимлығы осоронда күсеп килгән. Ә илдең әлеге хөкүмәте уларҙы Бангладештан легаль булмаған юл менән килеүселәр, тип һанай һәм уларға гражданлыҡ бирмәй. Был, үҙ сиратында, рохинджа халҡын төрлө эҙәрлекләүҙәргә дусар итә, улар уҡыу һәм эшләү хоҡуғынан мәхрүм, икенсе дин кешеләре тарафынан ҡыйырһытыла, уларға бала табыу иҫәбе сикләнгән һәм башҡалар. Берләшкән милләттәр ойошмаһы (ООН) билдәләүенсә "рохинджа - иң күп эҙәрлекләүҙәргә дусар ителгән аҙ һанлы халыҡ".

Рохинджа һәм хөкүмәт ғәскәрҙәре араһында әленән-әле бәрелештәр булып тора. Ләкин һуңғы ваҡытта үҙ-ара мөнәсәбәттәр айырыуса көсәргәнешле. Этник әҙселекте тәшкил иткән халыҡты судһыҙ язалау, ауылдарҙы яндырыу, ҡатын-ҡыҙҙарҙы көсләү, балаларҙы үлтереүҙәр дауам итә. Былдай мәхшәрҙән ҡасып, меңәрләгән рохинджа Бангладешҡа ағыла. Илдең рәсми власы иһә "беҙ бары тик ябай граждандарҙы террорист һәм экстремистарҙан яҡлайбыҙ", тип бара. Бер биләмәлә көн күреүсе төрлө милләт вәкилдәре, төрлө дин тотоусылар араһындағы тыныслыҡ сиге үтә лә нескә. Уны юҡҡа сығарыу өсөн күп кәрәкмәй. Бер милләт тә икенсеһенән кәм йәки түбән түгел, һәр милләт үҙ ерендә йәшәргә, туған телендә аралашырға, халҡының тарихын белергә, үҙенең бөгөнгөһөн төҙөргә хаҡлы икәнен онотоусылар арҡаһында ла ошондай ҡырылыштар була ла инде.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Битлектәр

❖ Бит тиреһен туҡландырыу, таҙартыу өсөн битлек: 1 йомортҡа һарыһын туҡып, 3-6 тамсы лимон һуты өҫтәргә, биткә һылап, кипкәнен көтөргә лә, тағы бер ҡат һыларға. 15-20 минут торорға.

❖ 2 балғалаҡ эремсеккә 1 балғалаҡ петрушка йәки ҡаты итеп яһалған 1 балғалаҡ сәй, 1 балғалаҡ етен майы, лимон йә әфлисун ҡабығын ҡырып ҡушығыҙ.

❖ 2 ҡалаҡ һоло онона 1 ҡалаҡ үҫемлек майы, 1 балғалаҡ бал, 3 ҡалаҡ һөт ҡушырға. Бит тиреһендәге һырҙарҙы бөтөрөү өсөн ҡулланыла.

### Ҡоро йүтәл

❖ Бер нисә йылға һуҙылған ҡоро йүткереү менән яфаланыусылар өсөн кәңәш (уны йөрәк йүткереүе тип тә йөрөтәләр): йүткертә башлағас та танау менән йыш-йыш итеп тын алырға. Йүткереү шунда уҡ туҡтай. Ошо рәүешле тын алыу күнегеүҙәре менән был сирҙе еңергә була.

### Иммунитетты нығытыу

❖ Мүк еләге (клюква) сәйе организмды витаминдарға байыта, иммун системаһын "уятып" ебәрәсәк. 1 ҡалаҡ мүк еләген иҙеп, шәкәр һалып, 200 мл ҡайнар һыу йәки ҡара сәй ҡойорға. Был сәй һыуһынды ҡандыра, арыуҙы бөтөрә, кәйефте күтәрә.

❖ Ҡара ҡарағат япрағы сәйе - шулай уҡ файҙалы эсемлек. 2 ус япраҡҡа 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 3 минут төнәтергә. Сынаяҡтарға ҡойоп сыҡҡас шәкәр йәки бал өҫтәргә. Былдай сәй арыуҙы бөтөрә, организмды таҙарта.

### Йүткереү

❖ 6-8 ҡара торманы йоҡаҡ ҡына итеп турарға, шәкәр һибергә, 6 сәғәт төнәтергә. Һәр сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Йүткереү ҡоро булған саҡта ҡыҙыл көртмәле (брусника) сиробына бал өҫтәп яһалған дауа ярам итә. Шулай уҡ һәр сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ ашарға. Ҡара сәй урынына еләкле сәй эсегеҙ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Минең тырышлыҡ бушҡа китмәне, уҡыусыларым кластан тыш сараларҙа призлы урындар яулай торғайны. Бына шулай, ата-әсәләрҙең ышанысын аҡлап, ун уҡыусынан башланған класты өс йылдан утыҙ уҡыусыға еткерҙем.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

**Әл-Кәһф (Мәмерйә) сүрәһенән**

66. Уға (Фәрештәгә) Муса: "Тура юл тураһында һиңә өйрәтелгәндәрҙе миңә өйрәтеүең өсөн миңә артыңдан эйәрергәмә?" - тине.

67. Ул (Фәрештә) әйтте: "Минең менән түҙә алмаҫһың бит,

68. һәм ул турала белемең юҡ хәлдә, уға һин нисек түҙерһең?"

69. Ул (Муса): "Һин мине, әгәр Алла теләһә, сабырлы тип табырһың һәм мин һинең һис бер бойороғоңа ҡаршымам", - тине.

70. Ул (Фәрештә): "Әгәр миңә эйәрә торған булһаң, мин ул турала иҫкә төшөрә башлағанға тиклем минән бер нәмә лә һорама!" - тине.

71. Улар китте, һәм, көймәгә ултырғас, теге (Фәрештә) уны тиште. Ул (Муса) тегегә: "Һин әлләә көймәне кешеләрҙе һыуға батырыу өсөн тишәһеңме? Һин аҡылға һыймаҫлыҡ эш эшләнең бит", - тине.

72. Ул (Фәрештә): "Әлләә минең менән түҙергә көсөң етмәҫ тип әйтмәнемме һиңә?" - тине.

73. Ул (Муса): "Онотҡаным өсөн шелтәләмә инде, һәм минең эшемдә ауырлыҡ йөкләтмә", - тине.

74. Һәм улар китте, улар бер малайҙы осратҡас, теге (Фәрештә) ул малайҙы үлтерҙе, һәм ул (Муса): "Ҡанға ҡарата ҡан итеп үс алыуҙан башҡа гонаһһыҙ йәнде үлтерҙеңме ни? Насар эш эшләнең бит", - тине.

75. Ул: "Әлләә мин һиңә минең менән түҙергә көсөң етмәҫ тип әйтмәнемме ни?" - тине.

77. Һәм улар китте, һәм бер ҡала кешеләре эргәһенә килеп еткәс, уларҙан ашамлыҡ һоранылар, ҡала кешеләре уларҙы ҡунаҡ итергә теләмәне. Һәм улар унда емерелергә торған диуар күрҙеләр, ә теге (Фәрештә) уны төҙәтте. Ул (Муса): "Әгәр теләһәң, бының өсөн хеҙмәт хаҡы алған булыр инең", - тине.

78. Теге (Фәрештә) әйтте: "Ошо - һинең менән минең арала айырылышыу. Һинең түҙергә көсөң етмәгән нәмә тураһында аңлатыуҙы хәбәр итәм:

79. Көймә тураһында. Ул көймә диңгеҙҙә эшләүсе ярлы кешеләрҙеке ине, мин уны боҙорға теләнем, сөнки уларҙың артында бар көймәләрҙе көсләп алыусы батша тора ине.

80. Малай тураһында. Ул малайҙың ата-әсәһе иман килтергән кешеләрҙән ине, һәм беҙ ул малай ата-әсәһен буйһонмаҫҡа һәм кафырлыҡҡа дусар итер тип ҡурҡтыҡ.

81. Һәм уға беҙ Раббылары уларға ул малайға ҡарағанда сафлыҡ яғынан яҡшыраҡ һәм шәфҡәтлек яғынан яҡшыраҡты биреүен теләнек.

82. Һәм диуар тураһында. Ул диуар ҡалалағы ике етем малайҙыҡы ине, һәм уның аҫтында улар өсөн хазина бар ине. Һәм уларҙың аталары изге кешеләрҙән булды. Һәм Раббың ул малайҙарҙың балиғ булғас Раббыңдың рәхсәте менән хазиналарын алыуҙарын теләне. Мин быны үҙ белдегемдән эшләмәнем. Һин сабыр итергә көсөң етмәгән эштәрҙең аңлатмаһы ошо".

Шулай итеп, кешегә нимә яҡшы, нимә насар икәнен Алла ғына белә, ҡайһы бер эштәренең изгелеген хатта бәйғәмбәрҙәр ҙә аңлай алмай. Шуға ла күп осраҡтарҙа түҙергә, көтөргә генә ҡала, Алла тарафынан бирелгән вәғәҙәләр мотлаҡ үтәләсәк, тип тынысландыра Мөхәммәт бәйғәмбәр имандаштарын. Быныӊ менән ул, ысынлап та, мосолмандарҙың икеләнгән өләшөнөң ышанысын нығытыуға өлгәшә.

**(Дауамы бар).**

*АҢЛАҒАНҒА - ИШАРА*

**Мин күп балалы ғаиләлә тыуып үҫтем. Атайым Бөйөк Ватан һуғышында, Башҡорт кавалерия дивизияһы составында оҙон яу юлы үткән кеше ине. Һуғыштан ҡайтҡас, ғүмере буйы урман ҡырҡыу эштәре менән мәшғүл булды, әсәйем менән күпләп мал-тыуар аҫырап, матур итеп донъя көттөләр. Тәртипле, белемле балалар тәрбиәләү - уларҙың төп бурысы ине.**



# БАРЫҺЫ ЛА ҮҘЕБЕҘҘӘН ТОРА

Миңә биш йәштәр тирәһе булғандыр, атайымдың иң оло апайым Мәрйәмде атҡа һыбай мендереп, Темәс педучилищеһына уҡырға алып китеүе хәтеремдә. Апайым педучилищены тамамлап ҡайтыуға, Вәдит ағайым Илмәш ете йыллыҡ мәктәбенән һуң Белорет педучилищеһына яңы асылған башҡорт төркөмөнә уҡырға китте (ҡыҙғаныска ҡаршы, педучилищела уҡып йөрөгән сағында аварияла һәләк булды). Педучилищела бер-бер артлы Әклимә, Хәтижә апайымдар менән мин, шунан ҡустыбыҙ Хәниф уҡыныҡ, башланғыс класс уҡытыусылыһы тигән дипломдар алдыҡ. Уҡыуыбыҙ быныӊ менән генә сикләнмәне: апайыбыҙ Мәрйәм Мәсәғүт уҡытыусылар институтының физика-математика факультетын, Әклимә - Стәрлетамаҡ педагогия институтының рус теле һәм әҙәбиәте факультетын, Хәтижә апайым Өфө педагогия институтының тарих факультетын, Хәниф ҡустым (Вәкил Хажин) филология факультетының башҡорт бүлеген, аспирантура тамамланы, филология фәндәре кандидаты булып китте. Мин дә БДУ-ның филология факультетына уҡырға ингәйнем, әммә һаулығым ҡаҡшауы арҡаһында өсөнсө курстан уҡыуымды туҡтаттым, әммә уҡытыуҙы ташламаным. Ун дүрт йыл Бирҙеғол һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, туғыҙ йыл директорҙың уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары булып эшләнем.

1979 йылда тормош иптәшем Рәсүлдең эш урынын алыштырыуы сәбәпле Инйәр ҡасабаһына күсеп килдек. Мин Инйәр урта мәктәбендә уҡытырға теләшмен. Ә өлкән ҡыҙым Эльвира - унынсы синыфҡа, уртансы ҡыҙым Флүрә - етенсегә, кесеһе Нәркәс өсөнсө синыфҡа уҡырға барырға йыйына. Бына шул ваҡытта башланды инде ҡыҙыҡтар.

Мәктәпкә киләм. Таныш директор, таныш коллектив - өлкән йөштәге уҡытыусыларҙың барыһы ла таныш, ҡайһы берҙәре мине уҡытҡан уҡытыусылар. Директор бүлмәһенән, вакант урын юҡ, тигән яуап менән сығам. Коридорҙа бер нисә милләттәш уҡытыусы баҫып тора, таныш түгелдәр, әммә минең турала ишеткәндәр, һорашалар. "Директор, урын юҡ, тине", - тим. "Урын бар, тик директор башҡорт милләтле уҡытыусыларҙы эшкә алмай", - ти былар. Иртәгәһен Белоретка мәғариф идаралығына киттем. Мәғариф идаралығы мөдире Ғ.С. Ғизитдинов ҡулыма бойороҡ тотторол ҡайтарҙы, әлегә интернатҡа тәрбиәсе булып барығыҙ, һуңынан күҙ күрер, тине.

Мәктәпкә тағы киттем. Уҡытыусыларҙың отпускынан һуң эшкә сыҡҡан мәле ине. Уҡыясаҡ класына инеп, уҡытыусыһы менән танышып ҡайтһын, тип, үҙем менән кесе ҡыҙым Нәркәсте лә алдым. "Һеҙ йөрөп килегеҙ, мин ҡыҙығыҙ менән һөйләшәйем әле", - тине уҡытыусы Зинаида Ивановна. Йөрөп килгәс, "Нисек, таныштығыҙмы?" тип һораһым уҡытыусынан. "Таныштыҡ, ҡыҙығыҙ русса белмәй бит, уҡыуы ҡыйын булыр, икенсе синыфҡа ултыртығыҙ", - ти был. Аҙаҡ аңлауымса, ҡыҙым уҡытыусыны оҡшатмаған һәм уның бер һорауына ла яуап бирмәгән. "Мин бында уҡымайым, кире Бирҙеғолға ҡайтайыҡ", - тип мәж килде.

Инйәр мәктәбендә башҡорт кластары астырыу мәсьәләһен ҡуҙғатырға булып, иртәгәһен Өфөгә Мәғариф министрлығына киттем. Министр урынында булмай сыкты. Секретарь ҡыҙ ниндәй һорау менән йөрөүемде белешкәс, мине министр урынбаҫары Р. Арыҫланов ағайға ебәрҙе. Индем, йомошомдо әйттем. "Районда был турала кем менән һөйләштегеҙ?" - тине министр урынбаҫары. "Тәүләп бында килдем, районда бәрәүгә лә мөрәжәғәт итмәнем", - тигәс, Арыҫланов ағай: "Теләгегеҙ законлы, һыңғай хәл итерҙәр, тип уйлайым. Тиҙҙән һеҙҙә район конференцияһы була, шунда сығыш яһағыҙ. Әгәр риза булмаһалар, яныңан беҙгә килерһегеҙ",- тип ҡайтарып ебәрҙе.

Ике көндән Белоретка уҡытыусылар кәңәшмәһенә киттем. Кәңәшмә ваҡытында президиумға: "Мин Инйәргә күсеп килдем, өсөнсө класҡа бара торған ҡыҙымды башҡортса уҡытырға теләйем. Балаһын башҡортса уҡытырға теләгән ғаиләләр тағы ла бар, шунлыҡтан, Инйәр мәктәбендә аҙ комплектлы башҡорт кластары асһындар ине", - тигән яҙыу ебәрҙем. Кәңәшмәне алып барыусы М. Билалов минең ҡағыҙҙы уҡып торманы, "Был һорауға бында яуап бирep булмай, кәңәшләшербеҙ", тип кенә ситкә алып ҡуйҙы. Иртәгәһен тағы Белоретка барып, район Советы рәйесе Расторгуевка индем, хәлде һөйләп бирҙем. Ул уйланып ултырҙы ла, "Бер нисә көндән директорығыҙ М.В. Дунаев отчет менән килә, уның менән бергә һеҙ ҙә килегеҙ әле", тине. 11 сентябрь көндө тағы Белоретка киттем. Район мәғариф идаралығы мөдире М.В. Дунаев менән икебеҙҙе саҡырып алды. Ныҡ торҙом, "Әгәр аҙ комплектлы булһа ла башҡорт класы асмаһағыҙ, баламды мәктәпкә бөтөнләй ебәрмәйем, русса уҡытып, һеҙ беҙҙең хоҡуҡты боҙаһығыҙ", - тинем. Шунан һуң ғына Инйәр мәктәбе директоры аҙ комплектлы башҡорт класы асырға риза булды, тик ул класс өсөн балаларҙы мин табырға тейеш инем. Икенсе көндө Инйәр ҡасабаһы буйлап сығып киттем. Ата-әсәләр менән һөйләшеп, унлаған ата-әсәне балаларын башҡорт класына күсерергә күндерә алдым. Мәктәп директорына ата-әсәләрҙең ғаризаларын алып барып бирҙем.

Миңә ремонт үткәрелмәгән бер кабинетты аҫҡысын бирҙеләр. Бүлмәлә өҫтәл, ултырғыстарҙан башҡа бер йыһаз да юҡ. Ошо кабинетты уҡыуға ярашлы хәлгә килтерергә бер аҙна ваҡыт бирелде. Мәктәп йыйыштырыусылары мине йәлләнеләр, ахыры, бүлмәне ағартырға, иҙән-тәҙрәләрҙе буярға риза булдылар. Ә мин дәреслектәр тураһында ҡайғыртырға тейешмен. Ауылдар араһында телефон бәйләнеше юҡ, транспорт ағы ла насар. Күрше-тирә ауылдарға барып, иҫке дәреслектәр һорап алдым. Райпотребсоюз складынан биш әлифба, рус телендә булһа ла алты математика, өсөнсө синыфҡа биш туған тел, өс башҡорт теле, бер нисә математика (русса) дәреслектәре алып ҡайттым. Ә рус теле дәреслеге юҡ. Белорет интернатында директор булып иремдең элекке уҡытыусыһы Фәрит ағай Рәхмәтуллин эшләй ине, уға барып, китапханаларынан иҫке булһа ла дүрт рус теле дәреслеге алдыҡ. Татлы-Көҙъйылға ауылдарында хәрби часть магазиндары эшләй ине: китап магазиндары шул тиклем бай, күпләп дидактик материалдар, таблицалар, төҫлө ҡағыҙҙар, буяу ҡәләмдәре һәм башҡа кәрәк-яраҡтар тейәп ҡайттым. Бүлмәмдә шкаф, кәштә һымаҡ бер йыһаз да юҡ. Ирем леспромхоздың бер складына емерек мебелдәр килтереп ырғытҡандарын күреп ҡалған. Ул да хәҙер минең " ауырыу" менән ауырый башланы бит инде. Ҡарауылсы ҡартҡа бер аҙ аҡса биреп, шул мебелдең тақталарын тейәп алып ҡайтты. Ике кистә шул таҡталарҙан стенд, кәштәләр эшләп, кабинетҡа алып барып урынлаштырҙыҡ. Бирелгән бер аҙна ваҡыт үтеп тә китте. Ниһәйәт, 15 сентябрҙә класымда ун уҡыусыны ҡаршы алдым. Биш уҡыусы беренсе синыфҡа, дүрт уҡыусы - өсөнсө, бер уҡыусы икенсе синыфҡа уҡырға килде. Ә директорҙың бойороғо ошондай ине: "Т.Ф. Машковой и З.И. Васильевой перевести слабоуспевающих учеников во вновь созданный малокомплектный башкирский класс под руководством Ш.И. Хажиной. Директор М.В. Дунаев".

Мәктәп өсөн бер тамаша булды был хәл. Директор инеп, кабинетты күҙҙән үткәреп, башын сайҡап, йылмайып сығып китте. Тәнәфестә башҡа уҡытыусылар, үҙемдең элекке уҡытыусыларым инеп, маладис, тип мине маҡтанылар. Мин ул көндө үҙемде яңы эш башлаған йәш уҡытыусы һымаҡ хис иттем. Яңы мәктәптә, яңы эштә беренсе һынауҙы уңышлы үттем шулай. Хәҙер инде уҡыу сифатын нығлап күтәрергә кәрәк буласаҡ. Урыҫ кластарында уҡытҡан уҡытыусылар бер ярым ставка менән эшләйҙәр, ә мин өс класта бер ставка менән эшләйем, дәрестән һуң уҡыусыларҙы өҫтәмә дәреҫкә алып ҡалам. Тағы икешәр-өсәр сәғәт артыҡ эшләп ҡайтам. Кластан тыш үткәрелгән сараларҙа ла һынатмаһындар, урыҫ балаларынан кәм булмаһындар, тип, бик ныҡ әҙерләнәм, сәхнәлә сығыш яһаусыларҙың кейемдәрен, тышҡы ҡиәфәттәрен хәстәрләйем. Өйөмдә булған тауарҙарҙан ҡыҙҙарға бер иш күлдәктәр, итәктәр, малайҙарға галстуктар, пилоткалар тегеп кейҙерәм. Ул ваҡытта магазиндарҙа бер нәмә лә юҡ, профкомдарҙа носки-колготкиларҙы, ситса тауарҙарҙы бүлешеп ултырған мәл ине бит. Ә мин туғандарым аша Татлыһағы хәрбиҙәр магазинына инә алам, шунан төрлө дефицит тауарҙар тейәп ҡайтам. Минең тырышлыҡ бушҡа китмәне, уҡыусыларым кластан тыш сараларҙа ла, төрлө бәйге-конкурстарҙа ла призлы урындар яулай торғайны. Бына шулай, ата-әсәләрҙең ышанысын аҡлап, урыҫ коллегаларымдың ихтирамын яулап, ун уҡыусынан башланған класты өс йылдан утыҙ уҡыусыға еткерҙем. Шунан дүрт класлыҡ балалар йыйылды. Был ваҡытҡа инде айырым башҡорт мәктәбе астырыу ихтыяжы килеп тыуҙы...

Ниңә был турала яҙырға булдым әле? Күптән түгел бер нисә таныш уҡытыусы (улар барыһы ла урыҫ мәктәптәрендә уҡыта): "Мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәре ҡыҫҡартылһа, эшһеҙ ҡалабыҙ инде", - тип зарланып торҙо. Бына шул уҡытыусыларға яуап итеп яҙҙым был юлдарҙы. Ни өсөн улар үҙҙәренең хеҙмәткә хоҡуҡын дауламай, ни өсөн башҡорт телен яҡламай?..

**Шәрғиә ЯҠШЫДӘҮЛӘТОВА.**
**Белорет районы Инйәр ҡасабаһы.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

8

# Шифа

9 - 15 сентябрь (нарысай)

2017 йыл

№36 (766)

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# АУЫРЫҒЫҢ КИЛМӘЙМЕ?

## Башҡорт милли ризыҡтары менән туҡлан!

**Хәҙерге фәнни медицинаның тамырҙары күп быуатлыҡ халыҡ тәжрибәһенә барып тоташа. Ошо ғилем сығанағынан рәсми медицинаға нигеҙ һалыусы Гиппократ, Гален, Әбүғалисина (Ибн Сина) һ.б. белем эстәй. Минераль сығанаҡтар, батҡаҡ менән дауалау, термаль газдар һәм быу, ҡымыҙ, дарыу үләндәре урындағы халыҡ тарафынан быуаттар буйы ҡулланыла. Тәҡдим ителгән мәҡәләлә ошо хаҡта һүҙ алып барыласаҡ.**



### Башҡорт халыҡ медицинаһында - хайуандар

XIX быуат уртаһына тиклем башҡорттар малсылыҡ һәм һунарсылыҡ менән әүҙем шөғөлләнә. Шуға күрә халыҡ медицинаһында йорт һәм ҡырағай хайуандарҙың һөт продукттары, айырым ағзалары, туҡымалары, физиологик шыйыҡсалары киң ҡулланыла.

Ҡымыҙ элек-электән ябығыу, хәлһеҙләнеү, аҙ ҡанлылыҡ, үпкә сирҙәре, боғаҡ (зоб) ваҡытында һәм тынысландырыусы сара булараҡ файҙаланыла. Уның дауалау сифаттары тураһында XIX быуаттың беренсе яртыһында Д.П. Никольский былай тип яҙа: "... башҡорттарҙа ҡымыҙ ябыҡҡан, хәлһеҙләнгән организмды тиҙ арала көс йыйҙырыуҙа һәм сәләмәтлекте тергеҙеүҙә иң яҡшы сара булараҡ ҡулланыла". Рус яҙыусыһы, хәрби табип В.И. Далдең "Нечто о кумысе" (1843) тип аталған мәҡәләһе йәмғиәттә ҙур резонанс тыуҙыра. Ырымбурҙа хеҙмәт иткәнендә ул ҡымыҙ менән таныша һәм уға юғары баһа бирә.

Дауа булараҡ ҡымыҙҙы башҡорттар айырым эшләй - ул көс биреүсе һәм иҫерткес эсемлек кеүек һыу ҡушып түгел, ә тик һөттән генә бешелә. Яңы ғына һауылған һөттө күн һауытҡа йәки ағас тәпәнгә ҡойоп, уға һөт һәм спирт әсеһе барлыҡҡа килһен өсөн ҡымыҙ әсеткеһе өҫтәгәндәр. Ҡымыҙ бешеү процесында бейә һөтөн даими рәүештә оҙайлы ваҡыт бешкәк менән болғап тороу ҙур әһәмиәткә эйә. 2-3 сәғәттән ҡымыҙ әҙер булған.

Бөгөнгә ҡымыҙ ентекле өйрәнелгән - унда бик күп биологик әүҙем матдәләр, шул иҫәптән биостимуляторҙар, антибиотиктар, витаминдар (бигерәк тә С витамины) табылған. Ҡымыҙ менән дауалау - үпкә һәм бөйөрәнес ағзалары туберкулезын, гастритты, нервылар системаһының айырым сирҙәрен, йыуан эсәктең һәм үт ҡыуығының дискинезияһын һ.б. дауалағанда билдәле һәм һөҙөмтәле ысул булараҡ ҡулланыла. Бер үк ваҡытта ул үҙенә дауалау сифаттарын да, диетик аҙыҡтың ҡиммәтле сифаттарын да туплаған.

Республика территорияһында ололар өсөн федераль әһәмиәттәге биш - Шафран, Чехов, Аксаков, Глуховская, Йоматау туберкулезға ҡаршы шифахана бар. Ҡоро һөттән ҡымыҙ эшләүҙең яңы, камиллаштырылған технологияһын индереү йыл әйләнәһенә был шифалы эсемлекте төрлө учреждениеларҙа, амбулатория шарттарында ололар һәм балалар өсөн дауалау-профилактика эсемлеге булараҡ ҡулланыу мөмкинлеген бирә.

Һуңғы тиҫтә йылдарҙа ҡымыҙҙы кәзә һөтөнән дә эшләйҙәр һәм был төрҙөң дә дауалау сифаттары юғары баһалана, сөнки кәзә һөтө составы буйынса әсә һөтөнә яҡын.

Ҡорот борон-борондан һалҡын алдырғанда тирләү, организмдан ҡайһы бер гельминттарҙы сығарыу, эс китеүен туҡтатыу, аппетитты көсәйтеү, күнел уйнауын баҫыу өсөн, шулай уҡ йылан саҡҡанда һәм ҡатын-ҡыҙ бала тапҡанда ҡулланыла. Шулай уҡ йөрәк ауыртыуын баҫа һәм күкрәктәге ауыр тойғоно еңеләйтә. Ҡорот һыуы (әрсет) өҫтөнә ултырған үнәҙ яраларҙы һәм эренле шештәрҙе дауалағанда файҙаланылған.

Һары майҙы эс ҡатыуын йомшартыусы, гельминттарға ҡаршы сара булараҡ һәм һауа йыйылыуҙан эс ауыртҡанда ҡулланғандар. Сирле бер тында бер йәки ярты стакан иретелгән майҙы эсергә тейеш булған. Әлбиттә, бындай күләмдә ҡулланыу ҡайһы бер осраҡтарҙа (мәҫәлән, киҫкен аппендицит), йомшартыу тәьҫире һөҙөмтәһендә сәләмәтлекте насарайтыуға ла килтергән.

Һөт һалҡын алдырғанда, үҙәк көйгәндә, аҙыҡ-түлек менән ағыуланғанда яҡшы сара. Яңы ғына һауылған һөт үпкә туберкулезы һәм башҡа үпкә сирҙәрендә, аҙ ҡанлылыҡ ваҡытында, ябығырға кәрәккәндә һәм организмды дөйөм нығытыусы булараҡ ҡулланылған. Бала имеҙеүсе ҡатындарҙың һөтө менән күҙҙәр янғанда, конъюнктивит ваҡытында күҙҙе йыуып, сылатҡыстар эшләп дауалағандар.

Башҡорттарҙа шулай уҡ йылҡы, һарыҡ, ҡаҙҙың иретелгән эс майы менән дауалау билдәле. Уларҙы һалҡын алдырғанда ыуыныу, еңеләйтеүсе сара итеп файҙаланғандар. Шулай уҡ халыҡ медицинаһында бурһыҡ, айыу майы һәм ите (бигерәк тә туберкулезҙан дауаланғанда) ҡулланылған. Күгәрсен итен быума йүтәл (коклюш) ваҡытында ашатҡандар. Баш ауыртҡанда яңы ғына һуйылған тауыҡтың эс майын һалғандар.

Ваҡ хайуандарҙың тиреһе эмпирик хирургияла ҡулланылған. Конъюнктиваль ҡап һәм күҙ мөгөҙсәһенә (роговица) нимәләр инеп, уны алып булмаған осраҡта йылан тиреһенән (йылан ҡауы) бәләкәй генә ҡау алына, ентекләп йыуыла һәм күҙ ҡабағы эсенә ҡуйыла. Күпмелер ваҡыттан һуң ҡау һәм сит әйбер сыға.

Кеше тәкөрөгән эренле конъюнктивит ваҡытында зарарһыҙландырыусы сара булараҡ ҡулланалар. Ҡолаҡ тишкәндә лә епте тәкөрөкләгәндәр, сөнки унда бактерицид матдә - лизоцим бар.

Медицинала боронғо дауалау ысулы булып һөләк һалыу тора. Уларҙы ҡулланыуҙың һөҙөмтәлелеген фәнни медицина күптән раҫлаған. Башҡорттарҙың халыҡ медицинаһында һөләктө баш ауыртҡанда, баш әйләнгәндә, түлдән ҡалыу йәки гипертония сиренә бәйле баш шаулағанда (бигерәк тә оло йәштәгеләрҙә күҙәтелә) ҡуйғандар, шулай уҡ бил ауыртҡанда, ҡулдар һәм аяҡтар, теш һыҙлағанда һалғандар.

Башҡорт халыҡ медицинаһында урман ҡырмыҫҡалары ла ҡулланылған. Ҡулдар йәки аяҡтар һулҡылдап һыҙлағанда кешене ҡырмыҫҡа иләүенә ултыртып, 15-20 минут тотҡандар. Ҡырмыҫҡаларҙың үҙҙәрен ыуыныу өсөн файҙаланғандар. Һауыт төбөнә шәкәр һалып, уны ҡырмыҫҡа иләүенә ултырталар, һуңынан алып, бөжәктәр тулыһынса ирел бөткәнсе, йылы мейескә тығалар. Бындай дауа барлыҡ һулҡылдап һыҙлаған урындарҙа һөртөлгән. Шулай уҡ уны кеше иҫтән яҙғанда нашатыр спирты урынына ла файҙаланғандар.

Башҡорт балы элек-электән үҙенең дауалау сифаттары менән данлана. Йүкә урмандарының, төрлө сәскәгә бай яландарҙың һәм далаларҙың күплеге башҡорт балына айырым үҙенсәлек бирә. Бөрйән районының ҡуйы урмандарында әлегә тиклем солоҡсолоҡ һаҡлана. Дауалауҙа башҡорт балын ҡулланыу хәҙер инде тәбиғиғә әүерелеп, апитерапия ысулдары киңерәк тарала бара.

Башҡорт халыҡ медицинаһында бал тирләтеүсе сара булараҡ файҙаланыла - унһын менән тәндә ыуалар, күкрәккә компресс эшләйҙәр. Һимереү менән яфаланғанда иртән ас ҡарынға ярты стакан ҡайнатып һыуытылған һыуға бер ҡалаҡ бал болғап эсергә һәм ике сәғәт дауамында ашамаҫҡа кәрәк. Кискеһен шулай уҡ йоҡларҙан ике сәғәт алда ас ҡарынға 1 ҡалаҡ иретелгән бал ашарға. Бындай дауа бер нисә көн дауам итә.

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

ЯҢЫЛЫҠТАР

## ТЫУҒАНҒА ТИКЛЕМ ҮК...



**Башҡортостан автономияһының 100 йыллығына республикала 14 һаулыҡ һаҡлау объекты төҙөләсәк һәм яңыртыласаҡ.**

Уларҙың иң ҙурҙары - ул Республика кардиология үҙәге бинаһын реконструкциялау һәм хирургия корпусын төҙөү, Республика клиник психотерапия үҙәге стационарын реконструкциялау, Республика клиник онкология диспансерының хирургия корпусына төкөтмә һалыу, Учалы үҙәк район дауаханаһының хирургия корпусын, Туймазыла балалар поликлиникаһын төҙөү. Киләсәктә шулай уҡ Өфөлә паллиатив үҙәк төҙөү, 3-сө бала табыу йортон, Республика ҡан биреү станцияһын реконструкциялау, уның ҡарамағында плазма үҙәге булдырыу күҙаллана.

Башҡортостан Хөкүмәтендә шулай уҡ ошо көндәрҙә Өфөлә Республика медицина-генетика үҙәге булдырыу тураһындағы Ҡарарға ҡул ҡуйылды. Ғилми учреждениены Башҡорт дәүләт университеты биология факультеты медицина генетикаһы һәм фундаменталь медицина кафедраһы ҡарамағындағы заманса үҙәк нигеҙендә асыу күҙаллана. Биология фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Биохимия һәм генетика институты директоры вазифаһын башҡарыусы, илебеҙҙең популяция һәм медицина генетикаһы өлкәһендәге алдынғы белгестәренең береһе Эльза Хөснөтдинованың һүҙҙәренсә, яңы үҙәк республика һәм бөтә Волга-Урал төбәге халҡын нәҫел, онкология һәм социаль әһәмиәттәге ауырыуҙарҙы заманса юғары технологик молекуляр-генетика алымдары менән иртә диагностикалау һәм дауалау спектры менән тәьмин итә аласаҡ.

- Ошондай үҙәкте булдырыу, молекуляр генетика алымдарын индереү республикала һәр пациенттың генетик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алыу менән дауалау ысулын һайлап, шәхси медицинаға күсергә мөмкинлек бирәсәк, - тип иҫәплəй профессор. - Беҙ сабый донъяға килгәнгә тиклем нәҫел, онкология ауырыуҙарына иртә ДНК-диагностика үткәрә, ауыр нәҫел ауырыулы балаларҙың тыуыуын кисектерә, ғүмерҙе оҙайта һәм кешеләрҙең йәшәү сифатын яҡшырта аласаҡбыҙ.

## ҮЛЕМ СИГЕНӘ...



**Башҡортостанда онкологиянан үлем осраҡтары уртаса Рәсәй күрһәткестәренән түбәнерәк.**

Был турала республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында уҙған кәңәшмәлә Республика онкология диспансерының баш табибы Руслан Солтанов белдерҙе. Ул хеҙмәттең төп күрһәткестәрен һәм бурыстарын уҡып ишеттерҙе, яман шеш ауырыулылар араһында үлем осраҡтарын кәметеү буйынса саралар хаҡында һөйләне. Руслан Солтановтың һүҙҙәренсә, бөгөнгә көнгә республикала алдан диагностикалау күрһәткестәре арта һәм яман шеш процесына еткергән осраҡтар кәмей. Күрһәткестәрҙә артабан да яҡшыртыу өсөн, атап әйткәндә, скринингтар күләмен һәм һөҙөмтәлелеген арттырырға тәҡдим ителде. Мәҫәлән: диспансеризация программаһына шыйыҡ цитология алымы менән анализ муйынсаһы шешен һәм махсус антигенға тест менән енес биҙе шешен диагностикалау индереләсәк.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# ҺАУЫҒЫУ ӨСӨН...

## табипҡа ышаныу ҙа етергә мөмкин

**Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Кем дә кем дауалау эшенә тотона һәм ул кешенең дауалау оҫталығы тураһында бер нәмә лә билдәле түгел, ул үҙенә бик ҙур яуаплылыҡ ала". Табиплыҡ эше башҡа эшмәкәрлектән ҡырҡа айырыла. Ни өсөн тигәндә, ул ауырыу кеше менән эш итә һәм һау кешенән айырмалы рәүештә, сирле кеше ауырыу һөҙөмтәһендә бер аҙ үҙгәреп тә ҡуя.**

Шуға күрә табип үҙе белем алған өлкәнең белгесе генә түгел, гражданин, йәмғәт эшмәкәре лә булырға тейеш. Табип даими рәүештә үҙен-үҙе тәрбиәләргә бурыслы. Үҙ-үҙенде тәрбиәләү - бик ҡатмарлы һәм оҙайлы процесс. Ысын табип үҙе шөғөлләнгән эшмәкәрлеге, ауырыу һәм йәмғиәт алдындағы бурысы хаҡына эш итә. Медицина классиктары табипҡа хас ошондай үҙенсәлектәрҙе атай: үҙ өлкәһен бик яҡшы белеү, кешенең сирен тиҙ арала аңлап, кәрәкле саралар күреү, үҙ-үҙен тыныс һәм ышанысл тота белеү һ.б.

Ауырыу табипҡа ышанырға тейеш. Шуныһыҙ һауығыу процесы оҙаҡҡа һуҙылыуы мөмкин. Бер-береһен тулыһынса аңлау, тығыҙ мөнәсәбәттәр, табиптың һәр әйткәнен үтәү - һауығыуға илткән юлдар. Сирләгән кеше шул хаҡта онотмаһын ине: бары тик үҙенең һауығыуына сикһеҙ ышанған кеше генә ауырыуын еңә ала.

Табип өсөн баҫалҡылыҡ - иң кәрәкле сифат. Билдәле ғалим, бөтә тормошон медицина өлкәһенә бағышлаған Әбуғалисина, үлер мәле еткәс, былай тип әйтеп ҡалдырған: "Кешеләр үҙҙәренең бер нәмә лә белмәйенсә үлеп китеүен тойоп, теге донъяға күсә". Әйткәндәй, Әбуғалисинаның һаулыҡ һаҡлауға бағышланған күп томлыҡ хеҙмәттәрен бөгөнгө медицина ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнә.

Әлбиттә, оптимизм хисе һәр табипта ла булырға тейеш, әммә үҙ көсөнә уғата ышаныу ҙа килешмәгән хәл. Табип тере кеше менән эш иткәнен бер минутҡа ла онотмаҫҡа тейеш.

Табип өсөн дөрөҫлөк - эшмәкәрлегенең төп шарты. Ҡайны саҡ уға ауырыу һәм уның туғандары өсөн бик үк күңелле булмаған нәмәләрҙе хәбәр итеү бурыс итеп йөкмәтелә. Бәҙзе бер тәжрибәһеҙ һәм үҙенә артыҡ ныҡ ышанған табиптар сирлеләргә дөрөҫөн әйтмәүсән. Дөрөҫөн әйтеү, әлбиттә, һәр ваҡыт ҡыйын, әммә был табип өсөн мөмкин булмаған хәл. Былдай ваҡытта табип, хәҡиҡәтте йәшермәйенсә генә, шулай ҙа ауырыуҙың психикаһын һаҡларға тырышып, диагнозды хәбәр итергә бурыслы.

Табиптың әйткән һәр бер һүҙе оло мәғәнәгә эйә. Ул бер үк ваҡытта сирле кешене мөғжизәле рәүештә һауыҡтыра ла, үлемгә этәрә лә ала

**"Медицина Пророка" китабынан.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# АУЫРЫҒЫҢ КИЛМӘЙМЕ?

## Башҡорт милли ризыҡтары менән туҡлан!

(Башы 7-се биттә).

### Башҡорттарҙа көнкүреш физиотерапияһы

Башҡорттарҙың халыҡ медицинаһында тәбиғәт-климат факторҙары менән дауалау ҙа күптәнән билдәле. Республика төрлө тәбиғи дауалау сығанаҡтарына ла бик бай. Уларҙың күптәре (Аҫҡын, Асы минераль һыуҙары, Асылыкүл, Мулдаҡ күлдәре, билдәле Янғантау тауы һ.б.) край халҡына билдәле була һәм фәнни медицина килеп ингәнсе уларҙы дауалау маҡсатында файҙаланғандар.

Үсемлектәр, минераль матдәләр, хайуандар ҡулланылған көнкүреш физиотерапияһы (йыуындырыу, ванна, йылытыу, аппликациялар, төрөү һ.б.) процедуралары менән тын юлдарының, терәк-хәрәкәт һәм мускул аппараттарының, бизгәк торошоноң һ.б. ағзаларҙың төрлө сирҙәрен дауалағандар. Былдай физиотерапияның һөҙөмтәлелек барометры булып тирләү торған (тир менән сир сыға). Дауалау процедуралары йөрәк күпме күтәрә, шунса дауам иткән. Йөрәк, үпкә сирлеләрҙең ҡайһы бер категорияһы өсөн былдай көсөргәнеш зыянлы ла булған.



Экзема, ҡысытма, пиодермия, бәшмәк ауырыуҙары ваҡытында тоҙло күлдәрҙә һыу инеү файҙалы тип һаналған. Уларҙағы ләм аппликация формаһында һөйәк-быуын аппараты, мускулдар ауырыуҙарын дауалауҙа ҡулланылған. Бигерәк тә Әбйәлил районының Мулдаҡ күле бик популяр булған. Әлеге ваҡытта күлдең батҡағы нигеҙендә "Яктыкүл" шифаханаһы эшләй, Магнитогорск ҡалаһының дауалау учреждениеларында терапия үткәрелә. Красноусольск курортында батҡаҡ, минераль ванналар менән дауалайҙар.

Янғантауҙың быуын һөйәк, быуындар, мускулдар ауырыуҙарынан файҙаланалар. Тау итәгендә сирле баҫып торорлоҡ соҡор ҡаҙып, кешене шунда баҫтырғандар һәм ул тауҙан сыҡҡан йылы быу тәьҫирендә торған. Бәҙҙен заманда Янғантауҙың дауалау сифаттары Г.Н. Тереғоловтың (1955) күп йыллыҡ күҙәтеүҙәре менән раҫланған. Бөгөн Янғантау шифаханаһы республиканан ситтә лә киң билдәле. Йылы ҡояшлы көндәрҙә, ғәҙәттә, майҙың икенсе яртыһында, июндә йылға һәм күл буйҙарында физиотерапия үсемлектәрҙә боҫламаһынан ғибәрәт була. Был осорҙа үсемлектәрҙә дауалау сифаттары көслө. Боҫлама өсөн үләндәр, ағас, ҡыуаҡ япраҡтары ҡулланыла. Бигерәк тә уҫаҡ япрағы юғары баһалана, нығыраҡ һөҙөмтә алыу өсөн уға мәтрүшкә, кейәү үләне (чабрец), артыш ҡушалар. Ерҙә соҡор ҡаҙып, уның төбөндә усаҡ яғалар. Һуңынан соҡорҙо күмерҙән һәм көлдән таҙартып, йылынған ергә үсемлектәрҙе һалып, сирлене шунда күмәләр. Боҫламаны шулай уҡ мунсала ла эшләйҙәр. Бының өсөн үсемлектәрҙе ҡайнар һыу менән бешекләп, уны янғансы ҡапсыҡта тоталар.

Үсемлектәр нигеҙендә мискәләрҙә ванналар эшләйҙәр. Физиотерапияның киң таралған төрө булып ауырыуҙы ҡыҙған ҡомға күмеү тора. Бик һирәк осраҡтарҙа боҫламаны, ваннаны кипкән үләндәр ҡулланып, ҡышын да эшләгәндәр.

Баш ауыртҡанда, теш һыҙлағанда, фурункул сыҡҡанда һ.б. физиотерапия ошо урынға ғына эшләнә. Ағас көлөн, ҡомдо, ҡыҙыл балсыкты, тоҙҙо, көрпәне, орлоҡто йылытып, тығыҙ туҡыманан тегелгән тоҡҡа һалып, ауыртҡан урынға ҡуялар.

Башҡорттарҙың халыҡ медицинаһында мәмерйә һауаһын, атап әйткәндә, Шүлгәнташ мәмерйәһен, файҙаланғандар. Тын ҡыҫылғанда, хроник тымау ваҡытында сирле көн һайын 1-2 сәғәт мәмерйәлә булған.

Халыҡ медицинаһында эс төшкәндә, эс ҡатыу, метеоризм, йөрәк ҡағыу һәм ныҡ ҡурҡҡандан һуң йөрәк тапҡырында ауыртыуҙар булғанда, мускулдар, быуындар ауыртҡанда һ.б. һылау (массаж) киң таралған. Быуын тайғанда, репозиция (һынған һөйәктәрҙе тура килтереп урынына ҡуйыу һәм беркетеү буйынса ярҙам), ҡатынҡыҙ бала тапҡанда кендек әбейе ярҙам иткәндә дауалау һылауы мотлаҡ компонент булып һаналған. Һылау менән бер үк ваҡытта йылытыу процедураһы йәки мал майы менән ыуыу (һабынлау) башҡарылған. Эс төшкәндә уны мунсала һыларға тырышҡандар. Эстең йылытылған һәм боҫланған өлөшө аҫтан өҫкә табан һыланған һәм бер нисә көнгә бәйләп ҡуйылған, бер нисә ай дауамында ауыр эш тыйылған. Шулай уҡ һылау ваҡытында өшкөрөү ҙә мотлаҡ атрибут булған. Бөгөнгө механик терапияның сығышы боронғо "кернә тартыу" кеүек дауалау ысулына барып тоташалыр, моғайын. Дауалаусы, башы ауыртҡан кешенең ауыртыу көслө булған урындағы сәсен теше менән тешләп, бер нисә тапҡыр тартҡан. Көслө баш ауыртыуы "тиренең һөйәктәргә йәбешеүе"нән барлыҡҡа килә, тип уйлағандар. Ә инде уны "азат иткәс", баш ауыртыуы туҡтарға тейеш булған.

### Дөрөҫ туҡланыу - сәләмәтлек нигеҙе

Ризыҡ әҙерләү өсөн башҡорттар ғәҙәттә шишмә һыуын ҡулланған. Улар ҡаты һыуҙағы тоҙҙар ашҡаҙандың лайлалы тышсаһына ултырып, төрлө ауырыуҙар тыуыуға сәбәп була, тип уйлаған. Шулай уҡ йылға һыуы ла файҙаланылған, әммә уны иртә тандан алғандар. Ағын һыу үҙен-үҙе таҙарта, тигәндәр. Ҡышҡыһын ҡар иреткәндәр.

Халыҡтың күпселеге баҡсасылыҡ менән шөғөлләнмәгән. Йәшелсәләрҙе рус һәм украин ауылдарынан һатып алғандар. Йәйгеһен ашарға яраҡлы ҡырағай үсемлектәр - балтырған, йыуа, ҡымыҙлыҡ, ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ һ.б. күпләп ҡулланыла. Улар, нигеҙҙә, сей килеш ашала. Урманда үҫеүсе ҡырағай еләктәр: ҡайын еләге, ҡыҙыл көртмәле, ҡурай еләге, ҡарағат, сейә, муйыл, көртмәле һ.б., яҙғыһын ҡайын һыуы ҡулланыла. Тәбиғәт байлыҡтарын ҡулланыу организмдың витаминдарға, ферменттарға, микроэлементтарға, башҡа биологик әүҙем матдәләргә ихтыяжын тулыландырырға ярҙам итә.

Көҙгө-ҡышҡы осорҙағы гиповитаминоз торошонан ниндәйҙер кимәлдә ит-һөт ризыҡтары һәм консерваланған үсемлек ризыҡтары һаҡлай. Бәлки, шуға күрәлер ҙә, XIX быуаттың 70-80-се йылдарына тиклем крайҙың аҫаба халҡы араһында зәңге ауырыуы күҙәтелмәй.

Шулай уҡ башҡорттар ҡайнамаған һыуҙың организм өсөн кире йоғонтоһон белгән һәм һыуһын ҡандырыу өсөн сәй эсеүҙе хуп күргән. Уны әҙләп һәм йыш эскәндәр. 1899 йылда Д.П. Никольский бер ултырғанда 30-40 стакан сәй эскән осраҡтарҙы күҙәткән. Әлбиттә, сәй менән былдай артыҡ мауығыу йөрәк-ҡан тамырҙары һәм нервылар системаһына артыҡ көсөргәнеш биргән, ҡан шыйыҡланған, сәләмәтлеккә зыян килгән. Һөт ризыҡтарынан ҡатыҡ, айран, ҡымыҙ эскәндәр. Иҫерткес эсемлектәрҙән - һары бал (бал балы), буҙа, ҡымыҙ.

Башҡорт аш-һыуының ассортименты ҙур булһа ла, көндәлек тормошта бер төрлөлөк күҙәтелгән. Байҙар көн һайын итле ризыҡ (бишбармаҡ, ҡуллама) ашаһа, күпселек халыҡ ҡатыҡ йәки ҡорот һалынған өйрә, ярма аштары, бутҡа, сәй менән мөрхәтһенгән. Ит аштарын һирәк күргәндәр, аслыҡ йылдарында төрлө ҡырағай үләнде ризыҡ итеп файҙаланғандар.

Иттән йылҡы, һарыҡ, йорт ҡошо итенә өҫтөнлөк бирелгән. Йылҡы итен ашаһаң, бигерәк тә майлыһын, кешелә һыуыҡҡа тороҡлолоҡ барлыҡҡа килә, тип иҫәпләгәндәр. Хәҙерге ғилми тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, йылҡы ите, башҡа иттәр менән сағыш-

✓ *Хатта ике йыл һаҡланған ҡоротта ла С витамины бар. Айырым махсус һауыт талап ителмәгән оҙаҡ һаҡлау мөмкинлеге, дауалау сифаттары ҡоротто оҙайлы сәфәр һәм экспедициялар ваҡытында алыштырғыһыҙ итә.*



тырғанда, май-кислота составының балансы булыуы менән айырыла. Унда байытылмаған май кислоталары төркөмө (полиненасыщенные жирные кислоты) бар, шуға күрә йылҡы майы еңел үҙләштерелә, йылы һәм энергияны күберәк бүлеп сығара, тимәк, кеше бик өшөмәй.

Малсылыҡ менән шөғөлләнеү башҡорттарҙа тиҙ боҙолоусан ризыҡтарҙы консервалауҙың билдәле формаларын тыуҙыра. Киң таралған ысул - ҡаҡлау. Ит киҫәктәренә еңелсә тоҙ һибеп, уны ҡоро, елләй торған урынға элгәндәр. Иретелмәгән эс майын да шулай консервалағандар. Ҡаҙы эшләү ҙә киң таралған. Эсәктәргә тоҙ һөртөлгән йылҡы майы һәм итен тултырып, шулай уҡ ҡаҡлағандар. Ҡаҡланған ҡаҙы оҙаҡ һаҡлана.

Башҡорттар бер ваҡытта ла ризыҡҡа талаҡ, лимфа биҙҙәрен ҡулланмаған. Был ағзалар - барьер функцияһын үтәп, организмға эләккән сирҙәрҙе, сит есемдәрҙе туплап тороусы урын. Шулай уҡ ҡошҡорттоң ҡаны, елеге, мейеһе ризыҡ итеп ҡулланылмаған. Ҡаны ағыҙылмаған хайуандың ите харам иҫәпләнгән, Ислам йоғонтоһонда сусҡа итен ашау тыйылған.

Һөттө ҡайнатып, бер нисә көн дауамында һаҡлағандар йәки ҡатыҡ, һөҙмә иткәндәр. Ҡышҡыһын - туңдырғандар. Аҡ майҙы тиҙ арала ҡулланырға булғанда бер аҙ тоҙлағандар, ә инде оҙаҡ һаҡлау өсөн һары май итеп иреткәндәр. Эремсектән әжекәй (ҡыҙыл эремсек) эшләп, уны киптереп, бер нисә ай һаҡларға мөмкин булған.

Ҡорот шулай эшләнә: айыртылған һөттө ҡайнатып, ҙур ағас тәпәнгә йыйып, ҡатыҡ итеп әсетелә. Һуңынан ҡайнатылып, һыуы һарҡытыла, эремсек кеүек масса һығып алына һәм паста рәүешле масса килеп сыға (йәш ҡорот). Уны оҙағыраҡ һаҡлау өсөн бер аҙ тоҙлап, 7-10 сантиметр диаметрында шарҙар әүәләп, күләгәле урында киптерәләр, ҡайһы бер осраҡта ыҫлайҙар. Кипкән ҡоротто бик оҙаҡ һаҡларға була. Кәрәк ваҡытта уны бысаҡ менән ҡырып, ҡайнар һыуға болғап ҡулланалар. Аҡ май ҡушып ебәргәндә, ул майлы һурпа тәмен бирә. Хатта ике йыл һаҡланған ҡоротта ла С витамины бар. Айырым махсус һауыт талап ителмәгән оҙаҡ һаҡлау мөмкинлеге, ризыҡ булараҡ тулы ҡиммәтлелеге, дауалау сифаттары ҡоротто оҙайлы сәфәр һәм экспедициялар ваҡытында алыштырғыһыҙ итә.

Башҡорттар ҡырағай үҫемлектәрҙе консервалап һаҡлаған. Ер еләгенән, ҡарағаттан, баландан, ҡайын еләгенән ҡаҡ ҡойғандар. Быны өсөн еләктәрҙе бутҡа кеүек итеп төйөп, май һөртөлгән таҡтаға йәйгәндәр. Кипкәндән һуң ҡаҡты торба рәүешендә төргәндәр. Ул оҙаҡ һаҡлана, витаминдарға бай. Ҡайһы бер еләктәрҙе (ҡыҙыл көртмәле, сейә, көртмәле, бөрлөгән һ.б.) һары майға болғап һаҡлағандар. Муйылды, сейәне һ.б. еләктәрҙе киптергәндәр.

### Башҡорттарҙың көнкүреш гигиенаһы

Ашар алдынан ҡул йыуыу мотлаҡ. Ризыҡты оҙаҡ сәйнәргә ҡушыла, күп ашамаҫҡа һәм ашыҡмаҫҡа, тәнгә ҡарай ашамаҫҡа. Артыҡ күп ашау, бирәнлек, шапшаҡлыҡ, насар тип һаналған, кешенең сире күбәйһә, сәбәбен унын туҡланыуы боҙолоуына бәйләгәндәр.

Аш-һыу әҙерләнгән булмә таҙа булырға тейеш. Ҡатын-ҡыҙ ризыҡ әҙерләгәндә алъяпҡыс бәйләп, башына яулыҡ ябынған. Аҙыҡ-түлеккә сәс төшөүе ғәйепләнгән. Күрем ваҡытында ҡатын-ҡыҙға ризыҡ әҙерләү рөхсәт ителмәгән. Мәйет сыҡҡан өйҙә ике көн ашарға әҙерләү тыйылған. Аҙыҡ-түлек, әҙер ризыҡ һәр ваҡыт ябыҡ килеш һаҡланған. Һауыт-һаба ла "шайтан яламаһын" өсөн ябыҡ урында йәки түңкәрелгән килеш тотолған. Хөрәфәт артында ҙур аҡыл йәшеренгән: ризыҡ, һауыт-һаба туҙан, микроб инеүҙән, кимереүселәрҙән, эт-бесәйҙән һаҡланған.

Айырым ризыҡтар, мәсәлән, бишбармаҡ, бауырһаҡты ҡул менән тотоп ашайҙар. Революцияға тиклем ҡайһы бер авторҙар был күренеште гигиенаға ҡаршы тип һүрәтләргә тырышһа ла, ҡулды ентекләп йыуғанда бындай ысулдың зарары юҡ.

Ир-ат гигиенаһы: сөннәт, 5 тапҡыр тәһәрәт алыу, тәүлегенә 5 намаҙ.

Ҡатын-ҡыҙ гигиенаһы: ауырлы ҡатын-ҡыҙҙы физик һәм психик көсөргәнештән һаҡлағандар; ит һәм һөт аштары ашатҡандар; баланы кендек әбейҙәре ҡабул иткән, сабый тыуғандан һуң 2-3 сәғәт үткәс, имеҙгәндәр, 40 көн үтмәйенсә баланы кешегә күрһәтмәгәндәр.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Башҡорттарҙың дауалау саралары һәм ысулдарында бик күп ыңғай мәлдәр бар, улар бөгөн дә ҡулланыла. Йылҡы итен ҡулланыуҙың кешенең һыуыҡҡа тотороҡлолоғо, ҡороттоң оҙайлы һаҡлау һәм ҡулланыу өсөн уңайлы ризыҡ булыуы һ.б. һаман да ныҡлы ғилми тикшереү талап итә.**

**Азамат РӘХИМҠОЛОВ,**
**медицина фәндәре кандидаты,**
**БДМУ доценты.**

ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ

# Ә ШУЛАЙ ҘА ХОҘАЙҘАН...



## аяҡлы ғүмер һора

**Халҡыбыҙ борон төрлө им-томдо, дауа ысулдарын күпләп ҡулланған. Ошо хазинаны - дауалау төрҙәрен, һамаҡ-доғаларҙы әҙме-күпме хәтерләүселәр бөгөн дә бар арабыҙҙа. Әбйәлил районы Байым ауылында йәшәүсе Әнүәрә апай МОНАСИПОВА-ХӘЙБУЛЛИНА шундайҙарҙан һәм уның исеме гәзит уҡыусыларға яҡшы таныш. "Өләсәйем, әсәйем өйрәткәндәрҙе, үҙем белгән, иҫләгәндәрҙе йәштәргә еткерге килә. Һәр кем донъялыҡта белгәнен башҡаларға өйрәтеп ҡалдырырға бурыслы", - ти Әнүәрә апай һәм түбәндәге яҙмаларын тәҡдим итә.**

### Ер өҫтө

Ағиҙел буйына, Бүкәнташ, Тирмән күл, Әүлиә шишмәһе, төрлө ағаслы урман ҡаплаған тауҙар ҡосағына һыйынып ултырғанғамы, ауылымдың һәр бер өйөндә бер әмәл, бер ырым, бер им-том, бер өшкөрөү була ине.

Хисамова Зөлфикамал әбейҙең һөйләгәне иҫемдә. "Әҙәм балаһы ғүмере буйы күперҙәрҙә, төрлө урындарҙа, тәбиғәт ҡосағында була. Шул ваҡытта ул ергә оло һәм кесе яраһын түгеп китә. Әгәр ул ярауҙар ҡапланмаһа, күмелмәһә, Хоҙай ҡояшлы әсе көндәр, ҡойма ямғырҙар биреп, ерҙе таҙалай. Шуға күрә, әҫелекте, ҡойма ямғырҙы әрләмәгеҙ, "Әгүҙә"не уҡып, тәүбә итегеҙ. Быны эшләгән - ижад кешеһенә, эшләмәгәне төпһөҙ суманға (сумкаға) тиң булыр".

Ә бөгөн беҙҙең меҫкен Ер-әсә битендә нимәләр генә ятмай, шуға ла һыу баҫыу, ер тетрәү кеүек ҡазаларҙы Хоҙай бирә, иҫкәртә тора, аңламай ғына һәләк булабыҙ.

### Күкрәк һөтө

Беҙ бала саҡта, күҙ ауыртһа, имеҙгән берәй ҡатын менән килешеп, әжер-саҙаҡаһын биреп, ауыртҡан күҙгә күкрәктән туранан-тура һөт һиптертәләр ине. Әлбиттә, доға уҡыла, теләк теләнә. Минең ҡан һауған күҙҙәремә ике туған Ғилмикамал апайым күкрәк һөтөн һиптерҙе. Әсәйем уға бер тоҡ картуф, бер туҫтаҡ умарта балы бирҙе. Ә өләсәйем ауыртҡан күҙҙәрҙе йылы һейҙәк менән йыуҙыра ине. Ағиҙел һыуында күҙ әсенә һабын индереп тә йыуырға ҡуша ине.

### Аҙ ҡанлылыҡ

Был да етди сир иҫәпләнгән, күрәһең. Эркет ҡайнатҡанда, ойотҡан ойотҡанда ҡыр сейәһенең япрағын мул итеп ҡушып ҡайната инек. Өләсәйем әйтеүенсә, ҡыр сейәһе һәм япрағы ҡанды күбәйтә, һаулыҡ бирә. Ҡауын ашаһаң да ҡан таҙара. Беҙ уны күпләп үҫтерә инек.

### Артыш урынына дегәнәк

Хәҙер кешеләр тау ҡыҙырып йөрөп, артышты һыпырып йыя. Борондан артышты ишек башына ҡыҫтырып ҡуйғандар - сир-зәхмәттән һаҡлай, кеше үлгәс, артышты яндырһаң, микробтар үлә, тигәндәр. Күп кеше унын төнәтмәһе менән йыуына, күҙ тейһә, төтөнөнә ыҫлаланалар. Ләкин өләсәйем артышты һындыртманы, һаҡларға ҡушты, сөнки артыш бөтә тирә-яҡты ла, ауылды ла үҙенең көсө менән сирҙәрҙән дә, насар көстәрҙән дә һаҡлай. Унын урынына дегәнәк ыҫын, дегәнәк һыуында йыуыныуҙы өйрәтте.

### Әҫке

Мин үҫкәндә ҡара әҫке, һары әҫке тигән ауырыуҙар була торғайны. Ҡара әҫке булһа, кешенең йөҙө ҡап-ҡара, ә һарыһында - һап-һары була. Бауыр сире инде ул. Батыр осҡан тауы итәгендә әҫке еләге күп була торғайны. Шул еләкте күпләп йыйып, киптереп алалар ҙа, ауырығандарға бирәләр ине. Үкенес, хәҙер ул еләк бер ерҙә лә осрамай. Алабутаға оҡшашыраҡ, еләктәре эре, ҡыҙыл була. Унан һуң, өләсәйем ауырыуға лимон ҡабығы ла ашата ине.

### Ҡылған баш ҡоҫа

Ҡылған иң таҙа, иң ҡаты үҫемлек. Уны үткер тешле йылҡы малы ғына ашай, шуға ла йылҡылар һау-һаҡ, сирһеҙ була. Ҡылған баш ҡоҫҡан мәлдә өләсәйем беҙҙе ҡылған еҫкәп ҡайтырға ҡыуыр, йылҡылар һымаҡ шәп булырһығыҙ, тип аңлатыр ине. Ысынлап та, хәҙер фән менән ҡылғандың туҡлыҡлы булыуы ла, файҙаһы ла иҫбатланған.

### Ҡына сәскәһе

Хәҙер ҡына порошогы менән сәс буяйҙар. Беҙ үҫкәндә өләсәйем ҡына сәскәһен тоҙ менән изеп, ҡул-аяҡ тырнаҡтарына бәйләй ҙә, эт тырнағы сыҡмаҫ, тырнаҡтарығыҙ һынмаҫ, тип әйтер ине. Ә беҙгә һәр бармағыбыҙ һайын "Әгүҙә"не уҡырға ҡуша. Тырнаҡтар лакланған һымаҡ ҡып-ҡыҙыл була, һынмай ҙа, эт тырнағы ла сыҡмай. Өҫтәп кишер сәйе эсерә ине. Ә хәҙер тырнаҡ һынһа, кишер ашарға ҡуша врач. Үәт әй, өләсәй ҡайҙан белгән икән?

### Өләсәйем девизы

"Ауырый башлағас түгел, ә һау-сәләмәт саҡта ауырыуға ҡаршы көрәшергә кәрәк", - тип әйтергә яратты өләсәйем.

Көҙгә эштәр бөтөр-бөтмәҫ, аҙыраҡ һыуыҡтар төшә башлау менән, ул беҙҙе киҙеүҙән дауалай башлай. Таҫҡа бөтнөк, 1-2 ҡуҙаҡ ҡыҙыл борост урҭаға ярып һала, ҡайнар һыу ҡоя, әҙерәк һыуынғас, аяҡтарҙы тыҡтыра ла юрған менән ябып ҡуя. Арҡаны һөйөп ултырабыҙ. Иҫке фуфайканан мамыҡ алып быҫҡыта ла, еҫкәргә ҡуша.

Мунса ингәндә йүгертеп сығарып ҡарҙа ауната, йыуынып бөткәс, һыуыҡ һыу менән ҡойондора. Аллаға шөкөр, ҡыш һис ауырымай сыға инек. Был мәлдә ул беҙҙе йүкә сәскәһе сәйе менән һыйлай ине.

### Бесәй табаны үләне

Был үлән бөтә ерҙә лә үҫә. Уның шифаһы тураһында әкиәттә лә әйтелә. Ғөмүмән, күп әкиәт, хикәйәттәрҙә дауаланыу ысулдары бирелә, иғтибар менән уҡырға ғына кәрәк.

Үҫкәндә ни, гел ялан аяҡ йөрөнөк. Табан, үксәләр ярылып, боҙолоп шешеп тә китә. Шул саҡ әсәйем бесәй табан үләнен ҡалын игеп табанға һалып, бәйләтеп ҡуйҙыра: йәрәхәттәрҙең һыҙлауы баҫыла, ҡатып бөткән табан йомшара, рәхәт.

Бесәй табан, бесәй табан,
Ауырта бит минең табан,
Үҙ шифаңды, үҙ дауаңды
Күпләп бирсе, ботлап бирсе, бесәй табан! - тип һамаҡлап, доға уҡыйбыҙ.

Бесәй табандың бәләкәй төймәгә оҡшаған емештәрен күп итеп ашай ҙа торғайныҡ. Кешеләр хәҙер уға ниңәлер иғтибар итмәй.

### Сөйәл

Ниңәлер, беҙ үҫкәндә тотош бармаҡтарҙы ҡаплап, хатта бөгәргә (тубыҡ аҫтына) бик күп сөйәл сыға ине, мин бигерәк тә яфаландым. Ай тулған ваҡытта өләсәйем ете төн буйы тышҡа алып сығып, сөйәлдәрҙе айға күрһәтеп, ете тапҡыр: "Ай, бына минең тәтәйем, ҡайҙа һинең тәтәйең?" тип әйттерә, ә үҙе "Аятел Көрси"ҙе уҡый. Хикмәт, әллә осраҡлы хәл, әллә доғаның көсө, әллә төнгә күк йөҙөнөң энергияһы тәьҫир итте - ете төндән һуң сөйәлдәрҙең эҙе лә ҡалманы. Өләсәйем икенсе донъя йән эйәләре дауаланы, тип аңлатты. Параллель донъя, фани, баҡый донъя тураһында һүҙ барған бит.

(Дауамы бар).

ИР-АТ ШУЛАЙ ТИ

# ЭСКЕ МАТУРЛЫҠ БУЛҺА,

## тыштан да яҡтыраһың



**Мин ҡатын-ҡыҙҙың биҙәнеүенә ҡаршымын. Быны хәҙер үҙемдең дәлилдәрем менән нигеҙләмәксемен. Бәлки улар беҙҙең гүзәл затты бер аҙ уйландырыр…**

Берҙән, һеҙ косметика өсөн әллә күпме аҡса әрәм итәһегеҙ - был ғаилә бюджетын туҙҙырыу, тигән һүҙ.

Икенсенән, косметика заман ҡатын-ҡыҙҙарын ялған ҡиммәттәргә ышандыра, үҙенә буйһоноусанлыҡ барлыҡҡа килтерә. Йәғни, биҙәнеү, ҡупшыланыу ярҙамында үҙен матур итеп күрһәтергә теләгән ҡыҙ-ҡатында ике йөҙ барлыҡҡа килә: береһе - ысын йөҙө, ул уны физик яҡтан да, психик яҡтан да йәшерергә тырыша, икенсеһе - косметика ярҙамында булдырылғаны, ул уны бар ерҙә күрһәтеп, маһайырға ынтыла. Бындай ҡапма-ҡаршылыҡ гүзәл затҡа ниндәйҙер көсөргәнешлек һәм борсолоу ҙа алып килә: ул үҙ-үҙенә, ысын асылына, ысын йөҙөнә ышанысын юғалта. Икенсе йөҙөнөң яһалмалығы башҡалар алдында фашланмаһын өсөн ул һәр саҡ көсөргәнештә ҡала.

Өсөнсөнән, косметика һәм мода ҡорбанына әйләнгән ҡатын-ҡыҙ өйҙә ире алдында бысраҡ һәм туҙған халат менән йөрөй алғанда ла, урамға икенсе - һыланған, һыйпанған, яһалма йөҙөн алып сығырға тейеш. Биҙәнеп, яҡшыраҡ кейенеп, ул үҙ ире йәки һөйгәне алдында ғына түгел, өйҙән ситтә лә иғтибар үҙәгендә булыуға дәғүә итә. Былар ғаиләлә төрлө низағтарға юл аса ла инде.

Радио, телевидение, матбуғат саралары рекламаһы һәм иғландары косметика сәнәғәте продукцияһын икмәк һәм һыуға ҡарағанда ла юғарыраҡ ҡуйып маҡтап, ҡыҙ-ҡатындарҙың мейеһен яулап ала, уларҙа макияжға һәм модаға ихтыяж барлыҡҡа килтерә. Етмәһә, был осраҡта ҡыҙ-ҡатынды ниндәй генә "ағзаларға" бүлеп бөтмәй ул рекламалар: йәшенә ҡарата - бер төрлө косметика, миҙгелгә ҡарата - икенсе, кисен иһә - өсөнсө, иртән - дүртенсе... Шулай итеп, башҡа кешеләр уның өсөн барыһын да хәл итә: нимә килешә, ниндәй төҫ уның йөҙөнә тап килә. Ҡатын-ҡыҙ үҙе лә һиҙмәҫтән косметика тотҡонона әүерелә.

Йәмғиәт аҡрынлап матурлыҡ ориентирҙарын да онотоп бара һымаҡ тойола миңә. Йәғни беҙ хәҙер кешенең ысын матурлығы - ул тышҡы йөҙ йәһын-килбәт түгел, ә рухи матурлыҡ, күркәм холоҡ икәнлеге тураһында телгә лә алмай башланыҡ. Ә бит Хоҙай нисек ятатһа, кешегә шулай булыу кәрәк. Берәү ҙә икенсеһен ҙур танауы йә ҡыҫыҡ күҙҙәре өсөн ғәйепләй алмай. Ә шулай ҙа беҙҙең көндәрҙә күңеле насар булһа ла тәне матурҙарҙы һанлау ғәҙәте өҫтөнлөк итә бара. Шул арҡала ҡатын-ҡыҙ тәбиғи булмаған ғәҙәттәрҙе үҙләштерә, матур төргәккә төрөлгән боҙоҡ тауарға оҡшай бара...

Унан һуң, быныһы иң мөһиме, косметика һаулыҡ өсөн дә зарарлы бит. Косметика сәнәғәте үҫешеп, уларҙың тауарын файҙаланыусылар артыу менән үк аллергия һәм башҡа тире ауырыуҙары ла иң йыш ҡуйыла торған диагнозға әүерелде. Шуға ла XX быуат медицина әҙәбиәтендә "аллергия быуаты" тип йөрөтөлә.

Косметика һөҙөмтәһендә тыуған сирҙәр тире аллергияһы менән генә сикләнмәй. Ағыуланыу һәм һуҡырайыу, тире яман шеше, төрлө системалар эшмәкәрлеге боҙолоу - исемлекте әллә күпмегә һуҙырға мөмкин. Элегерәк ҡыҙ-ҡатындар керпек һәм ҡаштарын буяу өсөн "лаш лур" тигән буяу ҡуллана торғайны. Был буяу составындағы парафинлы диамин күптәрҙе һуҡырайыуға килтерҙе. Шунан был буяуҙы етештермәй башланылар. Ләкин парафинлы диаминға оҡшаш икенсе матдәләр сәс буяуҙары етештереү өсөн файҙаланыла. Бындай буяуҙар күҙҙәргә, тиреләге яраларға эләкһә, шулай уҡ күңелһеҙ эҙемтәләргә килтерә. Сәс буяуы составындағы водород перекисы сәстәрҙе һыныусан итә, бер үк ваҡытта баш тиреһен дә зарарламай ҡалмай. Парикмахерҙарҙағы экзема һәм астма кеүек профессиональ сирҙәр водород перекисынан да инде.

Билдәле булыуынса, тирләү кеше тәненең тәбиғи һаҡлаусы һәм термокөйләүсе сараһы булып тора. Был система эшмәкәрлеге боҙолоу, йәғни тирләү биҙҙәренең зыян күреүе ул һейҙек ҡыуҙырыусы системаның боҙолоуы менән бер. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күптәр дезодорант ҡулланғанда тир биҙҙәренә зыян килтереүе тураһында белмәй. Дезодорант составындағы алюминий тоҙҙары протеин молекулаларын бәйләүсе водород атомына тәьҫир итә һәм протеиндарҙың тирелә тотҡарланыуына, тир биҙҙәрен ҡаплауға килтерә. Емерелгән протеин өлөшсәләре бер үк ваҡытта тирене лә ҡыҙарта.

Шыйыҡ косметика менән ағыуланыу осраҡтары ғәҙәти күренеш. Мәҫәлән, тырнаҡ лактарының невралгия тыуҙырыуы иҫбат ителгән. Лакты ҡуйыртыусы толуол матдәһе невралгияға сәбәпсе була, бер үк ваҡытта бөйөрҙәрҙе зарарлай. Тырнаҡты лактан таҙартыусы ацетон да, тырнаҡтың һыныусанлығын иҫкәртеүсе шыйыҡса ла зарарлы.

Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, косметика сараларының ҡайһы берҙәре ваҡытлыса ауырыу тыуҙыра, ҡайһы берҙәре хроник сирҙәр бүләк итә. Ул ауырыуҙарҙың ҡайһы берҙәре бик тиҙ асыҡлана, ҡайһы берҙәре йәшерен рәүештә оҙаҡ йылдарға һуҙыла.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Юҡ, мин ҡатын-ҡыҙҙың үҙ-үҙен ҡарауына, көҙгө алдында күп әйләнгеләүенә, матурлыҡҡа ынтылыуына ҡаршы түгелмен. Тик... Физик һәм рухи гигиена ҡағиҙәләрен үтәһәң, шул еткән. Күңел матурлығың тыштан да нурландырасаҡ.**

**Флорит БОГДАНОВ.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ЯБАЙ КҮМЕР...

## өҫтәй ғүмер!



**Бала саҡта тештәрҙе ҡайһы бер ваҡытта күмер менән йыуырға ҡушҡандарын иҫләйем. Бигүк күңелгә ятмаған процедура, әммә үтәргә тура килә ине. Баҡтиһәң, күмерҙе элек-электән халыҡ медицинаһында ҡулланғандар икән. Ә инде рәсми медицина активлаштырылған күмерҙе үҙе үк ашарға ҡуша. Түбәндә уны ҡайһы осраҡта ҡулланыу кәрәклеге хаҡында бер аҙ мәғлүмәт тәҡдим итәбеҙ.**

### Метеоризм йәки эс күбеү

Һәр кемдең эсәктәрендә газ йыйыла һәм кеше көнөнә уртаса 14 тапҡыр газ сығара - был ғәҙәти күренеш. Әгәр һеҙҙе метеоризм йәки эс күбеүе яфалай икән, активлаштырылған күмер ярҙам итәсәк.

Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, туҡланыуҙан алда активлаштырылған күмер ашау эсәктәрҙә газ йыйылыуҙы һиҙелерлек кәметә.

### Холестерин кимәлен төшөрә

Холестериндың юғары булыуы йөрәк-ҡан тамырҙары хәүефен ике тапҡырға арттыра. Күҙәтеүҙәр шуны асыҡлай: ай дауамында көнөнә өс тапҡыр 8 гр активлаштырылған күмер ашаған кешеләрҙең "насар" LDL-холестерины 41 процентҡа кәмей, ә "яҡшы" HDL-холестерины күләме 8 процентҡа арта. Бер ниндәй статиндар ҙа кәрәкмәй, бер ниндәй кире һөҙөмтә лә күҙәтелмәй.

### Бөйөрҙәрҙең сәләмәтлеген һаҡлай

Һәр көн бөйөрҙәр 115-140 литр ҡан таҙарта, шыйыҡлыҡтың ҡалдығы һәм артығы һөҙөмтәһе булған 1-2 литр бәүел эшләп сығара. Бауыр менән берлектә бөйөрҙәр тәбиғәттәге иң камил таҙартыу системаһы булып тора. Әммә шәкәр, тоҙ, мал-хайуан аҡһымы, консерванттар ҡулланыу бөйөр сирҙәренә килтереүе мөмкин. Активлаштырылған күмер мочевинаны һәм бәүел токсиндарын сығарғанға күрә, ул бөйөрҙәрҙең сәләмәтлеген һаҡларға ярҙам итә.

### Аҙыҡ менән ағыуланыуҙан ярҙам итә

Аҙыҡ менән ағыуланыу бөгөн киң таралған - АҠШ-та ғына йылына 48 миллион шундай осраҡ теркәлә! Ҡоҫоу, эс китеү, эс ауыртыу һәм ауырыу һөҙөмтәһендә юғалған көндәрҙе булдырмауҙың бер юлы - беренсе симптомдар күренеү менән активлаштырылған күмер ашарға кәрәк, сөнки ул токсиндарҙы нейтралләштерә.

### Тирене йомшарта

Бысраҡ һәм майлы бит күҙәүҙәрен (поры) томалау һөҙөмтәһендә кеше "ҡарт" күренә, ә бик күп таҙартыу сараларына зыянлы химия ҡушыла. Активлаштырылған күмер, магнит кеүек, күҙәүҙәрҙән бысраҡты һәм майҙы һурып алыуы һөҙөмтәһендә тире таҙарып, шымарып ҡала.

### Сәстәрҙе ҡабарта

Шул уҡ токсиндар, тирене бысратҡан бысраҡ, май сәстәрҙе лә боҙа, уларға майлы төҫ бирә. Активлаштырылған күмер сәс фолликулаларын таҙарта, уларҙы ялтырата һәм ебәк кеүек итә. Экологик зарарлы химикаттарҙан торған шампундарҙан айырмалы, активлаштырылған күмер 100 процентлы тәбиғи, экологик таҙа сара.

### Тештәрҙе ағарта

Тештәрҙе ҡиммәт хаҡ түләп таҙартмайынса ла Голливуд артистары йылмайыуына эйә булырға мөмкин. Бының өсөн теш щеткаһына аҙнаһына 2-3 тапҡыр активлаштырылған күмер һибеп таҙаларға ғына кәрәк. Активлаштырылған күмер теш эмален таҙарта, теш ҡуныҙын барлыҡҡа килтереүсе микроскопик өлөшсәләрҙе тарҡата.

### Ауыҙҙағы еҫте бөтөрә

Ауыҙығыҙҙан насар еҫ киләме? Был осраҡта ла активлаштырылған күмер ярҙам итер. Ул насар еҫте бөтөрөүҙең һөҙөмтәле сараһы ғына түгел, ауыҙ ҡыуышлығында кислота-һелте балансын нормалләштереү ысулы ла. Был иһә үҙ сиратында тештәрҙе һәм ҡаҙнаны бактерияларҙан, ауырыуҙарҙан һаҡлай. Тешегеҙҙе активлаштырылған күмер менән таҙартығыҙ. Ауыҙ эсегеҙ ҡарайыуына борсолмағыҙ, сайҡағандан һуң унда бер нәмә лә ҡалмаясаҡ.

### Иртә ҡартайыуҙы иҫкәртә

Активлаштырылған күмерҙе даими ҡабул иткәндә ул организмдан ағзаларға зыян килтергән, күҙәнәктәрҙе ҡыйратҡан һәм тәндең ҡартайыуын шәбәйткән токсиндарҙы һәм шлактарҙы сығара.

### Аш эшкәртеү системаһын таҙарта

Йәшелсә-емештәге пестицидтар, иттәге үҫеү гормондары, эсәр һыуҙағы химия - беҙ шундай шарттарҙа йәшәйбеҙ. Ошо бөтөн бысраҡ аш эшкәртеү системаһында тупланып, төрлө ялҡынһыныуҙырға килтерә, хәлде ала. Сәләмәтлек һәм яҡшы кәйефтә булыу өсөн аш эшкәртеү системаһын даими рәүештә активлаштырылған күмер ашап, таҙартып торорға кәрәк.

**✓ Тыйыла алманым, йөрәкһеп, бригадирҙың сыбыртҡы һабына аҫылындым. Ағай, аптырап, күтәргән ҡулын төшөрҙө, күҙҙәрен зәһәр ҡыҫып, ҡуйы ҡаштары аҫтынан төбәлде: "Их һин, ебек малай!" - тип әйтә төҫлө ине.**



# ҺЫЙЫР ТУРАҺЫНДА ЙЫР

Йыһат СОЛТАНОВ



Бер көн ыҙан буйына килеп, төүге бураҙна ярыу менән үк, йәнгә тейә башланы һыйыр. Ул әленән-әле туҡтап, ауыҙын үргә күтәреп, бәгер өҙгөс өн менән күкте йыртып баҡырҙы, күҙгә ҡарап, әйтерһең дә, һулығып-һулығып иланы. Шул арҡала, берҙән, йүнләп эш бармай, икенсенән, йөрәк шомланып һыҙлай ине. Күпме ҡыуып ҡараһаҡ та, тыйып булманы һыйырҙы.

- Эй, йәнем, тикмәгә генә былай өҙөлөп баҡырмайһыңдыр инде һин, берәй бәлә-ҡаза ғына булмаһа ярар ине... - тип бөтөрөндө еңгәм. Бынан һуң уғата ҡыйыныраҡ булып китте.

Төш ауышҡас, Ҡашҡаһыйыр баҡырып барҙы-барҙы ла, ларç итеп ергә ауҙы, күпме ҡыуалаһаҡ та торманы. Беҙҙең оҙаҡ туҡталғанды күтәрә алмай, бригадир килеп етте, икебеҙҙе лә ҡыҙҙырып әрләй башланы: көндәлек эш нормаһы әле тулмаған, уны тағы арттыраһы - һөрәһе лә һөрәһе ине беҙгә. Һыйыр менән мөсһөҙ алышҡанды күреп, ул үҙенең дүрт быуынлы сыбыртҡыһын эшкә екте. Арҡаһына тарттырып һуҡҡан һайын, малҡай ҡалтыранып ята, күҙҙәренән ергә тамсылар тама, башҡайын миңә бороп, илаған һымаҡ һуҙып мөңрәй. Тыйыла алманым, йөрәкһеп, бригадирҙың сыбыртҡы һабына аҫылындым. Ағай, аптырап, күтәргән ҡулын төшөрҙө, күҙҙәрен зәһәр ҡыҫып, ҡуйы ҡаштары аҫтынан төбәлде: "Их һин, ебек малай!" - тип әйтә төҫлө ине. Ләкин түрәмдең тел осонан сыҡҡан һүҙҙәр сыбыртҡы ярыуынан да әсерәк һыҙырҙы:

- Үҙ малыңды ҡурсалайһыңмы? Унда, фронтта, ҡан түгәләр, ә һин... дезорганизатор!..

Ҡырт боролоп китеп барҙы, "дезертир" менән бәрәбәр ауыр һүҙ, "дезорганизатор", әйтерһең, миңә дегеттәй яғылып ҡалды. Теште ҡыҫып илай-илай, ҡулыма ҡыуал алдым, һыйырымдың арҡаһына йәнтәслим буйлата һуҡтым. Был юлы һыйыр торҙо, өҙөлдәп, оҙон телен һуҙып, боролоп ҡараны күҙемә. Һыйырҡайымдың һыуалған дүрт имсәгенән, энә нәҙеклек кенә булып, ҡанлы һөт сәптерә ине...

...Ауыл һыртындағы әремле туғайлыҡты моңһоу Ай нуры ҡойондора. Мин, тимер көрәгемде ергә ҡаҙап ҡуйып, алдымдағы ҡарайып ятҡан быҙау ҙурлыҡ түмәләскә - яңы тупраҡ өйөмөнә текләп ултырам. Ҡашҡа-билдәшкәйебеҙҙең һуңғы өйө. Ауылдан яңғыҙ һыйыр баҡырыуы - Ҡашҡаһыйыр илауы ишетелә. Үҙемдең дә, шул һыйыр кеүек үк, үҙәк өҙөп баҡырғым, мәңгелеккә атайым киткән яҡҡа - көнбайышҡа төбәлеп илағым килә. Көрәкте яурынға һалып, ҡул арбаһын һөйрәп, ҡайтырға сығам. Артыма әйләнеп ҡарайым да өнһөҙ генә һыҡтайым: бәхил бул, билдәш быҙау!..

Дала, әсе әрем еҫен һығып, минең менән ҡуша илай һулығып. Бара-бара тынысланғандай булам. Ауылдағы яңғыҙ һыйыр тауышы ла баҫыла. Иртән иртүк тороп, миңә лә, Ҡашҡаһыйырға ла ҡырға сығаһы бар, ҡайғыларҙы ҡара бураҙна буйына ҡайырып һалаһы бар...

Ауыл тирәһе баҫыуҙарын һөрә-һөрә, һаман йыраҡлаштыҡ, алыҫ баҫыуҙа ҡуна ятып эшләй башланыҡ. Әсәйемде оҙаҡ ваҡыт күрмәй йөрөү бик ҡыйын, көн дә иртән елеп-юртып өйгә ҡайтҡы килә, ләкин ҡул теймәй, бригадир ҙа ауыл яғына ҡарарға мөмкинлек бирмәй. Быҙауҙарынан айырылған һыйырҙар ҙа баҡырыштылар-баҡырыштылар ҙа, ҡуйҙылар, ҡайтып булмаҫлығын, ахыры, тойҙолар. Ҡашҡаһыйырым ғына, быҙауы үлгәндән һуң, өн-тын ишеттермәне, әйтерһең, бөтөнләй тауышһыҙ ҡалды. Малҡайым, машиналай егелеп, эшләй ҙә эшләй ине...

Эш араларында ял иткәндә, һыйырымдың алдына сығып, ыҙан буйына ултырам, яланаяҡтарымды дымлы тупраҡҡа сумырып, ике тубығымды ҡосаҡлап, уйға сумам. Һабаны янында сүгәләгән Мөнирә еңгәм ауыҙ эсенән генә моңло көй һуҙа. Күҙ алдымда шул саҡ ике түмәләс - ҡәбер һүрәтләнә: атайымдыҡы һәм йондоҙ-билдәш быҙауыбыҙҙыҡы. Бик тә, бик тә әсе булып китә күңелгә, һулҡылдап илап алам. Шундай минуттарҙа бер йән миңе хәс тә тыуған өйҙәгеләй, әсәйемдәй итеп иркәләп һөйә, ҡыштырҙатып, көн дә шулай уның һыйпап-һөйөүенән шымарып, ялтырап бөткән яурынымдан, сәстәремдән, маңлайымдан ялмап ала, үткер ҡытыршылығы менән һиҫкәндертеп, әсе күҙ йәштәремде һыпырып һөртә. Мин, күҙ йомған килеш ойоп, иркәләнеп ултырам, аҙ-аҙлап тынысланам. Иркәләүсемдең саф мөхәббәт тулы төпһөҙ ҙур күҙҙәренә ҡалҡынып баҡам. Ниндәй керһеҙ һәм гонаһһыҙ ул күҙҙәр, мине улы итеп һөйөүсе күҙҙәр!.. Ҡашҡаһыйыр, тап теге буранлы төндә өйҙә ҡашҡа быҙауын яратып ялағандағылай, йөрәк әсенән мыҙылдап-мөңрәп ялай...

Шул китеүҙән көҙгә тиклем әйләнеп ҡайтманыҡ өйгә: һабан миҙгелен ҡыуып, бесән, бесәнде - ураҡ, ураҡтан һуң туңға һөрөү, арыш сәсеү эштәре бер-бер артлы килә генә торҙо гел. Ҡыштарын ҡырҙа молотилка менән иген баҫыу, һалам ташыу тынғы бирмәне. Был йөктө, ҡәҙимгесә, кешеләр менән бергә һыйырҙар ҙа үҙ иңдәрендә тартты, еңеү өсөн үҙҙәренсә изге ҡорбан килтерҙеләр. Шуға күрә ике йыл буйына беҙҙең өйҙә йәш быҙау баҡырғаны, гөбөр-гөбөр күнәккә һөт ағылғаны ишетелмәне...

Ҡырҡ бишенсе йылдың яҙында һыйыр ектертмәнеләр. Хәйер, уларҙың күбеһе былтыр иртә көҙҙән үк һалғайны ҡамытын. Сөнки фронтта беҙҙең ғәскәр һаман дөрөп алға бара, фашистарҙы илебеҙҙән тамам һөрөп сығарып, үҙ ерендә ҡыйрата ине. Шул арҡала колхозда ла хәлдәр шөйлә еңеләйеп, элек етешмәгән кәрәк тимер-томор ишәйеп, туҡтап ултырған тракторҙар гөрләп эшләй башлағайны. Мин тәү тапҡыр яҙғы һабанға Ҡашҡаһыйырҙан башҡа сыҡтым.

Был юлы ҡырҙа оҙаҡ йөрөргә тура килмәне миңә: сүп кергән аяғым шешеп, кире ҡайттым. Урыныма әсәйемде ебәрҙеләр.

Бына хәҙер, көбәктәй булып, өйҙә ултырам яңғыҙ. Әсәйем эштә, апайым эштә, Ҡашҡаһыйырыбыҙ көтөүҙә. Ҡара бесәйгә тиклем ҡайҙалыр олаҡҡан. Ихатала һөйләшергә хатта бер генә тауыҡ та юҡ.

Кисә бригадир ҡалдырып киткәйне - үҙебеҙҙең район гәзитен уҡыйым. Һуғыш инде Берлинда, Гитлер яуыҙдың үҙ өңөндә бара. Их, шунда булһаң ине, еңеү сәғәте һуҡҡанын үҙ күҙҙәрең менән күрһәң ине!

Мин туйтаңлап ишек алдына сығам, мөгәрәп ситендә күпереп үҫкән бесәй үләненә салҡан ятам, күҙҙәремде зәңгәр күккә төбәйем. Унда бармаҡ битендәй ҙә болот юҡ, бөтә ғаләм океан һымаҡ күм-күк. Йомарлаҡ май кеүек яғымлы май ҡояшы тулҡын-тулҡын һары нурҙарын ҡоя. Ерҙә даланың күк әреме май еленә тулҡына. Һаҡмар аръяғында кемдәрҙелер моңло кәкүк саҡыра.

Урам буйынан тырылдап килеп ҡырандас туҡтаны, бригадирҙың ҡарлыҡҡан тауышы ишетелде:

- Улым, әү, улым!

Башымды ҡалҡытам.

- Улым, һөйөнсө! - Бригадирҙың өндәшеүе шундай ихлас, ауыҙы ҡолаҡтарына еткән, ысын күңелдән ҡыуана. Мин торам, туйтаңлап, эргәһенә киләм. Тулҡынланыуҙан тыным ҡыҫыла, йөрәгем сығып килә: ни булыр был?

- Ҡашҡаһыйырығыҙ быҙаулаған бит!

- Ағай, ысынмы? - Ҡырыҫ түрәмде муйынынан ҡосаҡлап алырҙай булам.

- Әйҙә, киттек, барып алайыҡ!

Еңел ҡырандас дала юлы буйлап елдерә. Ауыл әллә ҡайҙа артта, ҡыҙыл убалар ышығында ҡала. Һаҡмар буйына боролабыҙ. Тирә-яҡ - былтырҙан сабылмай ҡалған ап-аҡ ҡылған. Көмөш ҡылған араһынан беҙгә аҡ маңлайлы, һыныҡ мөгөҙлө, ҙур башлы бура һыйыр ҡарап тора. Уның күҙҙәренән, әйтерһең, бая һөйөнсө ҡысҡырған бригадир ағайҙыҡы кеүек ҡыуаныс нуры сағыла. Эргәһендә, ҡылған төбөндәге һуғандай йәшел бүтәгәлә, уның үҙе кеүек үк ҙур күҙле, ҡашҡа маңлайлы, аҡ таҫма быуғандай билдәш быҙау, имеп туйған бөйөрҙәрен бүртәйтеп, ҡойроғон шештәй ҡатырып сабырға әҙерләнә.

- Бисмилла, ҡотло аяғың менән, алтын тояҡҡай, - ти бригадир ағай, еүеш тәнле быҙауыбыҙҙы ҡырандасҡа күтәрешеп. Ҡашҡаһыйырҙың етәк бауын арба артына тағабыҙ; һыйыр, ҡаҙандай еленен ян-яҡҡа һалпылдатып, саҡ атлап, өҙләкһеҙ мыҙылдап килә...

Шунан һуңғы ваҡиғаны мин бер саҡта ла тыныс ҡына һөйләй алмайым, күҙ йәштәремде күрһәтмәһәм дә, йөрәгем менән һыҙлайым... Ҡашҡаһыйыр менән быҙауҙы алып ҡайтып еткереп, ыуыҙын күрше инәйҙән һауҙыртып, усаҡҡа ут дөрләттек, тышта ҡуйы үләнле мөгәрәп янында ултырып, ҡаҙандағы ыуыҙҙың эреп төшөүен көтә башланыҡ. Бригадир ағай артынан уҡ әсәйем менән апайыма күп көтөлгән таңһыҡ күстәнәс - ыуыҙ эремсеге ебәргем килде. Кискә әсәйем һыйырҙы үҙе ҡайтып һауырға тейеш.

Көтмәгәндә, күҙ алдыбыҙҙа Ҡашҡаһыйыр быҙауын ялап торған еренән аҡрын ғына артҡа сүгә башланы, өҙөк кенә итеп бер мөңрәне лә лап итеп ҡабырғаһына ҡоланы; дүрт тояғын һуҙып, башын ситкә ташлап, ауыр ғыжылданы. Йүгереп яҡын килеүгә, һыйырҙың көллө тәне дер-дер ҡалтырай, ашаған йәшел үләндәре кире килеп, һулышы менән ҡуша морон тишектәренән бөркөлә ине.

- Эй, аҫыл малҡай ғынам, һөтлө һыйырҙарҙың сиренә тарығанһың бит... - тип ҡыҙғанып һөйләнде күрше инәй. Бригадир атын бороп, тура ветфельдшерға саптырҙы, мин, үкһеп ебәреүҙән саҡ тыйылып, һыйырымдың баш осона ултырҙым. "Ни булды һиңә, ғәзизем, ни булды һиңә, туғаным?" - тип, үҙ тауышымды үҙем ишетмәй һөйләнеп, уның айҙай балҡып янған аҡ маңлайынан, һыныҡ тупалсай мөгөҙҙәренән, ҡамыт баҫып ҡатырған елкә буйҙарынан һыйпаланым. Ҡашҡаһыйыр, мине йәлләгәндәй, тоноҡ күҙҙәре менән бер генә ҡалҡынып ҡараны ла башын артҡа ташланы, мәңгегә һаубуллашты...

Аласыҡта оло ҡаҙанда һикереп-һикереп ыуыҙ ҡайнай, ишек алдында ҡашҡа-билдәш быҙау йәнһеҙ ятҡан инәһенең имсәктәрен мороно менән төртөп-төртөп илай, ә мин ерҙә, мөгәрәп янында, өнһөҙ-тынһыҙ, тубыҡтарымды ҡосоп ултырам.

Тағы тыҡырҙап ҡырандас тауышы ишетелде, был юлы ул бик ашығыс, тәңгәлебеҙҙә туҡталмайынса үтте. Бригадирҙың көр тауышы мине һиҫкәндереп ебәрҙе:

- Иптәштә-ә-әр, беҙҙекеләр еңгән! Иптәштә-ә-әр, клуб янына Еңеү митингыһына барығыҙ!

Был хәбәр һис тә башыма һеңә алмай, алйып ултырғанда, урам буйына бер көтөү бала-саға туҙан туҙҙырып килеп сыҡты:

- Еңеү! Еңеү! Еңеү!

Ашыҡ-бошоҡ еләнен бөркәнеп йүгергән күрше инәй, ҡапҡаға еткәс, боролоп ҡараны миңә:

- Ишетәһеңме, улым, һуғыш туҡтаған, ти, бит? Бөтә киткәндәр ҙә ҡайтыр инде хәҙер!

Эй был яҙ, ғүмерҙә онотолмаҫлыҡ яҙ, 1945 йылдың сөм-аяҙ күкле яҙы!..

Беҙ һине нисек зарығып көттөк - ҡырҡ беренсе йылдан бирле Ватан өҫтөн иңләп алған ике меңгә яҡын утлы көн һәм төндәр буйы һаман бер һинең хаҡта, бөйөктәрҙән бөйөк Еңеү көнө хаҡында, көндөҙҙәрен хыялланып, төндәрен төштәрҙә күреп көттөк. Ләкин хыял менән төштәрҙе беҙ балауыҙланып тышҡа һығылдыртманыҡ, иламһырап, йә моңайып, үләндәй бөгөлөп төшмәнек - беҙ эшләнек, еңдәрҙе һыҙғанып ебәреп, бөтә ил менән ошо ғәзиз бер көн өсөн, еңеү көнө өсөн, көнө-төнө янып эшләнек. Фронттағы ҡаһарман атай һәм ағайҙарыбыҙға оҙон бураҙна буйҙарында, утлы мейес һәм станоктар янында ысын алмашсылар булдыҡ - тылда тороп, беҙ ҙә көн-төн фронт тоттоҡ. Һәм бына көтөлгән бәхет - татлыларҙан татлы еңеү хәбәре!..

Аласыҡта оло ҡаҙанда һикереп-һикереп ыуыҙ ҡайнай, ишек алдында ҡашҡа-билдәш быҙау тынһыҙ ятҡан инәһенең имсәктәрен мороно менән төртөп-төртөп илай, урамда, сыу ҡубып, бер көтөү бала-саға һикереп уйнай, ә мин мөгәрәп янында, тубыҡтарымды ҡосҡан килеш, өнһөҙ-тынһыҙ ултырам. Үҙәккә үткес тынлыҡ оҙаҡҡа бара алманы: мин дә бәғерем төпкөлөнән ташып килгән әсе һәм татлы ауазға ирек ҡуйҙым...

Күпме йылдар йүгерҙе инде хәҙер!..

Табындарҙа ултырғанда, ҡорҙаштарым һаман тынғы бирмәй: "Арабыҙҙан бер һин генә шағир булдың... Үҙебеҙҙе үлемдән алып ҡалған һыйыр тураһында яҙ һин йыр!" - тиҙәр. Көтөп-көтөп тә, ул йыр һаман тыумағас: "Их һин, оноттоңмо ни үткәндәрҙе? Әгәр ул саҡтарҙа һыйыр булмаһа, бөгөн һин булыр инеңме лә, беҙ булыр инекме?" - тип битәрләйҙәр. Мин өндәшмәй генә башымды эйәм. Ниңә тыумай һуң һаман йәнемдә йөрөткән йыр, моңло йыр?..

Ҡәләм алып ултырам да уйға сумам: нисек итеп яҙырға һуң был йырҙы, нисек мәҙехләргә ябай Ҡашҡаһыйырҙы?.. Ә ҡайһындай ҙа күп ине бит ул беҙҙең яҙаһы йырҙар, Ҡашҡаһыйырҙар! Бәлки, был йыр һәр кемдең үҙ күңелендә генә шытып, йырланып та йөрөйҙөр?.. Шулай ҙа уны аҡ ҡағыҙға күсерге, бөтә донъяға, кешеләргә йырлап ишеттерге килә. Беҙҙең быуын менән ҡуша утты-һыуҙы үтте һыйыр - йөрәктәрҙә йөрөйәсәк моңло йыр.

(Аҙағы. Башы 35-се һанда).

✓ *Заман башҡа, заң башҡа, тигәндәй, бәлки, беҙгә лә хәҙерге балаларҙы әрләүҙән тыйылып, ошо үҙебеҙҙең заманса уйындарыбыҙға нығыраҡ ылыҡтырыу, ҡыҙыҡһындырыу тураһында уйларға кәрәктер?*



ИНТЕРНЕТТАН



# КҮНЕКМӘЛӘР...
## диабеттан ҡотҡара

■ Авокадо сәләмәтлеккә бик файҙалы. Американың Nutrion Impact компанияһы тикшеренеүселәре авокадо кеше организмында матдәләр әйләнешен нормаға килтерә ала, тип иҫәпләй. Ғалимдар 7 йыл дауамында 17,5 мең кешене күҙәтеп, көн һайын авокадо ашаусыларҙа метаболик синдром үҫеше хәүефе ныҡ түбәнәйеүен асыҡлаған. Әлегә авокадоның сәләмәтлеккә йоғонтоһо тулыһынса өйрәнелеп бөтмәгән. Яуап биреүселәрҙең сәләмәт өлөшө шулай уҡ йәшелсә, емеш-еләк һәм витамин, микроэлементтарға бай ризыҡтарға өҫтөнлөк биреүе тураһында белдергән.

■ Юғары интеллектҡа эйә ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятмай, ти Буффало университеты ғалимдары. Эксперимент ваҡытында 105 ҡатын-ҡыҙ менән ир-егет математика менән инглиз теленән тест эшләгән. Һуңынан көслө зат ҡатын-ҡыҙҙы баһалаған, быны алдынан тест һөҙөмтәләре белдерелгән. Ир-егеттәр аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланыуын белдергән, әммә үҙ-ара аралаша башлағас та, уларға ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡан. Улар был аҡыллы гүзәл заттар менән ҡабаттан осрашырға теләмәгән. Белгестәр быны ир-аттың аҡыллы ҡатын-ҡыҙ эргәһендә үҙенең көс-ҡеүәтен юғалтыуы менән аңлата.

■ Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн физик күнекмәләр бик файҙалы. Испанияла үткән тикшеренеүҙәрҙә 40 гүзәл зат ҡатнаша. Ғалимдар уларҙы ике төркөмгә бүлә. Беренсе төркөмдә инсулинға һиҙгерлектәре түбән, икенсе төркөмгә инсулинға һиҙгерлектәре юғары булғандар инә. Ҡатнашыусылар 10 аҙна дауамында юғары көсөргәнештәге күнекмәләр менән шөғөлләнә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 2-се типтағы диабет хәүефе юғары булғандарҙың организмында глюкоза концентрацияһы түбәнәйгән һәм инсулин кимәле нормаға килгән. Шулай уҡ күнекмәләр ҡатнашыусыларҙың йөрәк сәләмәтлегенә лә ыңғай йоғонто яһаған. Ике төркөмдә лә ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауырлығы ла кәмегән. Бынан тыш, уларҙың тәнендәге май ҡатламы ла кәмегән. Ғалимдар аңлатыуынса, хәрәкәттә булған мускулдар глюкозаны күп тотона. Шуға ла ҡандағы глюкоза кимәле түбәнәйә. Дания ғалимдары ла шундай һығымтаға килгән. 100 кеше ҡатнашҡан тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, диета һәм даими күнекмәләр диабет менән ауырыусыларҙың ҡанындағы шәкәрҙең түбәнәйеүенә килтергән. Экспериментта ҡатнашыусылар хатта дарыуҙарҙы ла аҙыраҡ ҡуллана башлаған.

■ Ғаиләлә ҡатындың аҡсаны уйламайынса туҙҙырыуы аңлашылмаусанлыҡтарға килтерә икән. Шуға ла Канзас университеты ғалимдары түйҙан һуң аҡса тураһында һөйләшеп-килешергә кәңәш итә. 700 ғаилә тураһында мәғлүмәттәр туплағандан һуң, ғалимдар шуны асыҡлаған: ҡатыны аҡсаны уйламайынса туҙҙырған ирҙәргә конфликттар өсөн был төп сәбәп булып торған. Шуға ла ғаиләлә юҡтан ғына бәхәс ҡупмаһын тиһәгеҙ, алдан уҡ килешеп ҡуйығыҙ - кем күпме аҡса тотона ала. Был тыныс тормоштоң нигеҙе була ала.

■ Ҡытайҙа ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәргәндәр. Унда 120 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙы тәҙрәһе булмаған бүлмәгә бикләгәндәр. Һынау мәлендә тәүҙә бүлмәнең утын һүндергәндәр, аҙаҡтан яндырғандар. Шулай уҡ уларға ҡурҡыныс һүрәттәр күрһәткәндәр һәм төрлө тауыштар тыңлатҡандар. Гүзәл заттарҙың ҡайһы осраҡта нығыраҡ ҡурҡыуын пульс йышлығы һәм тир бүленеү менән билдәләгәндәр. Асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙҙар төндә бүлмәлә хатта ут янып торғанда ла ҡурҡа икән. Төндө кеше хәүефле мәл тип ҡабул итә һәм шуға ла һиҙгерлек һәм реакция көсәйә.

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

**Халыҡ уйындарының тәрбиәүи әһәмиәте бер ҡасан да кәмемәй. Балалар тәрбиәләүҙә уйындар айырыуса ҙур роль уйнай. Уйын улар өсөн донъяны танып белеү сараһы, хеҙмәт мәктәбе һәм һәр яҡлап гармониялы үҫеү сығанағы. Ысынлап та, уйнаған саҡта бала өҙлөкһөҙ хәрәкәттә була, шулай уҡ иптәштәре менән аралаша, үҙен коллективта тоторға өйрәнә.**

# БАЛА САҠ УЙЫНДАРЫ



Бөгөн балалар элек атай-әсәйҙәре уйнап үҫкән уйындар тураһында аҙ белә. Үҫмерҙәр һәм кескәйҙәрҙең иғтибарын интернет селтәрендәге замана уйындары йәлеп итә. Улар волейбол, баскетбол, футбол кеүек хәрәкәтле уйындарҙы ла уйнай уйнауға. Күптәре көрәш, дзю-до, карате менән мауыға. Фигуралы шыуыу, саңғыла йөрөү ҙә популяр. Әммә былар барыһы ла махсус рәүештә спорт залдарына, майҙансыҡтарына барып шөғөлләнеүҙе талап итә. Боронғо урам уйындары ысынлап та юҡҡа сыға бара. Шуға күрә лә, хәҙерге 45-55 йәшлек ир-егеттәр малай саҡта ниндәй уйындар уйнаған икән, тигән ҡыҙыҡһыныу уянды күңелдә.

Әңгәмәләшселәрем - Ярат ауылынан Әхмәтов Камил Мөхәмәтхәбиб улы менән Юлдашбаев Фәрит Һөйөндөк улы. Улар үҙҙәренең бала саҡтарын иҫләп, мәҫәлән, "Конь Чапая" тип аталған уйын уйнауҙары тураһында һөйләне. Был уйынды өлкән һәм бәләкәй малайҙар бергә уйнай. Өлкәне ат, йәғни "конь Чапая", бәләкәс малай "һыбайлы" була. Һыбыйлылар аттарға менеп ултырыуға старт бирелә лә, уйын ҡыҙып китә. Кемдең һыбайлыһы икенсеһен ат өҫтөнән һөйрәп төшөрә, шул еңеүсе. Ат та бирешмәҫкә, ҡолап китмәҫкә тейеш бит әле! Был уйын таһыллыҡты, көстө, ныҡышмаллыҡты, координацияны үҫтереүгә ҡулайлы булғандыр инде. Ҡайһы ғына малайҙың ул ваҡыттағы легендар шәхес Чапаев һымаҡ батыр ҙа, ҡыйыу ҙа булғыһы килмәһен! Шуға ла ихлас, сәмле итеп уйнағандар. Аңламағаныраҡ кескәйҙәр был уйынды үҙҙәренсә "Көншапай" тип атап йөрөткән.

Малайҙар араһында "Чижик" уйыны ла популяр булған. "Ике командаға бүленеп уйнайбыҙ. Бер команда "чижик" тип аталған бәләкәй генә таяҡты икенсе оҙонораҒы менән һуғып ебәрә. Шул "чижикты" тотоп алыр өсөн ҙурыраҡ итәкле кейем (фуфайка, пальто) кейеп алабыҙ ҙа, итәкте йәйеп, осоп килгән "чижик"ты тоторға тип тырышабыҙ. Был күҙ асып йомған арала була бит инде. Тап һиңә осоп килгән таяҡ итәгеңә килеп төшөп, тотоп алһаң, һин - герой! Шул таяҡты ҡаршы яҡҡа кире һуғып ебәрәбеҙ ҙә йүгерешә башлайбыҙ. 500-әр, 100-әр очко ала торған ысулдары бар ине", - тип хәтерләйҙәр ул саҡтағы малайҙар.

"Шулай уҡ "Клюк-клюк", "Лапта", "Городок", хоккей уйындарын яраттыҡ. Мәңге ҡулыбыҙҙан ҡылыс төшмәне, аҡтар-ҡыҙылдар булып уйнай торғайныҡ. Хоккей уйнар өсөн муйыл ағасының ботаҡлы еренән сәкән әҙерләп алабыҙ. Ат тиҙәген шайба итәбеҙ. Конькиҙар хәҙерге һымаҡ ботинкалы түгел, ағас табанға ҡатылған тимер конькиҙы бйымаға нығытып бәйләп алабыҙ ҙа, хәлдән тайғансы Һаҡмар боҙонда шыуабыҙ. Ҡар яуһа, күмәкләп йөрөп боҙҙо таҙартып алабыҙ. Ҡар ышырҡысты ла үҙебеҙ эшләй торғайныҡ", - тиҙәр улар бала саҡтарын иҫләп.

"Өҫкө урам малайҙары менән аҫҡы урам малайҙары айырым командалар булдыҡ. Эш бер мәлде хатта шуға барып етте, бер урамдыҡылар икенсе урамға барып сыҡһа, түпәләп ҡайтарырға ла күп һорамай торғайныҡ. Шуға күрә һәр кем үҙ территорияһын белеп, үҙенең командаһын яҡлашырға әҙер генә торҙо", - ти Фәрит Юлдашбаев.

"Аҡтар-ҡыҙылдар булып һуғыш уйыны уйнағанда урман эсендә беҙҙең штабтар булды. Штаб өсөн ерҙе ҡаҙып, землянкалар эшләнек. Уларҙы блиндаж кеүек итеп нығыттыҡ, тупраҡ менән күмдек. Ағастан автоматтар, гранаталар юнып алдыҡ. Һәр беребеҙҙең билеты булды. Шул билетта исем, фамилияларыбыҙ, званиеларыбыҙ яҙылған. Берәүгә лә күрһәтмәй алып йөрөйбөҙ. Штаб урынлашҡан блиндажды һаҡлайбыҙ. Ике команда һуғышһаҡ, гранаталар ташлап, таш сәпләп һуғыша торғайныҡ. Нисек беребеҙҙең башын тишмәгәнбеҙ ҙә, нисек күҙен һытмағанбыҙ, аптыраҡ. Уйынға оҫтарып, йылғырланып киткәнбеҙҙер инде. Өҫкә яуған таштарҙан да ныҡ оҫта ялтана торғайныҡ",- тип һөйләй Камил Әхмәтов.

Киске уйындарҙа иһә, "Наза", "Косилка-молотилка", "Билдек", "Көлөк" уйындары уйнағандар. Ритайым һуҡҡандар. Ритайым ваҡытында "Ебегән", "Өс таған", "Сылбыр" уйындарын ятаҡандар, ҡара-ҡаршы таҡмаҡ әйтешкәндәр.

Гармун уйнаусы егеттәр күп булған 70-80-90-сы йылдарҙа. Мәҫәлән, Әхмәтов Камил, Әхмәтов Рәмил, Әхмәтов Миңнәхәт, Юлдашбаев Фәрит, Юлдашбаев Салауат, Юлдашбаев Айҙар, Истәков Илгиз, Истәков Радик, Истәков Рәйес, Истәков Салауат, Исхаҡов Фәнис, Исхаҡов Илһам, Ғәҙелшин Риф, Йәнбирҙин Илгиз, Иҫәндәүләтов Мирғәле, Дәүләтбаев Урал, Мырҙабулатов Абрар, Дәүләтбаев Ильяс, Дәүләтбаев Миңлебай, Сирбаев Айрат, Мырҙаҡаев Айҙар, Иҫәндәүләтов Радик, Ғәҙелшин Фәннүр, Һабанғолов Мирғәле, Уйылданов Вәкил, Истәков Раяз, Истәков Ғаяз, Истәков Ирмәк, Истәков Зәкир, Ишҡыуатов Сәғит, Ишҡыуатов Рәис, Хәсәнов Рәис һәм башҡа егеттәр гармунда оҫтар һыҙҙырғандар.

Ҡыҙҙарҙан Иҫәндәүләтова (Әхмәтова) Разифа, Иҫәндәүләтова (Хәмитова) Зәкиә, Истәкова (Нурғәләмова) Зәйтүнә, Юлғотлина (Мырҙаҡаева) Зәһүрә, Ишембетова Гөлнара, Айытова (Юнысбаева) Дилара, Йәрмөхәмәттән Мырҙабаева Зәлифә оҫта гармунсы булып танылалар.

Ә хәҙер ошо малайҙар уйнаған уйындарҙың исемдәренә иғтибар итәйек әле. "Клюк-клюк", "Лапта", "Городок", "Хоккей", "Конь Чапая", "Чижик". Уйлап ҡараһаҡ, был уйындар ҙа 70-80-се йылдарҙа заманса һаналған уйындарҙан булған бит! Бер ҙә боронғоса һөйәк уйнатып, йөндән туп эшләп маташмағандар. Заман башҡа, заң башҡа, тигәндәй, бәлки, беҙгә лә хәҙерге балаларҙы әрләүҙән тыйылып, ошо үҙебеҙҙең заманса уйындарыбыҙға нығыраҡ ылыҡтырыу, ҡыҙыҡһындырыу тураһында уйларға кәрәктер? Әйҙә, шул спорт залдарына, майҙансыҡтарына күберәк йөрөһөндәр, бассейнға барһындар, бейеүгә йөрөһөндәр. Һәр кемеһенең саңғыһы ла, конькиһы ла, ролигы ла, тубы ла булһын. 10 меңлек телефон алып биргәнсе, спорт кәрәк-яраҡтары алып биреү яҡшыраҡ түгелме икән, нисек уйлайһығыҙ, хөрмәтле атай- әсәйҙәр?

**Миләүшә ЮЛДАШБАЕВА.**
**Баймаҡ районы Ярат ауылы.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# БӨРЙӘН БАЛЫ ТАҒЫ ДАНЛАНДЫ

**Алғыштарға күмелде Бөрйән балы, балҡыштарға сумды Арғыҙма - шаулап үтте, гөрләп үтте өсөнсө Халыҡ-ара "Бөрйән балы - башҡорт даны!" этнофестивале. Иртә менән Бал байрамы үтәсәк Арғыҙма яланы күс айырған умартаны хәтерләтте: кеме тирмәһендә һуңғы эштәрен барлай, кеме ҡортсолар төйәк иткән урында бал һайлай, кеме ярыштарға әҙерләнә, кеме көҙгө сыуаҡ иртәнең хозурлығын татып кинәнә.**








Арғыҙма яланын ситләп боронғолоҡтоң үҙен һаҡлаған тирмәләр теҙелгән, урта тоштағы балсылар төйәге - байрамға йәм бирер, йән өрөр ер. Байрамдың рәсми өлөшөндә мәртәбәле ҡунаҡтарҙы баллы һүҙ, татлы тел менән ҡаршы алғас, уларҙың сәләмләүҙәрен тыңлағас, халыҡ иғтибарына район мәҙәниәтселәренең, фольклор төркөмдәренең бай йөкмәткеле театрлаштырылған тамашаһы тәҡдим ителде.

Ә оло майҙанда бал йәрминкәһе ҡыҙҙы - райондың атаҡлы солоҡсолары, ҡортсолары үҙ продукцияһын тәҡдим итте. Ҡотандан Рәфкәт Ғәҙелшин менән Венера Йосопова 2 фляга балын һатырға алып килгән. Улыныҡы менән бергә 60 баш умартаһы булған ғаилә балдан тыш та ҡортсолоҡ продукциялары тәҡдим итә - кремы ла, башҡаһы ла бар. "Балдың 3 литрлыҡ банкаһын 3 меңдән ҡуйҙыҡ. Йүкә балы - бик нескә, уға әҙерәк кенә сәскә балы ҡушылһа, тәмен ала ла ҡуя. Беҙҙең Бөрйән бал ҡорттары нәҡ йүкә балына яраҡлашҡан - йүкәгә эшләй. Быйыл йүкә балына сәскә балы ҡатнашты - монофлора балынан полифлораға тартым", - ти Рәфкәт ағай.

Район һәм республика кимәлендә үткән һәр йәрминкәлә тиерлек ҡатнашыусы (Аҫҡар ауылы) Әйүп Йомағужиндың балы үтемле, күҙ алдында Магнит ҡалаһы ҡунағы 3 литрлыҡ менән 5 банка бал алыуын күргәс, ҡорт көтөү табышлы тармаҡ икәненә тағы бер ҡат инандыҡ. "Бал байрамына 180 килограмм, йәғни 3 фляга бал килтергәйнем, әле һуңғы фляганың яртыһы ғына ҡалды. Килоһын 670 һум менән һатам. Бал йылдағынан әҙерәк булһа ла, бар, ошондай бик мөһим сара үткәреүселәргә ҙур рәхмәт", - ти Әйүп Йосоп улы.

Ҡортсолар династияһы - Ғәҙелгәрәйҙән Йомағужиндарҙың һатыу эше лә көйлө: дүрт уланы - дүрт ҡортсо менән килгән Флүрә апайҙың бал ҡушып эшләнгән ризыҡтары ла мул - алтын тәҫлә сәк-сәктәре, бәлеш-торттары бихисап. Улы Рөстәм 80 тирәһе умарта тота. Шәфкәте БДАУ умартасылығында эшләй, Ғәзизе лә ата-бабаһынан ҡалған кәсеп-шөғөлгә битараф түгел. Юлдаштары ағай-энеһенең балын Өфөгә алып барып һатыу менән мәшғүл.

Яңыраҡ Өфөлә үткән ҡортсолар ярышында район намыҫын яҡлап ҡайтҡан Ғиззәтуллиндар ҙа сауҙа барышынан ҡәнәғәт - 30-ҙан ашыу умарта тотҡан Илшат Рифҡәт улы бөгөн 1 фляга бал килтергән. Ҡатыны, улы Илнар ҙа уға ярҙамлаша. "Бал аҡсаһы хажға китте - атайымды бал һатҡан аҡсаға Сәғүд Ғәрәбстанына оҙаттыҡ", - ти хужа. Ана бит, хәйерле кәсептең аҙағы ла хәйерле - хаждың хажына барырлыҡ аҡса сығанағы бит ул ҡорт тотоу!

Моразымдан Дамир менән Фәриә Тимерғәлиндар ҙа балды мул алып килгән - сауҙаларына - бәрәкәт, тиергә генә ҡала.

Бал ҡушылған ризыҡтарҙан да өҫтәлдәр һығылып торҙо. Ҡолғана оҫтабикәһе Тәслимә Ғәйетбаева йылдағыса тиҫтә-тиҫтә төр ризыҡ бешереп алып килгән - баллы бауырһаҡтары, бәлештәре, "айыу"лы торттары иҫ китмәле! Ҡыҙыл эремсеккә лә бал ҡушып килтергән, көртмәлеле торттары ла бал тәме әйтә! Кейекбайҙан Рәхилә Йәнекова бал ҡушып 30 төр ризыҡ әҙерләгән, 3 литрлыҡ 15 банка балын һатыуға сығарған.

Район мәғариф бүлеге биләмәләрендә умартасылыҡ, солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән башҡорттарҙың йәшәйеш-торошон һүҙһеҙ ҙә бәйән итеүсе тирмәләре, ҡабыҡ "өй"ҙәре, бай күргәҙмәләре, дадандар теҙелгән умарталыҡтары, иң мөһиме, ата-баба кәсебен үҙләштереүсе уҡыусылар эшләп тора. Фитосәй менән һыйлаусыһы, солоҡсолоҡ, умартасылыҡҡа бәйле инструменттар менән таныштырыусыһы, райондың йәш умартасыларының төрлө кимәлдәге уныштары хаҡында бәйән итеүсеһе лә бар. Ошонда уҡ йәш умартасыларҙың ярыштары ла бара: тәүге турҙа балалар теория буйынса һынау тотһа, икенсе турҙа солоҡсолоҡ, ҡортсолоҡ инструменттары буйынса белемен һынай, өсөнсө турҙа ҡышлауға умарталар әҙерләй. Ғәлиәкбәр мәктәбенең 9-сы синыф уҡыусыһы Ғаян Ишмөхәмәтов мастер-класс күрһәтә.

Беҙҙең районда ғына ныҡлы һаҡланып ҡалған солоҡсолоҡ кәсебенә бәйле үткән "Солоҡсолар" конкурсы байрамдың төп биҙәге, иң күп тамашасыны йәлеп иткән урын булғандыр. Солоҡсоларҙың түмәрҙәрҙән солоҡ умарталары юныып ярышыуын; эргәлә генә "Шүлгән-Таш" ҡурсаулығы хеҙмәткәрҙәре: Батыр Толомғужиндың күс тотоу өсөн моҙға, Сәлимйән Мостафиндың боронғоса ағастан инә тотоу өсөн көбө эшләүен, Сынтимер Иҫәнғужиндың үгеҙ тиреһенән әҙерләнгән ҡайыштарҙан кирәм үреүен һәр кем ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтте. Теләүселәр солоҡ ағасына ла үрмәләп ҡараны. Таһыллыҡ, оҫталыҡ талап ителгән солоҡ юныу конкурсында Илфат Әминев менән Салауат Толомғужин енеп сыҡты. Айнур Иҫәнаманов менән Илһам Маликов - икенсе, Әнис Дилмөхәмәтов менән Руслан Исламбаев өсөнсө урын алды.

Шулай итеп, байрамда төрлө спорт ярыштары ла ойошторолдо, айырыуса 16 ир-ат, 4 ҡатын-ҡыҙ һәм 4 уҡыусы ҡатнашлығында үткән мәргән уҡсылар ярышы байрамдың күркәм өлөшөнә әүерелде. Ҡыҫҡаһы, Бал байрамы ысын мәғәнәһендә беҙҙең бөрйәнлекте, башҡортлоҡто, аҫабалыҡты дәлилләүсе сара булды - унда төп һөнәрҙәребеҙ, кәсептәребеҙ, бай тарихыбыҙ, юғары сәнғәтебеҙ, үҙенсәлекле фольклорыбыҙ сағылыш тапты. Рухи ҡиммәттәргә матдиһы ла өҫтәлде: бал һатҡан баймандар бол арттырҙы - Бөрйән балының даны сиктәрҙән ашты.

**А. ҒАРИФУЛЛИНА, Д. БАЙНАЗАРОВ,**
**Бөрйән районының "Таң" гәзите хәбәрселәре.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Рәхмәтле булыу һәм байлыҡ

Барлыҡ рухи тәғлимәттәрҙә рәхмәт белдереүҙең һәм рәхмәтте тойоуҙың мөһимлеге хаҡында әйтелә. Рәхмәтте кем өсөндөр түгел, ә үҙең өсөн әйтергә кәрәк, сөнки тормоштан нимә тураһында күберәк уйлайбыҙ, шуны алабыҙ. Донъяға үҙебеҙҙә булған нәмәләр өсөн рәхмәтле булып, үҙебеҙҙе байраҡ тоябыҙ, тимәк, тағы ла ыңғай нәмәләрҙе тартып килтерәбеҙ. Кемдер бөтөнләй аҡса һанай белмәй, йәғни күпме эш хаҡы алғанын да, күпме тотонғанын да, кемгә күпме бурысҡа биргәнен дә иҫәпләмәгән кешеләр бар һәм улар барыбер етеш йәшәй. Тимәк, рәхмәтле булыу, тормоштоң һинә үҙ байлығынан өлөш сығарыуҙан туҡтамауына эске ышаныс логика һәм математикаға ҡарағанда мөһимерәк роль уйнай.

**Йөрәк ҡушыуы буйынса йәшәгеҙ.** Беҙҙең тормош миссиябыҙ проблемаларҙан ҡотолоу түгел, ә тормошто ҡыҙыҡлы итеү.

**Яратҡан эшегеҙ менән шөғөлләнегеҙ.** Был бүлектә беҙ ике төп темане ҡарарбыҙ: донъяға ниндәй мөнәсәбәттә булыуыбыҙҙы үҙебеҙ хәл итәбеҙ, теләк булғанда, теләһә ниндәй эштән ҡәнәғәтлек алырға мөмкин; әгәр яратҡан эшең менән шөғөлләнһән, уңыш ҡаҙаныу өсөн мөмкинлегең күберәк буласаҡ, күберәк эш хаҡы ла аласаҡһың.

Беҙҙә нисек килеп сыға? Башта "Әлеге ваҡытта нимә менән мәшғүлһең, шунан ҡәнәғәтлек ал", тип, артынса уҡ "йөрәгең ҡушҡанса йәшә" тием. Бында ҡапма-ҡаршылыҡ юҡмы? Юҡ. Беҙгә бик йыш ҡыҫҡа ваҡытҡа билдәләнгән маҡсатҡа өлгәшеү өсөн барлыҡ хәлторошто тулыһынса файҙаланырға кәрәк. Мәҫәлән, аҡса етмәй икән, анығ ҡына план барлыҡҡа килмәйенсә, эш алыштырмау яҡшы. Ә оҙайлы перспективала... кеше бары тик яратҡан эшен башҡарып ҡына үҙен аса ала.

**Барлыҡ эштәр ҙә яҡшы.** Беҙгә һәр ваҡыт башҡаларҙың эше еңелерәк тә, ҡыҙыҡлыраҡ та кеүек тойола. Уларға аҡсаны ла күберәк түләйҙәр. Әммә ниндәйҙер бер ваҡытта беҙ идеаль вазифа булмағанын аңлайбыҙ. Ни өсөн? Сөнки бер кеше икенсегә үҙе башҡара алмаған йәки башҡарырға теләмәгән эш өсөн генә түләргә риза. Йәғни, әгәр килеп тыуған проблемаларҙы хәл итеү ихтыяжы булмаһа, барыбыҙ ҙа эшһеҙ ултырыр инек. Әгәр эшегеҙ оҡшамай икән, икенең берен һайларға кәрәк: йә уға булған мөнәсәбәтегеҙҙе үҙгәртәһегеҙ, йә икенсе эш табаһығыҙ. Тормош тураһында хыялланып, бик йыш: "Эшем еңелерәк булһа, шул тиклем бәхетле булыр инем!" - тибеҙ. Ысынбарлыҡта бик еңел эш беҙгә ҡәнәғәтлек килтермәй. Әгәр эш ныҡ еңел булһа, беҙ уны ташлайбыҙ. Ауырлыҡты шул тиклем яратабыҙ, хатта уларҙы буш ваҡытта күңел асыу өсөн эҙләйбеҙ. Ни өсөн гольф уйыны популяр? Сөнки соҡорға шарҙы тура килтергәнсе аҡылдан яҙырға мөмкин. Күп хеҙмәт өсөн бер төрлөлөк хас. Секретарша бер хатты баҫып бөткәс, икенсеһенә тотона, кино йондоҙҙары бер үк дублде йөҙәр тапҡыр ҡабатлай. Тормош бөткөһөҙ ҡабатлауҙан тора. Тормошобоҙҙо "эш" һәм "ял"ға бүлеп, үҙебеҙҙе кәрәкмәгән сиктәргә ҡыуалап индерәбеҙ. Был инде: "Эшкә барырға ваҡыт, тимәк, эш һуңына тиклем тормош түгел, ә тотош ыҙа буласаҡ", - тигән кеүек. Эште ялға ҡаршы ҡуйғансы, уларҙы тормош тип аталған процеҫҡа берләштереү яҡшы. Эшкә һөйөү кешегә булған мөхәббәттән бер нимәһе менән дә айырылмай - әгәр һин ғашиҡһың икән, етешһеҙлектәрҙе күрмәйһең. Ә бына оҙайлы перспективала яратыу - ҡатмарлыраҡ. Яратырға белергә һәм теләргә кәрәк.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 11 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.15 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Давай поженимся!" (16+).
13.15, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Отчий берег". 1-я и 2-я серии. Драматический сериал (16+).
23.305"Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Четыре сезона в Гаване". Худ. фильм (18+).
02.20, 03.05 "Скажи что-нибудь". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Любовь к деньгам с первого взгляда". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кровь". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (16+).
01.50 "Василиса". Сериал (12+).
03.45 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Близнецы". Сериал (12+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.) (12+).**
**14.00, 23.15 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (12+).**
**19.15 "Бай бакса" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Черный скакун". Худ. фильм (12+). По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 12 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.30 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Давай поженимся!" (16+).
13.15, 15.15, 17.00 "Время покажет"
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Отчий берег". 3-я и 4-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Четыре сезона в Гаване". Худ. фильм (18+).
02.05, 03.05 "Квинтет". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Кто старое помянет". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кровь". 11-я и 12-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Василиса". Мелодраматический сериал (12+).
03.45 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Близнецы". Сериал (12+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (6+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Орнамент" (12+).**
**18.45 Хоккей. Чемпионат России - Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Динамо" (Рига).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Коко до Шанель". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.) (16+).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 13 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Давай поженимся!" (16+).
13.15, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Отчий берег". 5-я и 6-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Четыре сезона в Гаване". Худ. фильм (18+).
02.05, 03.05 "Тайный мир". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Миллионер в трущобах". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кровь". 13-я и 14-я серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Василиса". Мелодраматический сериал (12+).
03.45 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Близнецы". Сериал (12+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (16+).**
**17.45 Док. фильм "Суворов. Альпийский поход" (12+).**
**19.15 "Автограф" (12+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Телецентр".**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.55 "Розыгрыш "Фармленд" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Сломанные цветы". Худ. фильм (16+).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 14 СЕНТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Давай поженимся!" (16+).
13.15, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Отчий берег". 7-я и 8-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Четыре сезона в Гаване". Худ. фильм (18+).
02.05, 03.05 "Лестница". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Гоп-стоп". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Черная кровь". 15-я и 16-я, заключительная, серии. Драматический сериал (12+).
23.15 "Новая волна-2017". Трансляция из Сочи.
01.40 "Василиса". Мелодраматический сериал (12+).
03.35 "Родители". Комедийный сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Близнецы". Сериал (12+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**15.15 "Учим башкирский язык".**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**18.45 Хоккей. Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Торпедо НН" (Нижний Новгород).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Спокойной ночи". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 15 СЕНТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10, 05.30 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Давай поженимся!" (16+).
13.15, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Новый сезон (12+).
23.25 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.20 "Ричи Блэкмор" (16+).
02.10 "Канонерка". Приключения (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Не сидите на столе". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 Юбилейный концерт Филиппа Киркорова на "Новой волне".
00.30 "Любовь нежданная нагрянет". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Близнецы". Сериал (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Н.Асанбаев. "Вишневая гора" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Гора новостей" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45, 21.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Современник" (12+).**
**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирма".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Бала-саға" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**23.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**24.00 "Расплата". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз).**
**02.15 Ф.Амирхан. "Неравные" (12+).**

## 16 СЕНТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Ледниковый период: погоня за яйцами".
06.45 "Последняя электричка". Сериал (16+).
08.45 "Смешарики. Спорт".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 К юбилею Игоря Кириллова. "Как молоды мы были..." (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15, 15.20 "Поделись счастьем своим". Мелодраматический сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".
19.50, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
23.00 "Короли фанеры" (16+).
23.50 "Планета обезьян: революция". Фантастический боевик (16+).
02.10 "Ковбойши и ангелы". Худ. фильм (12+).
03.50 "Три балбеса". Худ. фильм (12+).
05.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
04.40 "Неотложка". Сериал (12+).
06.35 Мультутро. "Маша и Медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Россия. Местное время" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного". Развлекательно-интеллектуальное шоу.
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" Программа ко Дню рождения Евгения Петросяна (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Моя мама против". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00, 00.30 "Новая волна-2017". Трансляция из Сочи.
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Хочу быть счастливой". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
01.25 "Испытание верностью". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 19.00 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Три котенка".**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "У дачи" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Учу башкирский язык" (6+).**
**13.45 "Орнамент".**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Весело живем" (12+).**
**16.15 Хоккей. Чемпионат КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Спартак" (Москва).**
**19.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Колесо времени" (12+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 01.45 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Лабиринт Фавна". Худ. фильм (16+).**
**02.15 Н.Абдыкадыров. "Последнее море Чингисхана" (12+).**

## 17 СЕНТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Последняя электричка". Сериал (16+).
08.15 "Смешарики. ПИН-код". Мультсериал.
08.25 "Часовой" (12+).
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым" (12+).
10.35 "Честное слово" с Юрием Николаевым".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Главный котик страны".
13.00 "Теория заговора" (16+).
14.15 Международный музыкальный фестиваль "Жара". Гала-концерт.
17.30 "Хороший мальчик". Комедия (12+).
19.20 "Лучше всех!" Детское шоу талантов.
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Хичкок". Биографическая драма (16+).
00.20 "Белый плен". Драма.
02.30 "Модный приговор".
03.30 "Мужское/Женское" (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00 "Неотложка". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.00 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
14.00 "Вести".
14.20 "Злая судьба". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Удивительные люди-2017".
20.00 "Вести недели".
21.50 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
23.45 Торжественное закрытие Международного конкурса молодых исполнителей "Новая волна-2017". Трансляция из Сочи.

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Йома".**
**08.30 Международный уфимский марафон.**
**12.00 "Гора новостей" (6+).**
**12.15 "Сулпылар".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Учу башкирский язык" (6+).**
**13.45 "Орнамент".**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Млечный путь" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Т.Гарипова. "Гильмияза" (12+).**
**19.15 "Весело живем" (12+).**
**19.30 Репортаж с открытого детско-юношеского телекинофестиваля "Толпар" (6+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Дознание" (16+).**
**20.45 Футбол. ФК "Зенит" (Санкт-Петербург) - ФК "Уфа" (Уфа).**
**22.45 Новости недели.**
**22.30 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.45 "Красная кнопка" (16+).**
**00.30 "Вечер.com" (12+).**
**01.15 "Свидание с джазом" представляет..." (12+).**
**02.15 "Хладнокровный Люк". Худ. фильм (16+).**

**✓ Төркөмдөң продюсеры Радмир Муфтахин билдәләүенсә, иң яҡшы эстрада музыканттары - ул джаз йүнәлешендә эшләүселәр. Шуға ла илдең иң ҙур джаз майҙаны вәкилдәренән юғары баһа алыу - үҙе еңеү.**



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# СТӘРЛЕЛӘ ТАМАША




**Театрҙарға тамашасылар йәлеп итеү, театр сәнғәтен пропагандалау маҡсатынан үткәрелгән "Театр төнө" мәҙәни акцияһы быйыл да ойоштоорола. Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе коллективы ла ойоштора бындай акцияны һәм Стәрлетамаҡ халҡын ҡыҙыҡлы саралар менән ҡыуандырмаҡсы.**

Был көндө театр артистары һеҙҙе театраль троллейбуста йөрөтәсәк. Был үҙенсәлекле акция беренсе тапҡыр үтә. Сағыу костюмдар кейгән артистар менән бергә шиғыр һөйләргә, йырҙар йырларға, уйындар уйнарға мөмкин буласаҡ. Балалар өсөн "Күнелле һабантуй" тип аталған театрлаштырылған тамаша ла буласаҡ. Ҡыҙыҡлы сюжетҡа ҡоролған яңы уйын программаһы, дискотека уларға өҡшаясаҡ. Сәхнә артындағы тормош менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн экскурсия-квест ойошторола. "Театр - ул беҙ!" театрлаштырылған концерт театр алдындағы майҙанда киске 6-ла башлана. Унан һуң күптәрҙең яратып ҡараған спектакленә - "Күнелле йәшәйбеҙ!" комедияһына саҡырабыҙ. "Театр төнө" акцияһында әүҙем ҡатнашып, яңы миҙгелгә үҙенсәлекле старт бирегеҙ, ҡәҙерле тамашасылар. Сараларға инеү бушлай.

**Эльвира ЯҠУПОВА.**

# МӨНӘЖӘТСЕЛӘР КӨС ҺЫНАША



**Сибайҙа V Төбәк-ара мөнәжәтселәр конкурсы үтә. Ул 20 сентябрҙә, ҡаланың Балалар ижады үҙәгендә буласаҡ. Әлеге мәлдә ҡатнашыусыларҙан ғаризалар ҡабул ителә.**

Төбәк-ара бәйге өс номинацияла ойошторола: мөнәжәт башҡарыу; нәсихәт башҡарыу; Мәүлит Ямалетдинов шиғри юлдарға һалған Ҡөрьән сүрәләрен башҡарыу. Һәр ҡатнашыусы төрлө характерҙағы ике йәки өс әҫәр башҡарырға тейеш. Ҡатнашыусылар ике төркөмгә бүленә - 17 йәшкә тиклем һәм 18 йәштән өлкәндәр. Еңеүселәр айырым башҡарыусылар һәм коллективтар араһында, һәр йәш категорияһында билдәләнә. Ғаризалар Сибай сәнғәт колледжында, Сибай ҡалаһы, Таусылар проспекты, 14, адресы буйынса 15 сентябргә тиклем ҡабул ителә. Бәйләнеш өсөн телефон һәм факс: 8(347-75) 2-46-32; 8-937-312-17-21. Электрон адрес: regstar88@mail.ru. Сараны Республика халыҡ ижады үҙәге ярҙамында Сибай ҡала хакимиәте, Сибай сәнғәт колледжының "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе, Сибай "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы, Сибай башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ойошторо.

Конкурстың маҡсаты: башҡорт милли мәҙәниәтенең һирәк башҡарылған жанрын һаҡлау; мөнәжәт, нәсихәт башҡарыусыларҙы асыҡлау, уларға ярҙам итеү; мөнәжәттәрҙе һәм мөнәжәт һөйләү сәнғәтен тергеҙеү; милли мираҫ өлгөһөндә йәштәрҙә илһөйәрлек тәрбиәләү.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 11 (20) дүшәмбе | 5:13 | 6:43 | 13:30 | 18:11 | 19:41 | 21:11 |
| 12 (21) шишәмбе | 5:15 | 6:45 | 13:30 | 18:08 | 19:38 | 21:08 |
| 13 (22) шаршамбы | 5:16 | 6:46 | 13:30 | 18:06 | 19:36 | 21:06 |
| 14 (23) кесе йома | 5:18 | 6:48 | 13:30 | 18:03 | 19:33 | 21:03 |
| 15 (24) йома | 5:20 | 6:50 | 13:30 | 18:01 | 19:31 | 21:01 |
| 16 (25) шәмбе | 5:22 | 6:52 | 13:30 | 17:58 | 19:28 | 20:58 |
| 17 (26) йәкшәмбе | 5:24 | 6:54 | 13:30 | 17:56 | 19:26 | 20:56 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# АЙНУР УҠЫРҒА КИТКӘН

**Башҡортостан кинематографистары берлегенең Йәштәр үҙәген продюсер, Өфөнөң МакГаффин исемендәге киномәктәбе директоры Гөлфиә Шәрипова етәкләйәсәк.**

Быға тиклем Йәштәр үҙәге рәйесе булып Айнур Асҡаров эшләй ине. Ул Мәскәүгә уҡырға китеү сәбәпле, был вазифаны ҡалдырған. Кинематографистар берлегенән Йәштәр үҙәге кураторы итеп режиссер, БР кинематографистары берлеге ағзаһы Таңсулпан Бураҡаева билдәләнгән.

"Башҡортостан" киностудияһында Йәштәр үҙәге ойошторған ултырышта "Көмөш Аҡбуҙат" Халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале сиктәрендә уҙасаҡ III Башҡорт питчингын үткәреү мәсьәләләре лә ҡаралды. "Көмөш Аҡбуҙат" кинофестивален 12-14 октябрҙә үткәреү планлаштырылған. Шулай уҡ "Башҡортостандың йәш киноһы" фестивале тураһында ла һөйләшеүҙәр бара.

# "ZAMAN" ТӨРКӨМӨНӨҢ ЯҢЫ УҢЫШЫ




**"ZAMAN" этно төркөмө "Усадьба JAZZ" Халыҡ-ара фестиваленең финалына үтте. Финал икенсе аҙнала Сочи ҡалаһында уҙасаҡ.**

Финалистар исемлеге бер нисә ай буйына тулыланды. Баһалама ағзалары араһында йырсы Нино Катамадзе, "Евровидение-2017" ҡатнашыусыһы, йырсы Арцвик Арутюнян, "Коммерсантъ" гәзитенең музыкаль күҙәтеүсеһе, радио алып барыусыһы Борис Барабанов, Universal Music Russia компанияһы генераль директоры Дмитрий Коннов, Umaker компанияһы генераль директоры Константин Копытов. Төркөмдөң продюсеры Радмир Муфтахин билдәләүенсә, иң яҡшы эстрада музыканттары - ул джаз йүнәлешендә эшләүселәр. Шуға ла илдең иң ҙур джаз майҙаны вәкилдәренән юғары баһа алыу - үҙе еңеү.

"Усадьба JAZZ" - үҙендә джаз, фанк, world music, джаз-рок, блюзды берләштергән халыҡ-ара кимәлдәге фестиваль. 17 йыл ойошторолоу дәүерендә уның сәхнәһендә донъяның төрлө төбәктәренән 500-ҙән ашыу музыкант сығыш яһаған. Улар араһында - Маркус Миллер (США), Бренфорд Марсалис (США), Зап Мама (Бельгия), Ришар Бона (Камерун), Джамала (Украина), Нильда Фернандес (Франция), Леонид Агутин, Игорь Бутман, Валерий Сюткин, Анатолий Кролл, Даниил Крамер, Сергей Жилин, Борис Гребенщиков, Диана Арбенина, Антон Беляев и Therr Maitz.

# ДРАМАТУРГТАР ЭҘЛӘЙБЕҘ



**Республика драматургия һәм режиссура үҙәге драматургия семинарында ҡатнашыу өсөн яңы пьесалар ҡабул итә. Семинарҙа ҡатнашыусыларға Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың билдәле театр белгестәре оҫталыҡ дәрестәре ойоштораса́ҡ.**

Бынан тыш, семинар сиктәрендә башҡа саралар, мәсәлән, билдәле драматургтар менән осрашыу, режиссура лабораторияларын күрһәтеү ҡаралған. Конкурсҡа әҫәрҙәр түбәндәге йүнәлеш буйынса ҡабул ителә: ололар аудиторияһы өсөн пьеса; үсмерҙәр өсөн пьеса; балалар өсөн пьеса. Семинарҙа ҡатнашыу өсөн 1 октябргә тиклем башҡорт, рус телдәрендә һуңғы ике йыл эсендә яҙылған пьеса ебәрергә кәрәк. Ҡатнашыусының Рәсәй Федерацияһы гражданины булыуы мотлаҡ. Башҡорт телендәге пьесалар рус теленә тәржемә менән ҡабул ителә. Әҫәрҙең максималь күләме - 40 бит. Электрон адрес: dramaturgiya@inbox.ru

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ



# ҺӘЛӘТТӘР АСЫҠЛАНА

**Рәсәйҙең "Мисс һәм Мистер Студент-2017" конкурсында Башҡортостан исеменән ике студент сығыш яһай.**

Зөһрә Мөхәрәмова - Башҡорт дәүләт университетының филология һәм журналистика факультетында 4-се курста, Данис Йосопов Өфө дәүләт авиация техник университетының информатика һәм робот техникаһы факультетында 4-се курста уҡый. Икеһе лә - "Bashkirian Beauty" студияһы моделдәре. Конкурсҡа әҙерлек барышында Данис менән Зөһрә Санкт-Петербургта йәштәр форумында ҡатнашты ла инде, унда "Мисс һәм Мистер Студент-2017" проектын ойоштороусылар менән осрашыуҙар һәм оҫталыҡ дәрестәре үтте. Әле "Бәйләнештә" социаль селтәрендә тауыш биреү башланды. Республика халҡы Башҡортостан вәкилдәре өсөн тауыш бирә ала. XI Бөтә Рәсәй интеллект, ижад һәм спорт конкурсы 22-27 сентябрҙә Силәбелә уҙғарыла. Конкурс эштәре араһында "Минең студент тормошом" видеопрезентацияһы һәм "Минең буласаҡ һөнәрем" интеллектуаль конкурсы, шулай уҡ ГТО нормаларын тапшырыу, ижади конкурс бар. Сараны ойоштороусылар - Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы, Силәбе өлкәһе хөкүмәте, "Рәсәй Йәштәр союзы" дөйөм Рәсәй йәмәғәт ойошмаһы. Төп маҡсаты - һәләтле йәштәрҙе асыҡлау һәм уларға ярҙам итеү, студенттар ижадын һәм спортын пропагандалау, уларҙы киң мәғлүмәт саралары ярҙамында популярлаштырыу, Рәсәй халыҡтарының мәҙәниәтен, йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен һаҡлау, ил төбәктәре йәштәре араһында ижтимағи, социаль һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе үҫтереү.


ИҒЛАН

Башҡортостан Республикаһының дәүләт автономиялы һаулыҡ һаҡлау учреждениеһы "3-сө Балалар стоматология поликлиникаһы" (Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 16/1) ошонда теркәлгән 0 йәштән алып 18-ҙе тулмаған балалар һәм үсмерҙәрҙе ҡабул итә.

Поликлиника медицина хеҙмәте учреждениеның эш режимына һәм белгестәрҙең эш графигына ярашлы күрһәтелә. Эш ваҡыты: дүшәмбе - йома 8.00 - 20.00. Шәмбе - 8.00 - 16.00.

1 йәшкә тиклемге пациенттар мөрәжәғәт иткән көндә сиратһыҙ ҡабул ителә. Алдан яҙылырға кәрәкмәй. 1 йәштән өлкән балалар медицина тикшеренеүе үткәндә шулай уҡ алдан яҙылмайынса көнөндә үтә. Тиҙ ярҙам мөрәжәғәт иткән көндә күрһәтелә.

**Табипҡа яҙылыу өсөн:**

- www.gosuslugi.ru йәки rb.k-vrachu.ru электрон адресы аша интернет порталы;
- (347) 246-32-18 телефоны аша поликлиника регистратураһы;
- Кесә телефондары аша 09383 номеры, стационар телефондар өсөн 246-93-83 номеры аша (поликлиниканың коды - 173) контакт үҙәге;
- Поликлиникала урынлашҡан Инфомат аша.

Мотлаҡ медицина страховкаһы буйынса медицина ярҙамы алыу өсөн 14 йәшкә тиклем балаларға тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ, 14 йәштән өлкәндәргә РФ гражданины паспорты менән мотлаҡ медицина страховкаһы полисы кәрәк.

**Хөрмәтле пациенттар!** 3-сө Балалар стоматология поликлиникаһының эшен баһалау өсөн "Медицина ойошмаһының амбулатор шарттарҙа күрһәткән хеҙмәттәренең сифатын баһалаусы анкета"ны тултырыуығыҙҙы һорайбыҙ.

Анкетаның электрон варианты РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы сайтының **www.rosminzdrav.ru** "Медицина ойошмалары хеҙмәттәренең сифатын бойондороҡһоҙ баһалау" бүлегендә һәм поликлиниканың рәсми сайтында ufa-dsp3.ru урынлашҡан. Анкетаны поликлиника регистратураһында ла ала алаһығыҙ.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ТУҒАНДАР ОСРАШТЫ

**Өфөлә "Туғанлыҡ" VI Төрки телле театрҙарҙың халыҡ-ара фестивале асылды. Ҡунаҡтар милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың һәйкәленә сәскәләр һалды. Артабан мәҙәни сара М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры алдындағы майҙанда дауам итте. Ҡунаҡтар өсөн Театр урамында, театр алдындағы майҙанда матур тамаша ойошторолдо.**

Фестивалгә Хакасия, Төркиә, Ҡырғыҙстан, Дағстан, Әзербайжан, Ҡабарҙы-Балҡар, Тыва, Сыуаштан, Ҡаҙағстан, Татарстан һәм Башҡортостандан 11 иң яҡшы театр коллективтары килде. Башҡорт театр сәнғәте менән М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры таныштырҙы, фестиваль программаһы Жан Ануйҙың "Антигона" драмаһы менән асылды.

Фестивалде ябыу тантанаһы 14 сентябрҙә Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә үтәсәк.












ХОККЕЙ

САЛАВАТ ЮЛАЕВ
хоккейный клуб

# ӨС ЕҢЕҮ, ӨС ЕҢЕЛЕҮ

**Континенталь хоккей лигаһының 2017-2018 уйын миҙгеле башланды. Өфө командаһын быйыл яңы тренер - Эркка Вестерлунд - етәкләй, ә капитан штурвалы Энвер Лисин ҡулында. Уйынсылар рәтендә лә үҙгәрештәр етерлек. Шулай итеп, хоккей командалары - ҡаты алыштарға, ә көйәрмәндәр яратҡан уйынсылары өсөн янып-көйөргә әҙерҙәр.**

Тәүге уйынды "Салауат Юлаев" алыҫ Владивосток хоккейсылары - "Адмирал" менән уҙғарҙы. Юлаевсылар өсөн осрашыу еңел бирелмәне. Тәүге шайбаны ҡунаҡтар үҙ иҫәбенә яҙҙы. Шулай ҙа "йәшел машина" уйынсылары үҙҙәрен ҡулға алып, иҫәпте үҙ файҙаһына 3 мәрәйгә тиклем еткерҙе. КХЛ-дың унынсы уйын миҙгеленең беренсе осрашыуын юлаевсылар еңеү менән тамамланы.

Регуляр чемпионаттың икенсе уйынында Өфө командаһына ҡаршы Хабаровск ҡалаһының "Амур"ы сыҡты. Был осрашыуҙа ҡунаҡтар уңышлыраҡ булып сыҡты. Көсөргәнешле матчты улар үҙ файҙаһына 4:5 иҫәбе менән тамамлауға өлгәште.

Өйҙәге уйындар серияһын юлаевсылар "Куньлунь Ред Стар" менән дауам итте. Ике команда хоккейсылары ла был осрашыуҙа, ҡыҙыулыҡтарына баш була алмайынса, уйын барышында бер-нисә тапҡыр айҡашып алдылар. Уйын иҫәбен тик өсөнсө осорҙа ғына "Салауат Юлаев"тың яңы һөжүм итеүсеһе Филип Ларсен асты. Ләкин Пекин уйынсылары тәүҙә иҫәпте тигеҙләүгә, ә уйын бөтөүгә 3 секунд ҡалғас, алға сығыу яйын тапты. Осрашыу иҫәбе ҡунаҡтар файҙаһына - 1:2.

"Сочи" менән осрашыу "Салауат Юлаев" өсөн КХЛ уйындарындағы иң һөҙөмтәлеһе булды. Көрәштәшен 11:3 иҫәбе менән ҡыйратып, юлаевсылар көйәрмәндәренә ҙур байрам бүләк итте.

Түбәнге Каманың "Нефтехимиг"ына ла юлаевсыларҙан "эләкте". Ағымдағы уйын миҙгеленең бишенсе осрашыуын Өфө уйынсылары үҙ файҙаһына 6:0 иҫәбе менән тамамланы.

Өфөләге тәүге уйындар серияһын юлавсылар "Барыс" менән осрашып тамамланы. Астана хоккейсылары етди әҙерлек күрһәтеп, юлаевсыларға 5 мәрәй "бүләк" итте. Хужалар иһә уларға тик 3 шайба менән генә яуап бирә алды.

Ситтәге матчтарҙа ла юлаевсылар һынатмайынса, һөҙөмтәле һәм уңышлы уйын күрһәтер, тип ышанайыҡ.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДАРЫУ ҺАТЫП АЛДЫҢ ДА...

## һаулыҡ һатып алдың, тимә

Кәрәкһеҙ нәмәләр, нигеҙҙә, бик ҡыйбат тора.

**(Катон Старший).**

Йәшлек - ул кешенең ахмаҡлыҡ эшләүҙән ҡурҡмаған сағы.

**(Петр Капица).**

Дошмандарығыҙҙы ғәфү итегеҙ, ләкин исемдәрен онотмағыҙ.

**(Джон Кеннеди).**

Буш ваҡыттары күп булған кешеләр, ғәҙәттә, буш ваҡыттары булмаған кешеләргә ваҡыт уҙғара.

**(Рене Клер).**

Ғүмер буйы шундай ахмаҡтар менән аралашып, нисек аҡыллы булып китмәҫкә инде уға?

**(Василий Ключевский).**

Әгәр ҙә кеше уңыштарға ышанмаһа, тимәк, уның тормош тәжрибәһе аҙ.

**(Джозеф Конрад).**

Кешеләр һине белмәгәнгә бошонма, һин кешеләрҙе белмәгәнгә бошон.

**(Конфуций).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ ҡомһоҙ сауҙагәр баҙарҙа йөрөгәндә үҙенең көшөләгөн юғалта. Йүгергеләп эҙләй-эҙләй, көшөләгөн таба алмай. Шунан ул аҡсаһын тапҡан кешегә йөҙ һум бирергә вәғәҙә итеүе тураһында иғлан итә.**

**Юғалған көшөләктө Вәли исемле итексе табып ала. Ул бик гүзәл һәм намыҫлы кеше була. Табып алған көшөләктөң хужаһы билдәле булыу менән сауҙагәргә йүнәлә һәм уға көшөләгөн ҡайтарып бирә. Сауҙагәр бик һаран һәм оятһыҙ кеше була. Көшөләктөң табылыуына ҡыуаныһа ла, быны белдермәй, әсендәге аҡсаһын иҫәпләп ҡарай ҙа, Вәлигә былай ти: "О, дуҫ кеше, һин үҙеңә тейешле йөҙләктө алғанһың икән". Уның алдашҡанына йәнә көйгән Вәли сауҙагәрҙе яғаһынан ала: "Мин ярлы кеше, әммә бур түгел. Аҡсаңды бирмәһәң бирмә, әммә мине яла яғыу булма", - ти ул сауҙагәргә. Оятһыҙ сауҙагәр яла яғыуҙы дауам итә. Шунан улар судьяға киләләр. Судья ике яҡты ла тыңлап тора ла һығымта яһай: сауҙагәр алдаша. Әммә йәнә көйгәнен белдермәй генә үҙенең ҡарарын еткерә: "Сауҙагәр көшөләгөндә йөҙ тәңкәһе етмәй, ти. Ә итексе унан аҡса алмағанын раҫлай. Уларҙың икеһе лә дөрөҫ һөйләй. Тимәк, итексе тапҡан был көшөләк икенсе бер кешенеке булып сыға һәм эйәһе табылғансы, ул бында ҡаласаҡ". Ҡомһоҙ сауҙагәр үҙенең ҡылығына үкенә, әлбиттә, әммә һуң була".**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 8 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 1828/09